ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 май (һабанай)

2018

№ 19 (801)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ант биреү - иман килтереү**



3

**Мин белгән ветеран**



6

**Ғаиләнең рухи сәләмәтлегенә...**

ир - ир урынында, ҡатын ҡатын урынында булғанда өлгәшелә



8-9

**Ҡоҙалар-ҡоҙасалар...**

йәки Районларыбыҙҙағы диалекттар хаҡында



11

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 10 майҙан 20 майға тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 490 һум 92 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II төркөм инвалидтары - 440 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылайыҡ, тип саҡырабыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғәҙәттә, ата-әсәгә, балаңдың изгелеген күр, тип теләйҙәр. Ошо теләкте нисек аңлайһығыҙ?

***Люция СӘҒИТОВА, Учалы районы Рысай ауылы фельдшеры:*** Халҡыбыҙҙың борондан килгән матур ғәҙәттәре, йола-ырымдары күп. Ата-әсәгә, балаларыңдың изгелектәрен күреп йәшәргә насип итһен, тигән теләк теләү, алҡышланыу ана шуларҙың береһе. Уны, ғәҙәттә, донъя күргән, йәшәгән әбей-бабайҙар кемгә лә булһа рәхмәтен белдереп, сауаптарын яуҙырып әйтә. Изгелек иткән - изгелек күрер, тип тә әйтә халҡыбыҙ. Бәйғәмбәребеҙ нәсихәттәренең береһендә: "Балаларыңдың үҙеңә лә яҡшы һәм игелекле булыуын теләһәң, үҙең дә уларға яҡшы бул", - тигән. Яҡшы ата менән әсәләрҙең яманлыҡҡа бирелмәгән балаһы булып йәшәү - үҙе ҙур бәхеттер ул. Бала үҫеп етеп, ғаиләле булһа, балаларын да шул өлгөлә тәрбиәләйәсәк һәм үҙе лә уларҙан изгелектәр генә күрәсәк. Шөкөр, атай-әсәйемә рәхмәттәрем ҙур. Үкенескә, атайым инде беҙҙең арала булмаһа ла, уны онотҡаныбыҙ юҡ, рухына аяттар бағышлатып, йыш ҡына иҫкә алабыҙ. Был да ҙур изгелек, мәрхүмдәрҙең был яҡты донъяла уларҙы иҫләрлек, рухтарына ихтирам билдәһе күрһәтеп йәшәрлек яҡындары, балалары булыу улар өсөн дә бәхеттер ул, бәлки. Әсәйем Хәтижә Фазлетдин ҡыҙы, нигеҙҙе ташламайым, тип, күпме саҡырһаҡ та беҙҙең менән йәшәргә риза булмайынса, бер үҙе донъя көтә, ләкин беҙ уны яңғыҙын ҡалдырғаныбыҙ юҡ, ташламайбыҙ, шөкөр. Бөтөн теләктәрен, йомоштарын башҡарырға тырышабыҙ. Әле лә бына Өфөгә юл төшкәс, иң тәүҙә уның үтенесе буйынса һеҙгә, "Киске Өфө" гәзите редакцияһына килеп еттем. 84 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, күп йылдар инде "Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡый, гәзиткә яҙылған квитанцияһын һеҙгә ебәреп, бүләккә яҡташ яҙыусыбыҙ Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма" китабын отҡайны, шуны алып ҡайтыуымды түҙемһеҙләнеп көтә. Иманлы ғаиләлә үҫкән бала, минеңсә, бер ҡасан да ата-әсәһен ташламаҫ. Үкенескә, хәҙер яңғыҙ-ярым йәшәгән ата-әсәләр бигерәк күп. Йә балалары алыҫта, йә бер ауылда йәшәһәләр ҙә хәстәрлек күреп бармайҙар - ҡаты бәғерле әҙәмдәр улар. Беҙҙең ауылда ҡарттар йорто бар, унда йәшәгәндәрҙең бөтәһенең дә балалары бар, тик улар әлегесә ата-әсәһен ана шулай яҙмыш ҡосағына ташлап ҡуйғандар. Иманым камил, был ҡарттарға ла ҡасандыр, кемдәрҙер, балаларыңдың изгелеген күр, тип теләк теләгәндер, моғайын, тик ни сәбәптәндер уларҙың теләге ҡабул булмаған. Теләк теләү - бер, ә уны бойомға ашырыу үҙеңдән тора икәнен дә аңларға кәрәктер ул.

***Дим ӘХМӘҘИЕВ, хеҙмәт ветераны, Нефтекама ҡалаһы:*** Игелекле балалар тәрбиәләрҙән алда кеше үҙе игелекле һәм иманлы булырға тейеш. Әлбиттә, халыҡ әйтмешләй, яҡшынан да яман тыуып ҡуя, әммә бер генә сабыйҙа күрәләтә яман йә яҡшы булып тыумай. Тимәк, бала үҫкәндә уға тейешле тәрбиә биреп еткерелмәй, тигән һүҙ был, йә тәрбиә эше сылбырында ниндәйҙер етешһеҙлеккә юл ҡуйылған, тип аңларға кәрәк. Баланың ниндәй кеше булыры иң тәүҙә барыбер ҙә ғаиләгә бәйле. Әйтеүемсә, ата-әсә үҙ өлгөһөндә тәрбиәләй баланы. Был ифрат яуаплы бурыс: тәрбиә эшендә "ял"ға, "тәнәфес"кә юл ҡуйылырға тейеш түгел, ул өҙлөкһөҙ хеҙмәт.

Тәрбиә сылбыры, тигәйнем. Балаларға балалар баҡсаһына, мәктәпкә барғас, айырыуса ныҡ иғтибар һәм һиҙгерлек кәрәк, сөнки уларҙың күбеһе тап ана шул осорҙа сит йоғонтоға, урам мөхитенә бирешеүсән. Бөгөнгө мәктәптә, үҙегеҙгә мәғлүм, тәрбиә эше аҡһаңҡырай. Шуға күрә баланы һис күҙҙән ысҡындырырға ярамай, тик уға булған даими иғтибарҙы үҙенә бик һиҙҙерергә тырышмау хәйерлелер, тием. Шул уҡ ваҡытта тәрбиә алымдары ялҡытҡыс нотоҡ уҡыуға, аҡыл өйрәтеүҙәргә лә ҡоролмаһын, юғиһә, бала нисек тә һеҙҙең иғтибарҙан ситкә тайпылырға, "иреккә" ҡасырға тырышасаҡ, алдашырға, икейөҙләнергә өйрәнеп китеүе ихтимал. Балаң тәрбиәһе - ҡартлығың көҙгөһө, тип тә әйтер инем мин. Ҡартайған көнөңдә уларҙың ҡыуаныстарына һөйөнөп, балаңдың балаларын үҫтерешеп, уларҙың изгелеген күреп йәшәү - бына шул инде ул тормош асылы. Бөгөнгө заманда балалары була тороп та яңғыҙ миктәгән, йә ҡарттар йортонда йәшәргә мәжбүр ата-әсәләр ҙә һирәк күренеш түгел. Был инде фажиғә, Хоҙай күрһәтмәһен. Халҡыбыҙҙың, "Ни сәсһәң - шуны урырһың" тигән мәҡәле тап килеп кенә тора бында.

(Дауамы 2-се биттә).

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘҢГЕЛЕК ХӘТЕР

**Кеше хәтеренән көслөрәк тойғо бармы икән был ерҙә? Юҡтыр. Әҙәм балаһының күңелендә ярала алған хис-тойғоларҙың иң-иң ҡайнарҙары ла, иң-иң ҡәҙерлеләре лә ваҡыт үтеү менән һүрелә һәм онотола торған. Ә бына хәтер тигәне - мәңгелек. Бының шулай икәнлеген өсөнсө йыл рәттән Бөйөк Еңеү байрамында урам тултырып ағылған халыҡ йылғаһы ағымын күҙәтә торғас аңланым. Хәтер йылғаһы булып ағыла ла ағыла халыҡ. Ә бит уларҙы берәү ҙә көсләп сығармаған урамға, мәжбүр итмәгән. Илһөйәрлек тойғолары менән бер рәттән, уларҙы ата-бабаларының рухы саҡырған ошо сафтарҙа атлап үтергә. Шул саҡырыу, бурыс, изгелек, ғорурлыҡ кеүек иң юғары уй-хистәрҙер ағымдағыларҙың йөрәгендә лә.**

(Дауамы 5-се биттә).




12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә нindәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАҢ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМЕ?

***Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА, Ш. Бабич исемендә республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Яңыраҡ ҡунаҡта булдым. Өфөлә. Хужабикәнең 4 йәшлек малайы матур итеп башҡортса һөйләшеп уйнап йөрөй. Күстәнәстәрҙе күргәс: "Әсәй, миңә кәнфиттең шәмәхә төҫлөһөн бир", - тип аптыратты. Бына, исмаһам, тәрбиә! Һуңғы ваҡытта мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе күп ҡуҙғатыла. Тел барыһынан да элек ғаиләлә һаҡланырға тейешлекте генә кеше бик аңлап етмәй. Яҡын туғандарым араһында ла балаһы менән урыҫса һөйләшкәндәр бар. Ейәндәр урыҫса һөйләшеп үҫә. Көйөп әйтеп тә ҡарайым, үсектерерлек итеп тә әйтәм, юҡ. Милли үҙаң, телеңә, халҡыңа мөхәббәт, рух юҡ икән, ни хәл итәһең. Уларҙы өгөтләүҙән дә бер файҙа ла юҡ. Хатта мәктәп тә ярҙам итә алмай. Хәрби ире пенсияға сыҡҡансы ил буйлап күсенеп йөрөгән апайым, әхирәтем бар. Уларҙың балалары ҡырҙа тыуған, урыҫ мәктәптәрендә белем алған, ә сатнатып башҡортса һөйләшә! Барыһы ла ғаиләнән, ата-әсәнән тора. Милли рух булһа, әлеге ваҡытта ватандаштарыбыҙ башҡорт телен уҡытыуҙан баш тартып, ғариза яҙмаҫ ине. Тимәк, беҙ, зыялылар, сәнғәт, әҙәбиәт әһелдәре, нимәнелер ҡулдан ысҡындырғанбыҙ, нимәнелер эшләп еткермәйбеҙ! Теҙгенде мәктәптәргә, уҡытыусыларға ғына тапшырғанбыҙ. Рухты үҫтереү юлдарын эҙләргә, уйланырға, өлкән быуын тәжрибәһен ныҡлабыраҡ өйрәнергә кәрәк беҙгә.

Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡала балаларында ауыл балаларына ҡарағанда телгә ҡарата һөйөү көслөрәк күренә бөгөн. Мәҫәлән, бер мәл улыма класташы килгәйне. Сәй эскәс, китергә йыйына башланы. "Ҡайҙа ашығаһың?" - тигәс, "Ябылмаҫ борон бөҙрәханаға өлгөрөргә ине", - тип яуап бирҙе. Үҙенең дә сәсе бөҙрә бит әле, етмәһә! Әйткәндәй, Бөрйәндә, беҙҙең ауылда, балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәр соҡорҙоң нимә икәнен аңламаған, тип һөйләгәйнеләр. Яма, тигәс кенә белгәндәр. Үҙ-ара ла күптәр русса аралаша, ти. Интернет, мультиктар үҙенекен итә, йәмәғәт.

Милли баҫмаларҙың ябылыу хәленә килеп етеүе, тираж кәмеү, юғарылағыларҙың рухи ихтыяжды табыш алыу сығанағы менән бутауы әсендерә. Был донъяла һатылмай, һатып алынмай торған затлы төшөнсәләр бар. Урман, ер, һыу - кеше өсөн яратылған. Кешенең көнитмеше өсөн Аллаһ тарафынан булдырылған. Улар кешегә һулар һауа кеүек кәрәк. Ҡыҙғаныс, әммә бөгөн улар байлыҡ, кәсеп, килем алыуға табан боролош алған. Һуңғы ваҡытта милли кейемгә иғтибар көсәйеүе лә шатлыҡлы күренеш. Һәр кем һоҡланырлыҡ матур, зауыҡлы милли кейемдәребеҙ бар. Беҙ хатта кейемебеҙ менән дә киләсәк быуынды тәрбиәләй, уларҙа милләтебеҙгә ҡарата ғорурлыҡ уята алабыҙ. Үрҙә телгә алынған күренештәрҙе хәл итер өсөн беҙгә, барыбыҙға ла, берҙәм, бер һүҙҙән булырға ғына кәрәк.

КӨНАУАЗ

**"Рәсәй Федерацияһы Президенты вәкәләтен башҡарғанда, кеше һәм граждан хоҡуҡтарын һәм иркен ихтирам итергә һәм һаҡларға, РФ Конституцияһын үтәргә һәм якларға, дәүләт суверенитетын һәм бойондороҡһоҙлоғон, именлеген һәм бөтөнлөгөн һаҡларға, халыҡҡа тоғро хеҙмәт итергә ант бирәм".**



# АНТ БИРЕҮ - ИМАН КИЛТЕРЕҮ

Тәсбих мунсаҡтарына торошло ошо 33 һүҙ үткән аҙнала РФ Президенты вазифаһын башҡара башлау тантанаһында Владимир Путин тарафынан әйтелде. Ант һүҙе ҡыҫҡа, ләкин тос: тамырҙа типкән йөрәк ипкене, керешенән тартылған уҡ һымаҡ. Халыҡ-ара сәйәси аренала дуҫ һәм дошман даирәләрҙең төп иғтибар үҙәгендә ҡалып килгән Владимир Путин донъяның көслө һәм абруйлы лидеры булып танылды. Эйе, Рәсәйҙең бойондороҡһоҙ сәйәсәткә йүнәлеше, ҡасандыр ҡаҡшауға дусар булған бөйөк держава байрағын ҡабаттан күтәреп сығыуы күптәргә оҡшап етмәне: ҡыҫымға алыуҙар саманан ашты, әҙәп онотолдо. Был һынауҙарға ҡаршы тороу, үҙ йөҙөн һаҡлап ҡалыу, Феникс ҡошолай яңынан бейеклектәргә күтәрелеү өсөн Рәсәйгә эстән берҙәм һәм ҡеүәтле булыу фарыз. Ант биреү тантанаһындағы сығышында РФ Президенты В.Путин көн тәртибенә сығарған төп тезистар тап ана шул хаҡта ине лә. Иң мөһиме бөгөн - эске үҫеш мәсьәләләре: халыҡтын тормош сифатын яҡшыртыу, кеше именлеге һәм сәләмәтлеге, демография, власть кимәлдәренең асыҡлығы, эшмәкәрлек һәм эшҡыуарлыҡ ирке, ғаилә һәм сабыйҙар хәстәрлектәре, уңышҡа ихтыяр. Эйе, халыҡ та шуны теләй: илебеҙҙә социаль ғәҙеллек урынлашһын, хеҙмәт кешеһе лайыҡлы эш хаҡы алһын, пенсия мәсьәләләре хәл ителһен, коррупцияға ҡаршы әҙмә-әҙлекле көрәш алып барылһын.

Ант итеү - иман килтереүгә бәрәбәр. В.Путиндың ант биреүен илебеҙ халҡы ғына түгел, бар донъя күҙәтте. Ғаләм алдында бирелгән ант һүҙҙәренең һөҙөмтәһенә бик тә ышанғы килә. Ил ҡеүәтен арттырыуға, ябай кеше мәнфәғәтенә йөҙ боролор, ниһайәт, тип тағы бер ышанайыҡ әле, йәмәғәт. Тормош яҡшырһын, сабыйҙар күберәк тыуһын, ишәйәйек, тамырҙарыбыҙҙы ныҡытайыҡ; үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәйек, ситтән көтөп ятмайыҡ. Үҙ ризығыбыҙҙы, үҙ тауарыбыҙҙы үҙебеҙ етештерәйек. Шул саҡ эшебеҙ ҙә, ашыбыҙ ҙа, аҡсабыҙ ҙа булыр. Дөрөҫ, ил Президентының Хөкүмәт рәйесе итеп ҡабаттан Д.Медведевты тәғәйенләүе халыҡ араһында, шулай уҡ Дәүләт Думаһының коммунистар һәм "Ғәҙел Рәсәй"ҙәр фракцияһында бер ни тиклем ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Ләкин был фактты экспертар бөгөнгө ҡатмарлы тышҡы сәйәсәт торошо менән аңлата. Башҡортса әйткәндә, кисеүҙә аттарҙы алыштырмайҙар, тик бына аттары... Ә шулай ҙа төшөнкөлөккә бирелмәйек: дилбегә бит Президент ҡулында!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғәҙәттә, ата-әсәгә, балаңдың изгелеген күр, тип теләйҙәр. Ошо теләкте нисек аңлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фатиха ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Әсәһе менән үҫмер ҡыҙыҡайҙың һөйләшеүенә шаһит булған күптәнге бер һөйләшеү иҫкә килеп төштө. "Эй, Аллам, бөтөнләй балаһыҙ булғансы, үлем түшәгендә сарсап ятҡанында, исмаһам, ауыҙыңа һыу тамыҙыр бала бирҙең, рәхмәт!" - тигәненә теге бала: "Ә ниңә, мине шуның өсөн генә тыуҙырҙыңмы ни был донъяға?" - тип үпкәләгәйне. Атай-әсәйгә ҡарата изгелекле һәм ихтирамлы булыу - ул кешенең рухи өлгөргәнлек һәм аң кимәле күрһәткестәре, тип уйлайым. Яҡшынан яман тыуыр, тигән кеүек, ямандан да яҡшы тауып ҡына тора ул, уйлап ҡараһаң. Тәрбиә, әлбиттә, беренсе урында, ләкин шуныһы ғәжәп: ямандан ни тәрбиә булыр икән һуң? Улай тиһәң, бәғзе бер эскесе ата-әсәләрҙең бына тигән хәстәрлекле, аҡыллы балалары хаҡында һөйләп тә ғәжәп иткәндәре бар. Күрәһең, изгелек рухы ҡанда йәшәй. Әллә Аллаһтың яратҡан ҡолдарымы улар? Эсеп, юлдан яҙған ата-әсәнең быңдай хәлгә осраҡлы рәүештә, ихтыярһыҙлығы һәм йомшаҡ холҡо, бер-береһенә йоғонтоһо арҡаһында бирелеүе лә ихтимал бит. Тышта йығылып ятҡан иҫерек ата-әсәһен күтәреп-һөйрәкләп тигеләй өйгә индереп һалып, биттәренән, сәстәренән һыйпап, йәлләп, илашып ултырған әлеге балаларҙың, ошо хаҡта һөйләгән кеше әйтеүенсә, берәүһе лә ата-әсәһе "өлгөһөнә" эйәрмәгән, киреһенсә, нисек булһа ла уҡып сығып, һөнәр алып, ихтирамлы кешеләр булып йәшәйҙәр икән. Иң мөһиме - иман, тигәндәй, фәҡәт ул ғына кешене кеше итә. Юҡҡа ғынамы ни, ата-әсәгә киң күңелле һәм йомарт була белеүҙе Бәйғәмбәргә хас сифаттыр, тиҙәр. Ата-әсәһенә мөнәсәбәттәрҙә Аллаһ бойорғанды үтәп кенә торған кеше алдында йәннәттәрҙең ике ҡапҡаһы ла асылып ҡуйылыр, ти изге китап. Әгәр ҙә кеше үҙенең йәшәр йылдары оҙон, донъя көтөр малмөлкәте күп булыуын теләһә, ата-әсәһенә игелекле булһын, тигән бит Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм. Аныҡ кешенең был хаҡта белмәүе лә бик ихтимал, әлбиттә, ләкин ул иң яҡындарына игелекте йөрәк ҡушыуынан, эске бер илаһи ихтыяжынан сығып эшләй. Ата-әсәһенә изгелекле, мәрхәмәтле кеше башҡаларға ла, уларҙың кем икәненә ҡарамайынса, шундай уҡ изгелекле, яҡшы була, шуға ла миңә улар Аллаһы Тәғәләнең тамғалы әҙәмдәре булып тойола.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ "Урал" волейбол клубы яңы миҙгелдә Башҡортостан Республикаһының яңы туристик бренды - "Terra Bashkiria" ("Башҡортостан ере") логотибы төшөрөлгән кейемдә уйнай. Ул былтыр "Урал батыр" эпосы менән ассоциатив юл буйлап барған "Урал" волейбол клубының фирма стиленә тап килә. Клубтың һыбайлы батыр төшөрөлгән атрибутикаһы бар, ә ҡатын-ҡыҙҙар командаһы уҙған миҙгелдән эпостағы изге ҡош "Самрау" исеме менән атала башланы.

✓ Башҡортостан Республикаһы дәүләт хеҙмәттәре порталында "Граждандарҙы торлаҡҡа мохтаждар сифатында иҫәпкә ҡуйыу" хеҙмәте барлыҡҡа килде. Торлаҡҡа мохтаж тип табылғандарға муниципаль фондтан торлаҡ майҙаны бирелә. Иҫәпкә тороу өсөн төбәк дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәлеү, "шәхси кабинет"ҡа инеү һәм тейешле хеҙмәткә заказ биреү ҙә етә. Ошо маҡсатта ғариза, паспорт, килемде һәм мөлкәттең хаҡын билдәләү өсөн тейешле документтар, ғаилә составы тураһында һәм башҡа документтар кәрәк.

✓ 14 майҙа Башҡортостанда "Макулатура тапшыр - ағасты ҡотҡар!" эко-марафоны башлана. Еңеүселәргә аҡсалата премиялар, рәхмәт хаттары һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырыу ҡаралған. Акция 15 июнгә тиклем дауам итә. Ҡатнашыусыларға www.сдай-бумагу.рф. рәсми сайтында ғариза ҡалдырырға кәрәк.

✓ Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы ВИЧ-инфекцияһын иҫкәртеү һорауҙары буйынса "ҡыҙыу элемтә" ойоштора, тип хәбәр итте ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Идаралыҡ белгестәре республика халҡына кешенең иммунодефицит вирусын йоҡтороу алымдары, хәүефтәре һәм эҙемтәләре хаҡында һөйләйәсәк, ата-әсәләргә балаларҙы ауырыуҙан һаҡлау тураһында кәңәш бирәсәк. "Ҡыҙыу элемтә" телефоны: 8-800-700-90-30. 14-20 майҙа иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем шылтыратырға.

✓ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар Еңеүҙең 73 йыллығы менән бәйле майҙа-июндә 10-ар мең һум аҡса ала. Бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында тейешле указ Рәсәй Президенты сайтында баҫылып сыҡты. "10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү Рәсәй Федерацияһында, Латвия, Литва һәм Эстония республикаларында даими йәшәгән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, ҡатнашыусыларына ҡаралған", - тиелгән ТАСС агентлығы хәбәрендә.

✓ *Уҡый белмәһәң дә интернетта ултыра beләһең. Үҙеңә кәрәкте ҡарай, аса, таба алыу һәләте башҡа төрлө инстинкттарҙан да алда барлыҡҡа килә. Һин был планшет менән бергә ашайһың, йоҡлайһың, көршәктә тотоп ултыраһың...*



АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАҢДЫ...

## табыныу тәхетенә әйләндермә!



**Мин бөгөнгө замана балаһы булып тыуырға теләр инем. Ни өсөнмө? Рәхәт тә һуң. Тыуыу менән һин ҡурсаҡҡа әүерeләһең. Атай, әсәй, өләсәй-олатайҙар йүргәктә үк һиндә үҙ хыялдарын һәм комплекстарын тормошҡа ашыра башлай. "Йүргәк" һүҙе лә бында урынһыҙ, сөнки йүргәк тигән нәмә лә юҡ инде. Хәҙер сабыйҙы тыуыу менән кейендереп һалалар. Оло кешенең кейем хаҡынан ҡиммәт булған кейемдәргә.**

Һине нимә менән генә тығындырмайҙар. Йәш тулғансы уҡ күгәрсен һөтөнән башҡа ризыҡтарҙы тәмләп тә бөтәһең. Пюре, паштет, һуттар, иҙелмәләр, киселдәр, ҡатышмалар... Унан ҡала, һине бөтөн төрлө табиптарға ла күрһәтеп, ҡайһы ерeңдә ниндәй "ауырыуың" йәшенгән булһа ла эҙләп табалар. Бигерәк тә нервы ауырыуҙарын! Һәм невролог ҡумта-ҡумта итеп эҙемтәләре билдәле булған һәм булмаған дауалар яҙа. Һәм ололар шуларҙы көсләп һинең ауыҙыңа ҡоя. Унан ҡала һине массажға йөрөтәләр. Ни өсөндөр, кәрәкме-кәрәкмәйме, тейешме-түгелме - билдәһеҙ...

Өс йәшең тулыуға, һинең уйынсыҡтарың бүлмәңә, биш йәшеңә өйгә һыймай. Аҡыллы уйынсыҡтар менән артыҡ уйларға ла, хәрәкәт итергә лә кәрәкмәй. Төймәһенә баҫыу ҙа етә, улар үҙҙәре оса, үҙҙәре йыйыла. Әкиәттәр аудиокитаптарҙа - үҙҙәре һөйләй, алфавит хәрефтәрҙе үҙе әйтә, ҡурсаҡ өсөн кейемдәр һатыла. Хатта былар ҙа иҫкелек ҡалдығы, бар уйындар - компьютерҙа.

Көн дә тигәндәй һине башта күтәреп, унан етәкләп, кейем, уйынсыҡ магазиндарына йөрөтәләр, юл ыңғайы кафеларға алып инәләр, һыйлайҙар. Әле һөйләшә лә белмәгәндә үк магазинда тауар һайлай һәм кафела заказ яһай беләһең. Һәм, онота яҙғанмын, һинең планшетың була. Уҡый белмәһәң дә инде интернетта ултыра беләһең. Үҙеңә кәрәкте ҡарай, аса, таба алыу һәләте бөтөн башҡа төрлө инстинкттарҙан да алда барлыҡҡа килә. Һин был планшет менән бергә ашайһың, йоҡлайһың, көршәктә тотоп ултыраһың, хатта әсәйең өйҙә булмаһа ла иҫең китмәй, ә планшетыңды алһалар, тәгәрәп ятып илайһың. Һәм мотлаҡ уны таптырып алаһың. Ул планшетты, айфонды, ноутбукты ата-әсәйең кредитҡа алғанын да, әле әллә нисә ай түләй икәнен дә белмәйһең әле, әммә бик ныҡ ҡәҙерле нәмә икәнен тойғанһың инде.

Мәктәп алдынан иһә "ҡурсаҡ" дәүере бөтөп, ҡапыл ғына "төҙәтеү-хеҙмәт" дәүеренә күселә. Һине өҙөлөп һөйгән ата-әсә шул ваҡыт нимәләлер яңылышҡанын аңлап ҡала. Әммә инде һуң. Һин артыҡ һимергәнһең, холоҡһоҙланғанһың һәм һәр ваҡыт иғтибар талап итеү синдромына тарығанһың. Ошолар асыҡланғас, ата-әсәнең яңы уйыны башлана, ул "белгес табыу" тип атала. Хәҙер инде тырышып-тырышып диетологтар, педагогтар, психологтар буйлап сабыу башлана. Туғандар, асырғанып, ниндәйҙер мөғжизә көтә, был белгестәр ниндәйҙер көс менән баланың эсен дә, тышын да төҙәтеп ҡуйыр, тип уйлай, әммә үҙҙәренең тәрбиә алымдарын үҙгәртмәй. Айҙарға һуҙылған эзотерик практикаларға әллә күпме аҡса, нервы һәм ваҡыт китә. Тик файҙа, булғанда ла, бик аҙ.

Ошо мәктәп алдынан булған арауыҡта ата-әсә бығаса шаштырған балаһын ҡапыл ғына һындырмаҡсы, буйһондормаҡсы булып маташа. Уны ниндәйҙер ҡыҙыҡлы шөғөлгә әүрәтер, үҙ аллы булыуға өйрәтер урынға, ҡайышҡа һәм башҡа яҙалау төрҙәренә йәбешә. Йәки ҡысҡырынып, янап, ҡурҡытып ҡарай. Һөҙөмтәлә бала таяҡ аҫтында ғына ҡыбырлау һәм эшләү алымына күсә.

Бөтөн сараларҙы ла файҙаланып ҡарап, бер ниндәй ҙә алға китеш күҙәтелмәгәндә, ҡайһы бер әсәйҙәр балаларын бар нәмәлә лә ғәйепләй башлай. "Беҙ һинең өсөн тырышабыҙ, ә һин?", "Мин һиңә тип көнө-төнө эштә, һинең бер файҙаң юҡ!" һәм башҡалар. Бала иһә бындай ғәйепләүҙе бик ауыр кисерә һәм ике яҡтан да яйлап-яйлап аңлашмаусанлыҡ ҡәлғәләре ҡалҡа башлай. Ата-әсә баланы "йөк", бала ата-әсәне "игәүсе" тип ҡабул итә.

Балаларының йәшәйешкә артыҡ ынтылышы юҡлығын инде төшөнгән ата-әсә хатаһын артабан да аңламай әле, хәҙер тамам ҙурайған балаһының шәхесен юҡҡа сығарыуын дауам ғына итә: армиянан йәшереп алып ҡала, түләүле урындарҙа уҡыта, имтихандарҙы һатып алыша, таныштары аша эш урыны эҙләй, кеше араһында төҫ тотһон өсөн ҡиммәтле кейемдәр алып бирә, унан машиналы, фатирлы итергә тырыша. Һөҙөмтәлә үҙенә кәрәклене көс түгеп таба белмәгән, шулай ҙа артыҡ зыяны ла, файҙаһы ла булмаған, уртаҡул гражданин барлыҡҡа килә. Һәм ошондай формалағы был әҙәми затты - патриотик тойғолары, милли рухы, идеялары, маҡсаты булмаған кешене - ата-әсәнең иң эскерһеҙ һәм саф тойғолары - сикһеҙ "һөйөү" әүәләп ала.

Бала культы беҙҙең йәмғиәттә электән йәшәп килмәгән, ул бынан бер 20-25 йылдар самаһы элек кенә баш ҡалҡытты. Ҡалҡытты ла, тиҙ үк үҫеп, киң даирәләргә таралып та китте. Ни өсөн тиҙ үҫте? Сөнки бындай балалар иҡтисадта ҡулланыу тауарҙарының һатылыуын, әйләнешен ҡыуыусы, тауар йөрөшөн тиҙләтеүсе ҡорал. Оло кешеләрҙән үҙҙәрен ул сама яраттырып булмай, ә бына балаларын улар һушһыҙ булып ярата ала. Ары инде ошо һөйөү хаҡына тығылған аҡсалар йылға булып аға. Йәғни, замананың рәхимһеҙ баҙар иҡтисады ата-әсәнең балаһына булған аңһыҙ һөйөүен үҙ мәнфәғәттәрендә ҡуллана.

Бының менән элек балаларын яратмағандар тип әйтеп булмай. Элек тә яратҡандар, тик был һөйөүҙең хаҡы икенсерәк булған. Ул заманда бала үҙен ғаиләнең бер кескәй өлөшө итеп тойһа, бөгөнгө бала ғаиләнең үҙәге булып китте. Баҙар иҡтисады йәмғиәткә бала тирәләй ҡоролған ғаилә рецебын көсләп таҡты. Баҙар ғаиләнең дөрөҫ төҙөлгәнен һәм үҙ ихтыяждарын үҙе ҡәнәғәтләндереп йәшәгәнен теләмәй. Ул йәш ата-әсәгә "Балаңа шулай ит, былай ит, ошоно ашат, быны кейҙер, алып бир, ҡыуандыр", тип тауарын тығып ҡына тора. Һәм ғаилә бөтөн проблемаларын да ана шул тәҡдим ителгәндәр хәл итә икән тип уйлай, баҙар "тәрбиәһенә" тулыһынса һалыша ла ҡуя. Иң еңел юлды һайлай. Ата менән әсә, өләсәй менән олатай һәм башҡа туғандар бала менән ваҡыт үткәрергә, уның эске донъяһын байытырға ваҡыт тапмай, улар шул балаға баҙар тәҡдим иткәндәрҙе алып биреү өсөн эштә тик йөрөй. Ә бала планшет, компьютер, айфондар ҡарамағында үҫә.

...Мин бөгөнгө заман балаһы булырға теләмәҫ инем. Ярлыраҡ, ҡырыҫыраҡ, сиклерәк мөнәсәбәттәрҙә булһа ла, ғаилә менән йыйылып ултырып шыршы тәтәйҙәре яһаған, телевизорҙан аҙнаһына бер күрһәтелә торған әкиәттәрҙе көткән, ҡараңғы төшкәнсе урамдан инмәй йүгерешеп уйнаған, бәләкәйҙән кем өсөндөр яуаплылыҡ ала белгән, хеҙмәттә тәрбиәләнгән, яңы кейем һорарға оялған, тәмлене аҙ була тип уйлаған һәм ата-әсәйгә ярҙамсы булған балалар быуынында үҫеүем үҙе үк бәхет булған икән. Ә бөгөнгө бала культы беҙҙең киләсәкке хәсрәттәр булмаҡсы.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***46-сы күҙәтеүем.*** Йола-традициялар үтәлешен рухиәтте һаҡларға булышлыҡ итеүсе фольклор сараһы итеп кенә аңлау - мәсьәләнең, айсберг һымаҡ, һыу өҫтөндә күренеп торған өлөшө генә. "Ғәҙәт ҡылыҡтың әнеһе..." тигән Мостай Кәрим. Классик миҫал (был турала яҙғаным булды) килтерәм. Үлем түшәгенә ятҡан атай кеше улына ризалығын бирә һәм бер генә үкенесе ҡалыуы хаҡында әйтә. Ул да булһа - улының намаҙға баҫмауы. Васыяты шул була: улы атаһының йыназаһынан һуң 40 көн һуҙымында намаҙ ваҡытында мәсеткә килеп атаһын иҫләп ултырырға тейеш була. Улы атаһының васыятын үтәй һәм 41-се көндә мәсеткә үҙе килә, намаҙға ла ултыра. Ҡырҡ, ахыры, ҡырҡылыу тигәндән алынғандыр. Бер үк ғәмәлде 40 көн башҡарған кешенең был ғәмәле ғәҙәтенә күсә. Тимәк, йола-традиция булмышты, холоҡто барлыҡҡа килтерә. Холоҡ - ул характер, ә характер - ул яҙмыш. Ә рухиәт иһә булмыштың, асылдың, яҙмыштың йөкмәткеһе генә. Йола-традицияһын үтәмәгән халыҡ ҡырҡ йыл һуҙымында икенсе халыҡҡа әүерелмәҫ тип кем әйтер?

***47-се күҙәтеүем.*** Беҙ йыш ҡына коммунистарҙы тәнҡитләргә яратабыҙ. Бар нәмә сағыштырыуҙа күренә. Совет осоронда "Совет Башҡортостаны" гәзитенең тиражы 100 меңдән ашып киткән йылдар булды. Әгәр ҙә гәзит көн һайын сығыуын иҫәпкә алғанда аҙналыҡ тираж ярты миллионға, айлығы 2 миллион самаһына барып етә. Ошоларға башҡорт телендә сыҡҡан башҡа гәзит-журналдарҙың, район гәзиттәренең, "Китап" нәшриәтенең башҡортса сыҡҡан китаптарын өҫтәһәң, башҡорт телендә баҫылған гәзит-журнал-китаптарҙың дөйөм айлыҡ тиражы 3-3,5, йыллығы 42 миллион самаһы данаға барып етә. Тағы ла шуныһы: партия был баҫмаларҙың уҡылыуын да ойошторҙо. Совет осоро идеологияһы ниндәй генә булмаһын, ул баҫмалар башҡортса булғас, телде һаҡлау йәһәтенән уларҙың әһәмиәте иҫ киткес ҙур булды. Маҡсат ысулды аҡланы. Беҙ бына шул баҫмаларҙы уҡып үҫкән быуындар вәкилебеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығына арналған 70-се еңел атлетика эстафетаһы үтте. Был традицион ярыш Еңеү паркында асылды. Унда 1700 кеше ҡатнашты. Сара сиктәрендә "Тыныслыҡ йүгереүе" лә уҙғарылды. Иң оло йүгереүсегә 80 йәш булһа, иң йәшенә 9 йәш ине. Еңел атлетика эстафетаһының беренсе төркөмөндә (дөйөм белем биреү учреждениелары) беренсе урынды 158-се башҡорт гимназияһы командаһы яуланы.

✓Экологик айлыҡ сиктәрендә Өфөлә ойошторолған өмәләр ваҡытында 68 мең квадрат метр сүп-сар сығарылған. Бөгөн дә урам-юл селтәрен бысраҡтан һәм сүпсарҙан таҙартыу, тауыштан һаҡлаусы экрандарҙы йыуыу, ҡоймаларҙы ремонтлау һәм буяу буйынса төрлө саралар күрелә. Шулай уҡ соҡорҙарҙы ағымдағы ремонтлау граждандарҙың интерактив картала ҡалдырған заявкалары нигеҙендә тормошҡа ашырыла.

✓Новосибирскиҙа үткән "Рәсәй студенты-2018" Бөтә Рәсәй конкурсында республикабыҙ исеменән сығыш яһаған Башҡорт дәүләт медицина университеты студенты Эльвина Ғәзизуллина "Спортсы студент" номинацияһында иң яҡшыһы булды. Эльвина - Бишбүләк районы ҡыҙы, Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетында өсөнсө курста уҡый. Ҡыҙ тик "яҡшы" билдәләренә генә өлгәшә, биатлон менән мауыға. "Һылыуҡай-2018" республика гүзәллек конкурсында Эльвина өсөнсө урын яуланы.

✓Рәсәй стандарты Mercedes-Benz C-/E-класы һәм GLK маркалы 12 371 автомобилде ирекле ҡайтарып алыуға килеште. Электростатик разряд арҡаһында водителдең "хәүефһеҙлек мендәре" эшләп китеү ихтималлығы ҡайтарып алыу сәбәбе булып тора. "Мерседес-Бенц РУС" акционерҙар йәмғиәте етештереүсеһенең вәкәләтле вәкилдәре ҡайтарып алыуға ингән Mercedes-Benz автомобиль хужаларына яҡын ваҡытта дилер үҙәгенә килтереү кәрәклеге хаҡында мәғлүмәт еткерә. Автомобиль хужалары өсөн бөтә ремонт эштәре бушлай башҡарыла.

✓Максимовка ҡасабаһында яңы балалар баҡсаһы төҙөлә. Эштәр быltыр декабрҙә башланды һәм ағымдағы йылдың аҙағына тамамланырға тейеш, тип хәбәр иттеләр Калинин районы хакимиәтенән. Ике ҡатлы бина Сосновская урамында һалына. Учреждение 8 төркөмгә - 195 урынға иҫәпләнгән. Максимовка балалар баҡсаһы Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына йөҙ объект исемлегенә индерелгән.

✓ *Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк? Беҙ һанлы технологиялар заманында йәшәйбеҙ һәм заман саҡырыуына технологик нигеҙҙә яуап бирергә тейешбеҙ. Электрон китап тап шундай яуап булып тора ла инде.*



ҠЫҪҠАСА



# ЯРЛЫЛАР КӘМЕҺЕН...

✓ **Рәсәй Президенты "2024 йылғы осорға тиклем Рәсәй Федерацияһын үҫтереүҙең стратегик бурыстары һәм милли маҡсаттар тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы.** Владимир Путин пенсияларҙы инфляция кимәленән күберәккә арттырыуҙы, шулай уҡ илдә ярлылыҡты кәм тигәндә ике тапҡырға кәметеүҙе талап итте. Шулай уҡ йөкләмәләр исемлегендә йыл һайын 5 миллион самаһы ғаиләнең йәшәү шарттарын яҡшыртыу, көтөлгән ғүмер оҙайлығын 78 йәшкә тиклем арттырыу (2030 йылға - 80 йәшкә ҡәҙәр), граждандарҙың реаль килемен тотороҡло үҫтереүҙе тәьмин итеү бар. Шулай уҡ өҫтөнлөклө бурыстар иҫәбендә - Рәсәй Федерацияһын донъяның биш ҙур иҡтисады иҫәбенә индереү, граждандарҙа сәләмәт йәшәү рәүешенә мотивация системаһын булдырыу, шул иҫәптән сәләмәт туҡланыу һәм насар ғәҙәттәрҙән баш тартыу, балалы ҡатындарҙың хеҙмәт эшмәкәрлеген ғәмәлгә ашырыу өсөн шарттар тыуҙырыу.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көстәр ветерандары тураһында" республика законына төҙәтмәләре үҙ көсөнә инде.** Төп яңылыҡ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Севастополь ҡалаһын обороналау башланған көндә аныҡлау менән бәйле. Быға тиклем ҡаланы обороналау 1941 йылдың 5 ноябрендә башланған тип яҙылған. Ләкин тикшеренеүҙәр ғәскәрҙәрҙең шул йылдың 30 октябрендә үк оборонаға күсеүен асыҡлаған. Һуҙ 1941 йылдың 30 октябренән 4 ноябренә тиклем ҡаланы обороналаған, һуңынан ғәмәлдәге армия составында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашмаған граждандарҙың хоҡуғын яҡлау хаҡында бара. Уларҙың ҡайһы берҙәре, мәсәлән, тәүге көндәрҙә ҡаты яраланып, артабан демобилизацияланған, шулай уҡ ошо осорҙа һәләк булыуы ихтимал. Был кешеләр иҫән булмаһа ла, ата-бабаларға ҡарата ғәҙеллектең тергеҙелеүе уларҙың туғандары өсөн бик мөһим.

✓ **9-сы һәм 11-се класты тамамлаусылар өсөн география буйынса тағы бер мотлаҡ имтихан индереүҙәре ихтимал.** Географиянан белем биреүҙе үҫтереү концепцияһы проекты әле Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы раҫлауында һәм май аҙағына тиклем ҡабул ителеүе мөмкин. Концепция авторҙары фекеренсә, географияның мәктәп курсы "дөйөм милли оҡшашлыҡ булдырыу һәм йәштәргә илһөйәрлек тәрбиәһе биреү өсөн" ҙур әһәмиәткә эйә. Баҫма мәғлүмәттәре буйынса, әле илдә 20 меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыһы география буйынса имтиханды һайлай, был йәмғиәтте өйрәнеү фәненән Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыусылар һанынан 20 тапҡырға аҙыраҡ.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәнең ниндәй мәсьәлә менән асылыуын әйтеп бирер өсөн күрәҙәсе булыу ҙа кәрәкмәй ине: әлбиттә, ул 7 майҙа Владимир Путиндың инаугурацияһы темаһынан башланды.**

# ҒАИЛӘ ХӘТЕРЕ...

## илһөйәрлектең ныҡлы нигеҙе

Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ил башлығының тантанала яңғыраған сығышының төп мәлдәренә туҡталып, Владимир Владимировичтың: "Рәсәйгә тормоштоң барлыҡ өлкәләрендә лә алға китеш кәрәк. Уҙған йылдарҙа рәсәйҙәр ауыр иҡтисади һәм социаль проблемалар менән осрашты, шуға күрә әлеге ваҡытта булған барлыҡ мөмкинлектәрҙе тәү сиратта эске иҡтисади, технологик, илдең киләсәге, уның көнөркәшлек һәләтен үҫтереү өсөн файҙаланырға тейешбеҙ. Ошо бурыстарҙы тормошҡа ашырғанда төп яуаплылыҡ дәүләт һәм муниципаль власть иңендә ята. Был йәһәттән властар алдында түбәндәге бурыстар тора: кешеләрҙең проблемаларын оҙаҡҡа һуҙмай хәл итеү, уларҙың тәҡдименә, иҫкәрмәһенә һәм талабына тейешле иғтибар биреү. Репутация, намыҫ, кеше хәленә инеүсәнлек, асыҡлыҡ властың барлыҡ кимәлендәге вәкилдәре өсөн дә беренсе урында торорға тейеш. Фән һәм технология, ҡалаларҙың яңырыуы, төбәктәрҙең үҫеше, әүҙем социаль сәйәсәт, белем биреүҙең һәм һаулыҡ һаҡлауҙың сифатын күтәреү, традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау, әсәлекте һәм балалыҡты яҡлау кеүек йүнәлештәр ҙә сифатлы алға китеш һәм әүҙем эшмәкәрлек талап итә", - тип билдәләүен һыҙыҡ өҫтөнә алып: "Ни өсөн был тезистарға ентекле туҡталам, сөнки улар барыһы ла беҙҙең көндәлек эшмәкәрлегебеҙҙә тәшкил итә. Уларҙы уңышлы хәл итеүгә ҡала халҡының йәшәү сифаты ла бәйле. Рәсәй Президентының сираттағы май указдарына ҡул ҡуйыуы ла мәғлүмдер. Уны үтәү буйынса тиҙ арала саралар планы эшләргә кәрәк", - тип, бурыс та йөкмәтте.

Иғтибарлы уҡыусы кәңәшмә һайын Ирек Ишмөхәмәт улының нин-дәйҙер һабаҡ биреүенә шаһит. Был юлы ҡала хакимиәте башлығы граждандарҙың, йәғни йәмғиәттең мәҙәниәт кимәле түбән булыуына баҫым яһаны. Ни генә тимә, ер ҡарҙан асыла башлау менән урамдарҙы сүп-сар баҫһа, йорт ихаталары, шәхси йорттар урынлашҡан территориялар ысын мәғәнәһендә сүп ояһына әүерелә икән. "Күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр ҡыш буйы балкондан сүп-сар ташлай, тәмәке төпсөктәре ырғыта, шуға балкон тирәләре ҡарағылыҙ була. Был күренеш йыл һайын ҡабатлана һәм йөҙҙәрсә кеше ҡалалағы миллионлаған халыҡтың артынан таҙартып йөрөргә тейеш. Ә бит юҡҡа ғына, таҙалаған урында түгел, сүпләмәгән урында таҙа тимәйҙәр. Ҡарап торһаң, хатта ҡала хакимиәте бинаһынан сыҡҡан аҡ күлдәкле, костюмлы кешеләр ҙә тәмәке төпсөктәрен урнаға түгел, шундағы ергә ташлап китә. Шул уҡ ваҡытта барыбыҙ ҙа гәйепте кемдәндер эҙләйбеҙ", - тип, йәмәғәтселекте тәнҡит утына тотто Ирек Ишмөхәмәт улы.

Әйткәндәй, быйыл беренсе тапҡыр 18 партия вәкилдәренең "Биатлон" спорт комплексы битләүен таҙартыу буйынса экологик өмә үҙғарыуын да билдәләп китте ҡала башлығы. "Беҙ был акцияларҙың символик характерға эйә булыуын аңлайбыҙ, шуға ҡарамаҫтан, ҡалала тәртип булдырыуҙа граждандарҙың әүҙемлек күрһәтеүе - бик мөһим мәл", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул.

Шулай уҡ кәңәшмәнең мөһим темаларының береһе булып бөйөк байрам - Еңеү көнө алдынан ҡаланың Махсуслаштырылған хеҙмәтләндереү комбинаты МУП-ының әһәмиәтле социаль акция үткәреүе - республикала ғына түгел, Волга буйы федераль округында, бәлки, тотош илдә, беренселәрҙән булып Башҡортостандың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларының электрон хәтер китабын сығарыуы торҙо. "Беҙ шундай заманда йәшәйбеҙ: донъяның билдәле бер көстәре Икенсе донъя һуғышы тарихын боҙорға, унан еңеүсе совет халҡының ролен һыҙып ырғытырға, тарихтан хәтерҙе юйырға тырыша. Әлбиттә, дошмандар Европала еңеүселәргә ҡуйылған һәйкәлдәрҙе алып ташлай, элекке СССР составындағы территорияларҙа тарих китаптарын ҡабаттан яҙа, матбуғатта, социаль селтәрҙәрҙә йәштәрҙең аңын томалай ала, әммә айырым шәхестең, аныҡ ғаиләнең тарихын боҙоп күрһәтеү мөмкин түгел. Әммә бының өсөн бер шарт булыуы мотлаҡ: ғаилә үҙенең тамырҙарын белергә, уларҙы һаҡларға һәм ата-олаталары тарихын, уларҙың йолаларын, иманын мираҫ итеп киләһе быуындарға тапшырырға тейеш. Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк? Беҙ һанлы технологиялар заманында йәшәйбеҙ һәм заман саҡырыуына технологик нигеҙҙә яуап бирергә тейешбеҙ. Электрон китап тап шундай яуап булып тора ла инде.

Бер инициатив төркөм офиста эшләне һәм ҡала зыяраттарында һуғышта ҡатнашыусылар ерләнгән ҡәберҙәрҙең координаталарын, шулай уҡ архивтағы мәғлүмәттәрҙе (390 мең яҙма) электрон картаға индерҙе, икенсе төркөм иһә зыяраттарҙа ҡәберҙәрҙе планшетҡа фотоға төшөрөп, шулай уҡ электрон картаны тулыландырҙы. Хәҙер теләгән кеше сайтта шәхси кабинет булдырып, яҡын кешеһе тураһында мәғлүмәт өҫтәй, шәжәрәһен яҙа ала. Әлеге ваҡытта республиканың ҡайһы бер ҡалалары ла инициативаны күтәреп алды һәм үҙ территорияларында ошо эште тормошҡа ашыра башланы", - тип белдерҙе ойошма етәксеһе Руслан Кинйәкәев.

"Был беҙҙең сираттағы уңышлы муниципаль тәжрибә һәм, моғайын, ул федераль кимәлдә ҡулланыу табыр, - тине Ирек Ялалов һәм ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтарына ауыл зыяраттарына ла инвентаризация үткәреп, һуғышта ҡатнашыусыларҙың ҡәберҙәрен асыҡлау, был эшкә йәштәрҙе йәлеп итеү зарурлығын һәм эште 22 июнгә тиклем тамамлау кәрәклеген белдерҙе: "Руслан Усман улының һүҙҙәрен тағы бер тапҡыр ҡабатлағым килә: эйе, йәмғиәттә йәштәрҙең аңын үҙгәртергә мөмкин, әммә ғаиләлә аңды үҙгәртеү, ғаилә хәтерен мейенән алып ташлау мөмкин түгел. Әгәр ғаиләлә ыңғай мәғәнәлә ата-олатайҙар культын булдырһаҡ - илһөйәрлектең иң ныҡ нигеҙе ошо була инде", - тине хакимиәт башлығы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйыл сәскә ултыртыу Бөйөк Еңеү байрамы үтәсәк объекттарҙан башланды. Билдәләнгән объекттарҙа бер йыллыҡ сәскәләрҙе ҡала буйынса "Горзеленхоз" МУП-ының 235 хеҙмәткәре башҡара, уларҙың эшен 5 һыу һиптереү машинаһы, 8 бортлы, 6 үҙбушатҡыс автомобиль тәьмин итә. Быйыл барлығы 1,4 миллион дана сәскә ултыртыу планлаштырылған. "Горзеленхоз" МУП-ы ҡарамағында дөйөм майҙаны 280,13 гектар булған 84 парк һәм сквер бар.

✓"Өфө" аэропортынан яҡындағы ике баш ҡалаға: Екатеринбургҡа һәм Ҡазанға рейстар арта. "РусЛайн" авиакомпанияһы осоштар ике тапҡыр йышыраҡ - аҙнаһына алты тапҡыр буласағын хәбәр итте. Дүшәмбенән йомаға ҡәҙәр һауа суднолары Өфөнән Екатеринбургҡа иртәнге 9 тула 15 минутта осасаҡ. Өҫтәмә рейс йома төнгө 10-сы 25 минутта ҡаралған. Кирегә самолеттар дүшәмбенән йомаға ҡәҙәр киске 8-се яртыла һәм йәкшәмбе киске 8 тула 25 минутта сығасаҡ.

✓Башҡортостан Дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә тимер юл аша сыға торған ерҙәрҙә фотовидеотеркәү пункттарын булдырыу буйынса эштәр башланған. Улар Нуғайҙа (21 саҡрым), Шаманинда, Белорет (Асы) һәм Стәрлетамаҡ (152 саҡрым) райондарында барлыҡҡа киләсәк. Юл хәрәкәтендә ҡатнашыусылар штраф формаһында административ тәьсир саралары тимер юл аша сыға торған ерҙәрҙән киләсәген аңларға тейеш. Ведомствола иҫкәрттеләр: штрафтар ярайһы уҡ ҙур - биш мең һум буласаҡ.

✓Башҡортостан парламенты терроризмға ҡаршы комиссияның ҡарарын үтәмәгән өсөн яуаплылыҡ индерә. Шуның менән бәйле закон проекты әҙерләнгән дә инде. Ул ҡабул ителгән осраҡта терроризмға ҡаршы комиссияның ҡарарын боҙған өсөн граждандар өсөн - 1-3 мең һум, вазифалы кешеләр өсөн - 10-20 мең һум, юридик шәхестәр өсөн 30-50 мең һум штраф билдәләү ҡуҙаллана.

✓Башҡортостанда баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алырға ҡарар иткән ғаиләләр арта. Республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, 2017 йылда республикала 480 бала яңы ғаиләгә урынлаштырылған. Был 2016 йылға ҡарағанда 42 балаға күберәк. Уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алырға теләгәндәрҙең күбеһе ҙур ҡалаларҙа йәшәй. Атап әйткәндә, 2017 йылда Өфөлә - 90, Стәрлетамаҡта һәм Күмертауҙа 24 һәм 20 бала ғаиләгә урынлаштырылған.

✔ *Майҙандан Еңеү Байрағы үткәндә ҡарт яугирҙар орандан ҡуҙғыған һалдаттар кеүек аяғүрә баҫты. Эйәктәр күтәрелде, ҡараштар баҙыҡланды, һындар турайҙы.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘҢГЕЛЕК ХӘТЕР

**(Башы 1-се биттә).**

Бөйөк Еңеү байрамын, илебеҙҙең иң ҙур һәм данлы байрамдарының берекән тәрбиклөгә халыҡ күп йыйылғайны. Ил буйынса "Үлемһеҙ полк" акцияһында 10,4 миллион, ә Өфө ҡалаһында ғына 100 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Һәр ваҡыттағыса, Октябрь проспекты, Ленин майҙаны аллы-гөллө сәскәле болонға әүерелде. Был көндөң башҡа билдәле даталарҙан айырмалы рәүештә һағышлы һәм илһамлы булыуын да билдәләп китәйек. Сөнки был ысынлап та шулай. Һәр ғаилә, һәр кеше 9 майҙың илебеҙ тарихындағы изге көн булыуын һәм был көндө яулау өсөн миллион ҡорбандар бирелгәнен белә, иҫләй. Һәр ғаиләгә был көн үҙ мөһөрөн, үҙ хәтирәләрен һалған.

Баш ҡалабыҙҙағы "Үлемһеҙ полк" акцияһында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм Өфө ҡала округы Советы рәйесе Валерий Трофимовтар ҡатнашты.

Һуғыш хәтирәләрен беҙҙең көндәргә килтереп еткергән яугирҙарыбыҙҙың да сафы йылдан-йыл кәмей. Быйылғы Бөйөк Еңеү байрамындағы "Үлемһеҙ полк" атлаған майҙанда 12 генә һуғыш ветераны ҡатнашты. Шул 12 яугир алдынан 100 меңдән ашыу кеше баш эйеп, "Рәхмәт!" тип ҡысҡырып үтте. Ҡарап торғанда һуңғы көстәрен йыйып ҡына килгәндәрҙер кеүек тойолһа ла, майҙандан Еңеү Байрағы үткәндә ҡарт яугирҙар орандан ҡуҙғыған һалдаттар кеүек аяғүрә баҫты. Эйәктәр күтәрелде, ҡараштар баҙыҡланды, һындар турайҙы. Үҙҙәре олоғайһа ла, рухтары ныҡ һәм йәш ине уларҙың. Ошо бер күренештән генә лә уларҙың Еңеү яулаусылар икәнен аңларға була ине.

Майҙандан халыҡ ағылды ла ағылды. Йыр артынан йыр ағылды. Һуғыш йырҙарын бер кем дә тыныс ҡына тыңлай алмайҙыр. Парадта килеүселәрҙең дә, тамаша ҡылып тороусыларҙың да күҙҙәренән субырлап йәштәр аҡты. Кемдәрҙер ошо мәлдәрҙә, кемдәрҙер һуғыштың аҙағын да күрә алмаған туғандарын, яу яланында ятып ҡалғандарын, хәбәрһеҙ юғалғандарын, көтөп ала алмаған атайҙарын, исеме генә килеп еткән олатайҙарын, ә кемдәрҙер ил башына төшкән хәсрәттәрҙе, утлы өйөрмә еләндә туҙып-сәсешкән яҙмыштарҙы уйлағандыр. Күҙ йәштәренән, хисләнеүҙән, ҡушылып йырлаусылар, ололарҙы ҡосаҡлап-һөйөп китеүҙән тартынманы был көндө халыҡ. Экрандарҙағы һалдат фотоларын ҡарап, йәштәренә ҡойолоп тороусы әбей-бабайҙарҙы, эскәмйәләрҙә һағышланып моң тыңлаусы инәйҙәрҙе сәскәләр менән күмделәр. Күҙәтеүемсә, Өфө халҡы был матур йолала бигерәк тә бәләкәй балаларын ҡатнаштыртырға тырышҡан. Был да үҙенә күрә тәрбиә мәктәбе. Бәләкәстәр бүләктәрен тотоп, ололарҙың ҡаршыһына сыға, тәбрикләй. Тимәк, улар ниндәй сарала йөрөүҙәрен, кемдәргә рәхмәтле булырға тейешлектәрен белә - өйрәткәндәр. Тимәк, хәтер йәшәй.

Байрам ҡаланың Ленин майҙанындағы сәхнәлә йыр-бейеү менән дауам итте, һалдат бутҡаһы таратылды, сауҙа, ашһыу, күңел асыу саралары ойошторолдо. Ә инде тантананы төнгө ҡала күген тетрәндереп, мең төҫлө уттарҙа балҡып, Еңеү Салюты йомғаҡлап ҡуйҙы.

Шулай итеп, илебеҙ фашист илбаҫарҙарына ҡаршы тора алған, ер-һыуын яҡлаған һәм еңеү яулаған данлы тарихын етмеш өсөнсө тапҡыр билдәләп үтте. Башҡортостан Республикаһының төп халыҡ вәкиле булараҡ, был байрамда минең көйөфтө бер нәмә генә ҡыра төштө. Һәм быны әйтмәй булдыра ла алмайым. Парад ваҡытында бер генә лә башҡортса йыр ҙа яңғыраманы. Былтыр "Шайморатов генерал"ды йырлағайныҡ, башҡа йырҙар ҙа булғайны. Быйыл башҡортса хәрби йыр көтөп ала алманыҡ. Киләсәктә был хата төҙәтелер, тигән өмөттәбеҙ.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

АФАРИН!

# ЕҢЕҮ МАРАФОНЫ

**Салауат районы Лағыр ауылында быйыл да Еңеү марафоны ойошторолдо. Иҫтәлекле сара Лағыр - Мәсәғүт маршруты буйынса ҡырҡ саҡрымдан ашыу араға йүгереүҙә был юлы бөтәһе 60-ҡа яҡын кеше ҡатнашты.**



Еңеү марафонына старт һәйкәл янында бирелде. Лағыр урта мәктәбенең өлкән класс балалары, элекке сығырылыш уҡыусылары - бөтәһе 25 егет-ҡыҙ оҙон юлға йүгерергә сыҡты. Уларға юл ыңғайы Торналы, Янғантау, Йыланыш мәктәптәре уҡыусылары ла ҡушылды. Һәр мәктәпкә районды хәрби хәрәкәттәре ветерандары берләге рәйесе Рөстәм Хәснуллин махсус вымпелдар тапшырҙы. Уның менән бергә афған һуғышы яугирҙары Илшат Ғәлимов, Фәрүәз Ғәзимов та йүгереүселәрҙе финишҡа ҡәҙәре оҙата барҙы. Йәмғеһе алтмышҡа яҡын кеше Лағыр - Торналы - Йыланыш - Миәшәгәр - Семиряковка - Мәсәғүт маршруты буйынса йүгерҙе. Алда барыусылар Рәсәйҙең, Башҡортостандың дәүләт флагтарын, район, хәрби символика байраҡтарын тотҡайны. Торналы, Йыланыш, Миәшәгәр ауылдарындағы обелискылар эргәһенә туҡтап, митинг үткәрелде, сәскәләр һалынды. Район сигенә еткәс, марафонға мәсәғүттәр ҙә ҡушылды. Йүгереүселәр Дыуан районы үҙәгенә етеп, Мәсәғүт ауылының Еңеү паркындағы һәйкәлгә сәскәләр һалды. Уларҙы райондың сик буйы ғәскәрҙәре ветерандары ойошмаһы рәйесе Илдар Фәйзуллин, Дыуан районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Альберт Кинйәбулатов, урындағы пограничник һәм афған ветерандары хөрмәтләп ҡаршы алды.

Лағыр урта мәктәбе Еңеү марафонын быйыл дүртенсе тапҡыр уҙғарҙы. 1980 йылда - Бөйөк Еңеүҙең 35 йыллығына ул саҡта физкультура уҡытыусыһы булып эшләгән Радик Ниғмәтйән улы Мөхәмәтйәнов ошондай сараны тәүләп ойошторған. Уның еткәселегендә биш егет Янғантау аша Малаяҙға тиклем йүгергән. Ә 2015 йылда, Еңеүҙең 70 йыллығына, мәктәп директоры Ринат Ситдиҡов был изге традицияны ҡайтанан тергеҙгән. 11 егет һәм 2 ҡыҙ район үҙәгенә тиклем йүгереп барған. Былтыр 30-ға яҡын кеше Лағыр - Үрге Ҡыйғы маршруты буйынса 41 километр араны йүгереп үткән. Быйыл да сараның дауам итеүе һәм марафонға райондың башҡа мәктәптәре лә ҡушылыуы ҡыуандыра. Тимәк, яугир олатайҙарҙың фронттағы ҡаһарманлығы, өләсәйҙәрҙең тылдағы фиҙакәр хеҙмәтенә йылдан-йыл ихтирам көсәйә, Бөйөк Еңеүҙең әһәмиәте арта бара. Бөгөнгө йәш быуын сәләмәт тормош яҡлы булып, үҙ өлгөһөндә быны тағы бер тапҡыр иҫбатлай.

**Айҙар НОҒАМАНОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯУАП БИРҺЕНДӘР...

● **Рәсәйҙәрҙең 40 проценты дауалау сифаты өсөн табиптарға һәм медицина учреждениеларына етәкселәренә шәхси яуаплылыҡ индереүҙе кәрәк тип иҫәпләй, тип хәбәр итә "Известия" гәзите Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге тикшеренеүҙәренә һылтанып.** Өҫтәүенә, рәсәйҙәрҙең 60 проценты дәүләт медицина учреждениеларын финанслау хаҡында ҡарар ҡабул иткәндә пациенттарҙың мөрәжәғәттәр һәм ялыуҙар һаны иҫәпкә алынырға тейеш, тигән фекерҙә. Һорау алыу телефон аша 2018 йылдың 11 апрелендә 18 йәштән өлкән бер мең кеше араһында уҙғарылған.

● **Рәсәй Президенты Владимир Путин беренсе һәм икенсе бала тыуған йәки тәрбиәгә алған осрaкта айлыҡ түләүҙәрҙе физик берәмектәрҙең килеменә һалымдан азат иткән законға ҡул ҡуйҙы. Ул закон Рәсәй биләмәһендә ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлдә.** Түләүҙәр балаға йәш ярым тулғансы тәғәйенләнә. Уларҙы ярты йылға тиклем оҙайтыу мөмкинлеге бар - бының өсөн яңынан ғариза яҙырға кәрәк. Социаль түләүҙәрҙең күләме ил субъектында уҙған йылдың икенсе кварталы өсөн балаларға билдәләнгән йәшәү минимумына тиң. Бындай дәүләт ярҙамы социаль йүнәлешле булғанлыҡтан, закон был түләүҙәрҙе НДФЛ-дан азат итә.

● **Бынан тыш, В.Путин тағы бер нисә мөһим законға ҡул ҡуйҙы:**

- Әгәр кем хаҡындалыр (уның ғәйебе булмаһа ла) интернетта бысраҡ ғәйбәт таратып, нахаҡ бәләләр яғыла икән, зыян күреүсе хәҙер суд аша бындай сайттарҙы яптырыуға өлгәшә ала.

- Электрон карталарҙан һәм банктағы иҫәптән аҡса урлаусыларға ҡарата ла яза сараларын ҡәтғиләштерелгән законға ҡул ҡуйылды. Бындай уғрылыҡҡа барған кешеләргә хәҙер 100-300 мең лап штраф һалына йәки улар 5 йылға тиклем мәжбүри эштәргә ҡушыла, шулай уҡ 6 йылға хәтлем иркенән мәхрүм ителеүҙәре лә ихтимал.

- Эске туризмдың үҫешенә ярҙам йөҙөнән хәҙер Рәсәй курорттарына путевкалар өсөн компенсация ҡарала. Хеҙмәткәрҙәренә, уларҙың ғаилә ағзаларына ил буйынса туристик путевкаға түләгән компаниялар һалым ташламалары рәүешендә әлеге сығымдарын ҡайтара аласаҡ. Был программаға ингән ҡатнашыусылар исемлегендә хеҙмәткәрҙәр үҙҙәре, уларҙың йәмәғәттәре, ата-әсәләре, 18 йәшкәсә (юғары уҡыу йортонон көндөҙгө бүлегендә уҡыһа - 24 йәшкәсә) балалары ла индерелгән. Сығымдарҙы ҡаплау 50 мең һумға тиклем рөхсәт ителә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сөгөлдөр

❖ Сөгөлдөр һөйгән ашым түгелдер, тимә. Инсульттан, инфарктан һәм яман шеш сиренән һаҡланыу, гемоглобинды, кәүҙә ауырлығын нормала тотоу, холестеринды юҡ итеү, ҡанды таҙартыу өсөн даими сөгөлдөр ашағыҙ. Һутын эсегеҙ. Әллә ниндәй сит-ят еләк-үлән эҙләмәгеҙ.

### Емеш һөйәктәре

❖ Алма орлоғо яман шеш сиренә ҡаршы иң көслө дауа - ул йыуан эсәктә, үпкәлә, ашҡаҙанда, ашҡаҙан аҫты биҙендә яман шеш күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүҙе туҡтата.

❖ Виноград орлоҡтары ла ямаш шеш күҙәнәктәрен юҡ итеүсе матдәләргә бай.

❖ Киндер, етен орлоҡтары, абрикос төшө B17 витаминына бай, был витамин яман шешкә ҡаршы көс.

❖ Орлоҡтарҙы ашарға, сәйгә һалып эсергә була. Саф һауала йөрөүҙе лә, хәрәкәтте лә онотмағыҙ, сирҙе күп һөйләмәгеҙ.

### Катаракта

❖ Катаракта булмаһын өсөн ашаған ризығығыҙҙа С һәм Е витаминдары мул булһын. Е витамины күберәк үҫемлек майында, ноҡот борсағында, гөлйемештә, әнләктә күп була.

❖ С витамины ҡара ҡарағатта, крыжовникта, еләктә, киви емешендә, таттлы бороста, шпинатта күп.

❖ Күҙҙе баллы һыу йәки ыршы майынан яһалған шыйыҡса менән йыуырға була.

❖ Ҡояшта йөрөгәндә ҡара күҙлек кейегеҙ, ультрафиолет нурҙарҙан һаҡланығыҙ.

### Баллы һөт

❖ 1 стакан йылы һөткә 1 балғалаҡ бал ҡушып болғатығыҙ һәм иртәнсәк аҡ ҡарынға яйлап ҡына эсегеҙ. Ул эс ҡатыуҙан дауа, эсәк сирҙәрен дә дауалай, эс күбеүгән бөтөрә. Боронғо дауа был, Греция, Мысыр, Рим халҡы шулай дауаланған.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ул әлеге аяҡ ҡалдығын һыуға тыға, миндә иһә ниндәйҙер йәлләү тойғоһо уяна. - Еҙнә, ниңә берәй тынысыраҡ эшкә тотонмайһың? Ул өндәшмәй ултыра бирә лә өҙә генә әйтә: - Тыныс эш ҡыҙыҡ булмай ул.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Сәлих бәйғәмбәр

Ғәрәптәрҙең Хиджаз менән Табук араһындағы өлкәлә йәшәгән самуд ҡәбиләһе лә таш һындарға табынғас, Алла улар янына илсе итеп Сәлихте ебәрә. Сәлих уларҙы таштарға түгел, фәҡәт Аллаға ғына табынырға өндәй. Ҡайһы берәүҙәр уға эйәрә, ә күптәр ышанмай, уны мыҫҡыллап көлә. Хатта бәғзеләре Сәлихте үлтерергә маташа. Шунан улар Алланан даулап алған инә дөйәне үлтерә. Шуға күрә Аллаһы Тәғәлә уларҙы ҡәһәрләй. Ул: "Беҙ самуд ҡәбиләһенә ихлас күңелегеҙҙән Аллаға табыныуығыҙ, тип Сәлихте ебәрҙек. Алланың инә дөйәһен һеҙгә төшөрөүе үҙе үк Хоҙайҙың аныҡ танытмаһы булды. Инә дөйә Алла ҡолындағы яланда утлаһын. Дөйәне йәберләмәгеҙ, югиһә, Алланың ҡаты ҡәһәренә дусар булырһығыҙ. Уның һеҙҙе әҙиттәр ҡәбиләһенең варистары итеп, һеҙ зиннәтле һәм ҡеүәтле һарайҙар һалған, тауҙарҙа йәшәр урын уйған бай, һутлы ергә урынлаштырыуын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Алланың мәрхәмәтен онотмағыҙ. Ул хөрриәттә йәшәһендәр, тип, һеҙгә бирген гүзәл ерҙә бысраҡлыҡ таратмағыҙ", ти.

Сәлих бәйғәмбәр: "Ҡылған гонаһтарығыҙ өсөн үкенеп, Алланан ярлыҡау һорағыҙ, Уның мәрхәмәте киң, ярлыҡау һораусыларға миһырбанлы, ярҙамсыл", тип ҡәбилә кешеләрен гонаһтары өсөн үкенергә саҡыра. Ләкин самудтар: "Һин беҙҙән атабабаларыбыҙҙан ҡалған аллаларыбыҙға табынмауыбыҙҙы талап итәһеңме? Беҙ һинең саҡырыуыңдың ихласлығына ышанмайбыҙ", тигәс, Сәлих бәйғәмбәр: "Эй, халҡым! Әйтегеҙ әле, әгәр мин һеҙҙе нимәгә саҡырыуҙарымды... һәм Уның мине илсе, бәйғәмбәр итеп һайлап ебәреүен, Уның саҡырыуҙарын тапшырырға тейешлегемдә яҡшы төшөнмәйем икән, нисек инде һеҙгә ярайым, тип, Уны тыңламаҫҡа тейешмен? Әгәр Алла ҡушҡанды эшләмәһәм, кем мине ҡәһәрләүҙән яҡлар? Һеҙ минең Аллаға һыйынырға саҡырыуымдан баш тартыуымды һорап, үҙегеҙ кемдән яҡлау табырға уйлайһығыҙ? Әгәр һеҙҙең талаптарға ризалашһам, арағыҙҙан йәки башҡа халыҡтар араһынан булһынмы, берәү ҙә Алланың ғазап сиктергес ҡәһәренән ҡасып ҡотола алмаясаҡ", тигәс, самудтар: "Әгәр ошоно дөйәгә әүерелдерә алһаң, ихласлығыңа ышанасаҡбыҙ", тип ҡулына таш тоттора. Сәлих бәйғәмбәр уларҙың антын алып, намаҙ уҡыған ерено барып, Алланан самудтар талап иткән дөйәне биреүен һорағас, Алла ташҡа икегә ярылырға бойора һәм таш эсенән быуаҙ дөйә килеп сыға. Ошо хәлдән һуң ҡайһы берәүҙәр бәйғәмбәргә ышана, ләкин күптәр һаман ҡаршылаша.

## Ибраһим бәйғәмбәр

Ибраһим ағалары Наур менән Һаран кеүек, Вавилонға яҡын Тигр менән Евфрат йылғалары араһындағы Халдейҙә донъяға килгән. Ә Һаран - Лут бәйғәмбәрҙең атаһы булған.

Ибраһимдың ҡатыны Сара түлһеҙ була. Улар Ибраһимдың атаһы һәм Луттың туғаны менән Иерусалимға китә. Ираҡтағы Харран ҡалаһына килеп еткәндә 250 йәшлек атаһы үлгәс, Ибраһим ҡатыны һәм туғаны менән шунда йәшәргә ҡала. Ул замандарҙа Ибраһим, Сара һәм Луттан башҡа кешеләр динһеҙ була.

Харран ҡалаһы халҡы ла йондоҙҙарға һәм таш һындарға табынып йәшәгән. Аллаһы Тәғәлә Ибраһимға хәҡиҡәт юлын күрһәтә, аҙаҡ уны бәйғәмбәр итә һәм Ибраһим ҡартайғас, иң яҡын кәңәшселәренең береһе итеп ала. Алла: "Ибраһимды иң абруйлы, бөтөн ҡылған изге ғәмәлдәренә тоғро лайыҡлы кеше булараҡ белгәнгә, уға иман юлы менән етәкселек итеүҙе тапшырҙыҡ", ти. Ә Ибраһимдың иман юлына төшөргә саҡырған беренсе кешеһе уның таш һындарға табынып йәшәгән атаһы була. Ҡөрьәндә Ибраһим атаһы Азарға: "Һин ысынлап та таш һындарҙы илаһилаштырып, уларға табынаһыңмы! Күрәм... һин дә, халыҡ та хәҡиҡәт юлынан алыҫтаһығыҙ",- ти.

**(Дауамы бар).**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# МИН БЕЛГӘН ВЕТЕРАН

**Беҙ, хәҙер "һуғыш ветераны", "һуғыш балалары" тип йөрөтөлгән быуын, һуғыш уты эсендә булмаһаҡ та, ул ҡәһәрле йылдарҙың ауырлығын муйындан татыныҡ. Атай, ағайҙарҙы зар илашып фронтҡа оҙатыу, һөйәктәребеҙ ҙә ҡатмаған көйө өлкәндәр эшенә тотоноу, ас-яланғаслыҡ...**



Ярай, әле минең был ҡәһәрле көндәр хаҡында берәмтекләп һөйләгем килмәй. Шул ваҡыттағы һирәкләп була торған ҡыуанысլы мәлдәр иҫкә төшә. Уларҙың иң онотолмай торғаны - фронттан килгән хаттар һәм, бигерәген дә, яраланып ҡайтыусыларҙы күреү шатлығы. Бик һирәк - берәмтекләп кенә ҡайтып төшә ине утта янып-көйгән, яраланған һалдаттар. Уларҙың иҫән-һау ҡайтыуы оло ҡыуанысҡа әүерелә, уларҙы күрергә бөтә ауыл менән барабыҙ.

Һуғыш бөткән көндәрҙәге шатлыҡты һөйләп аңлатырлыҡ түгел. Тик ул ҡыуанысլы минуттар ҡан-йәш менән дә һуғарылғайны; ауылдан фронтҡа киткәндәрҙән яртыһынан күберәге тыуған яҡтарға әйләнеп ҡайта алманы...

Ә бына уттар кисеп кире ҡайтҡан ағайҙарҙың ниндәйҙер тыйып торғоһоҙ дәрт менән эшкә тотоноп алып китеүҙәре, ауылға тормош, йәшәү уты ҡабындырыуҙары хәтерҙә. Хәҙер уйлап ҡараһам, уларҙың күптәре фронтта тән яраһы алған, хатта һыңар аяҡ, һыңар ҡул менән ҡалған ирҙәр булған икән дә!

Ана шундайҙарҙың береһе тураһында һөйләп үткем килә. Ул - Тимерғәле Сәлих улы Галин. Ҡыҙы Сания уның тураһындағы иҫтәлектәрен:

*Тарихсының китабына*
*Бары тик өс һүҙ яҙылған:*
*Өлкән сержант*
*Галин булған*
*Ташбүкән ауылынан*, - тигән шиғри юлдар менән башлай. Ташбүкән (Урта Айыры) минең Ҡолғона ауылынан биш кенә саҡрымда. Тимерғәле Галин үҙенең ана шул кескәй генә ауылдан башланып, һикһән дүрт йылға һуҙылған ауыр, ҡатмарлы тормош юлын ғәжәп бер баҫалҡы тыйнаҡлыҡ менән дәфтәрҙең ике битенә һыйҙырған. Ул иҫтәлекле яҙыу: "Балалар, һеҙгә, шулай уҡ киләсәк быуын өсөн яҙам", - тип башлана ла дүрт йыл буйы дауам иткән үлемесле һуғыш юлдарын ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирә.

Ә бит Тимерғәленең уттарҙа сыныҡҡан ғүмер юлы китап итеп яҙырлыҡ. Ул хеҙмәткә утыҙ алтынсы йылдан саҡырылып, һуғыш башланғанға тиклем үк хәрби сынығыу алырға өлгөрә. Тыуған ауылындағы промартелдә бригадир булып эшләп йөрөгән саҡта һуғыш башлана һәм ҡырҡ беренсе йылдың декабренән алып, уны бер нисә тапҡыр үлем ҡосағына ташлаған, һалдат данын да бүләк иткән, дүрт йылға яҡын һуҙылған утлы юлдарҙан Сталинградтан Одер яҙарына тиклем алып барып еткергән. Тимерғәле үҙе был хәтәр хәлдәрҙе үрҙә телгә алған иҫтәлегендә, бик ябай күренеш һымаҡ, бер нисә ауыҙ һүҙ менән генә телгә ала. "Ҡырҡ икенсе йылдың 28 ноябрендә һигеҙ һалдат менән разведкаға барҙыҡ. Богдановка ауылында байтаҡ немецтарҙы ҡырып, берәүһен тере көйө алып ҡайттыҡ. Генерал Шаймуратов беҙгә награда бирҙе", - тип яҙа ул. Ә бит уның был ҡыйыулығы өсөн "Батырлыҡ өсөн" миҙалы тапшырыла! "Восточный Пруссияны алганда ҡатнашып, бында күрһәткән боевой эштәрем өсөн Ҡыҙыл йондоҙ ордены менән бүләкләнеләр" (октябрь 1944 йыл). Артабан: "10 февраль көнөндә Одер ярына етеп барғанда Перславль ҡалаһын ҡамаған саҡта мин ултырған танк янды, ошо уҡ көндә аяғым өҙөлдө", - тип яҙған. Галиндың яҙыуынса, бөтәһе лә ҡайһылай ябай - батырлыҡ та, үлемесле яраланыу ҙа!

...Һуғыштан һуңғы бик ҡатмарлы, ауыр осорҙа, икенсе төркөм инвалид булыуға ҡарамаҫтан, ауыл Советы рәйесе булып эшләргә тура килде Тимерғәле Галинға. Халыҡ һәр төрлө һалымдар түләргә, заемға яҙылырға, ауыҙынан өҙөп, ит, май, йөн заданиеларын ваҡытында үтәргә тейеш. Етемһерәгән мәктәп, фельдшерлыҡ пункттары ремонт талап итә. Быларҙың бөтәһе лә ауыл Советы өҫтөндә. Ул саҡтағы "Большевик" промартеле өҫтөнә төшкән ауыр пландарҙы үтәүҙә ярҙам күрһәтеүҙән дә ситтә ҡалып булмай ине. Ныҡышмал холоҡло, шул уҡ ваҡытта сабыр тәбиғәтле Тимерғәле Галин бөтәһенә лә өлгөрөргә тырыша, район етәкселәренең сыбыртҡыһына ла эләгә, әммә өлкәндәр кәңәшенә таянып, йәштәрҙән дә айырылмай, ныҡышмалы рәүештә эшләүен белә. Уның клубҡа килеп, таяғын ситкә ҡуйып, бер итеп бейеп йөрөгәнен дә күргән булды.

Ә бына берҙән-бер мәл, 1947 йылда ине шикелле, йәштәр клубта Баязит Бикбайҙың "Ҡарлуғас" пьесаһы буйынса спектакль күрһәтергә булды. Ундағы Шатморат ролендә - Тимерғәле Галин, ә Ҡарлуғас булып минең Мәфрүзә апайым уйнаны. Халыҡ, ҡайнылай оҡшатып уйнайҙар, тигән булып, эй ихлас итеп ҡараны уны. Хатта берәүҙең, Тимерғәленең аяғы уҫҡан инде әллә, сатанламай бит, тигән һүҙҙәре лә хәтерҙә.

Ошонан аҙаҡ бер аҙ ваҡыт үткәс, Мәфрүзә апайым уға тормошҡа сығып, матур итеп донъя көтөп алып киттеләр. Тимерғәле еҙнә өй һалып, матур итеп донъяһын да нығыта башлағайны, әммә район етәкселеге уны ҡапыл ғына Маҡар сельпоһына рәйес итеп күсерҙе. Был сауҙа ойошмаһы бик күп ауылдарҙы аҙыҡтүлек, ҡалған тауарҙар менән тәьмин итә ине. Берәү булһа, сатанлығына һылтанып, был тынғыһыҙ эшкә бармаҫ та ине. Ләкин Тимерғәле Галин иһә үҙ холоҡ-ғәҙәтенә тоғро ҡалды һәм ең һыҙғанып, яңы эшкә тотондо. Тауар менән магазиндарҙы өҙләкһеҙ тәьмин итеү өсөн Стәрлетамаҡ менән Маҡар араһын өҙләкһеҙ тапарға, килтерелгән тауарҙарҙы ауыл магазиндарына таратырға тура килә. Өҫтәүенә, ике аттан башҡа транспорты ла юҡ ине бит әле.

Уға ике-өс йылға бер тапҡыр аяҡ протезын алмаштырырға кәрәк ине. Мин Өфөгә күскәндән аҙаҡ, ул, әлбиттә, төҙә тура беҙгә килә. Ултырып саҡ ҡына хәл йыйғас, ул протезын ысҡындыра, махсус бәйләнгән йөн ойоғон сисә лә, тубығынан түбәнерәк ҡыркылған, төҫһеҙләнеп сурышҡан тупыс аяғын иплəп кенә ыуа башлай. Шунан Фәһимәнән:

- Килен, биҙрәгә һалҡынса һыу һалып бир әле, - ти.

Ул әлеге аяҡ ҡалдығын һыуға тыға, миндә иһә ниндәйҙер йәлләү тойғоһо уяна.

- Еҙнә, ниңә берәй тынысыраҡ эшкә тотонмайһың?

Ул өндәшмәй ултыра бирә лә өҙә генә әйтә:

- Тыныс эш ҡыҙыҡ булмай ул.

Был ябай ғына һүҙҙәрҙең мәғәнәһен мин ул саҡта, бәлки, аңлап еткермәгәнмендер. Быны хәҙер уның йәнә бер һүҙе иҫкә төшә лә, уның ниңә шулай тигәнен төшөнгән кеүек булам.

- Мин бит, ҡәйнеш, үлемдән ҡалған кеше. Снаряд ярсығы бәреп өҙгән аяғыма ҡабат-ҡабат биш тапҡыр операция яһанылар. Наркоз яһап, иҫте юғалталар... Ана шул саҡта әллә нисәмә йылға ғүмерем ҡыҫҡаргандыр, тим. Наркоз ғүмер ептәрен өҙгәләй тигәндәрен ишеткән бар. Шуғамы икән, һәр көн ҡәҙерле миңә.

Үлемдән ҡалған кеше генә ғүмер тураһында ана шулай уйлана алалыр. Һәр көндөң ҡәҙерен белгән кеше генә: "Тыныс эш ҡыҙыҡ булмай ул", - тип, иҫән саҡта бөтәһен дә эшләп ҡалырға тырышып, тынғылыҡ белмәй йәшәйҙер. Шул уҡ ваҡытта ул ғүмеренең аҙағына тиклем ир кеше баҫалҡылығын һаҡланы. Юғарыла әйтеп үткән орден, миҙалдарын түшенә тағып, бына кем беҙ, тигән кеүек йөрөү ҙә уның өсөн ят күренеш ине. Нурғәле улы байрам алды көнөндә наградаларын тағып алырға тәҡдим иткәс:

- Кеше күрһен тип йөрөтөргә уйынсыҡ түгел бит ул, - тип ҡырт киҫә.

Тимерғәле Галин оҙон уҡ ғүмер кисерҙе - туғыҙынсы тиҫтәһе менән барғанда яҡты донъя менән хушлашты, ә ошо көндәргә уның тыуыуына 100 йыл тулған булыр ине. Хәтәр тынғыһыҙ быуат... Яҡты донъяның ҡәҙерен белеү йәшәткәндер уны, моғайын. Ил азатлығын һаҡлап ҡалған һалдаттың яҡты рухы һаман да беҙҙең менән: уның ғүмерен балалары - улдары, ҡыҙҙары, ейән-ейәнсәрҙәре дауам итә.

Атаһына арнап байтаҡ шиғырҙар яҙған Сания һеҙлемдең йәнә бер шиғыры иҫкә төшә;

*Йылдар үткән һайын*
*күңелдәрҙә*
*Хәтирәләр балҡып ҡабына,*
*Һин өйрәткән тормош*
*һабаҡтары*
*Һаҡлай беҙҙе ғүмер буйына.*
*Амин, шулай булһын!*

**Ноғман МУСИН,**
**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

2

Ғаиләм-ҡәлғәм

12-18 май (һабанай)

2018 йыл

№19 (801)

ИШАРА

**Рим империяһының емерелеү тарихына арналған китаптар теҙмәһен уҡығайным. Ҡотороу сигенә сығып, шашынған мәле була был империяның. Биләмәләренән ағылған байлыҡтың, ризыҡтың осо-ҡырыйы юҡ, халыҡ туҡ тамаҡҡа иҙрәп, донъяның артына тибеп ғүмер һөрә. Аристократтар ал-ял белмәй типтерә лә, туҡтамай тығына. Хатта яңы тәғәмгә урын бушатыу өсөн махсус бүлмәләр булдырыла, ваҡыты-ваҡыты менән ҡоҫоп алыу өсөн...**



# ҠОРһАҠ ДИКТАТУРАҺЫ

Әлеге көндә ошо уҡ күренеш беҙҙә барған кеүек тойолоп китә ҡайһы берҙә. Төбәктәрҙе һурып, өҫтә "бирелләр" шашына, аҫтағылары ла ғарҡ әллә ҡайҙан килгән, әллә кемдәр етештергән ашанты менән. Өҫтәлдәр ярышы килеп сыҡты хәҙер - унда нимә генә юҡ, ер йөҙөнөң һәр еренән килгән тәғәм янында кишер, сөгөлдәр үгәй бала ғына! Өләсәйем: "Ул бит баҡса емеше түгел, аҡса емеше", - тип, магазиндан алынғанды ололар ине. Хәҙерге "аҡса емешен" күрһә, ни тиер ине икән?

Иң ғәжәбе: йәш кенә, мәш килеп балалар үҫтереп ятҡан ғаиләләр мал тотмай. Аптырамай ғына: "Беҙҙең һыйыр магазинда ул", - тип маһаялар. Йәшелсә түгел, картуф сәсмәгәне лә бар. Магазиндан сығып килгән һәр икәүҙең балаһында ялтыр төргәк. Ашап бара, төргәге ерҙә елферләп ҡала... Мәктәптә үҫемлектәр биологияһына булыр булмаҫ 20-25 сәғәт дәрес ҡалды, икмәктең ҡайҙан икәнен белмәгән быуын үҫеп килә. Хеҙмәт дәрестәрен дә исем өсөн генә ҡалдырҙылар - көрәк тота алған, эш мәле белгән балалар юҡ иҫәбендә! Ни булды был илгә?

Билдәле яҙыусыбыҙ Мостай Кәримдең ошондай һүҙҙәре бар: "Беҙ милләтебеҙ яҙмышы, уның киләсәге тураһында борсолоп, хаҡлы рәүештә һүҙҙе былай тип башлайбыҙ: "Телебеҙҙе, йыр-моңобоҙҙо, изге йолаларыбыҙҙы, айыҡ аҡылыбыҙҙы һаҡлайыҡ". Был - уй-теләктәребеҙҙең төп асылы. Әммә милләтте һаҡлар, уны раҫлар һәм күтәрер тағы бер нәмә бар. Ул - хеҙмәт. Аҡыл һәм ҡул хеҙмәте. Эштән биҙгән халыҡ, хеҙмәттә маһирлығын, ихласлығын, ижади ярһыуын юғалтҡан милләт меҫкенгә ҡаласаҡ. Ул инде, "илем-телем" тип күпме ҡабатлаһаң да, телен дә, моңон да, рухын да, йолаларын да һаҡлай алмаясаҡ". Һығымтаһын үҙең яһа, уҡыусы...

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**

ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!

# БАЛАНЫҢ... ҮҘ ӨЛӨШӨ



**Беҙ йәш ғаилә. Үҙебеҙҙең йортобоҙ булмау сәбәпле, ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәйбеҙ. Республикала йәш ғаиләләргә торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүҙә ярҙам күрһәткән ниндәй программалар бар икәнлеген белергә ине.**

• Башҡортостанда был йәһәттән федераль һәм төбәк программалары эшләй. Илдә 2025 йылға тиклем "Рәсәй Федерацияһы граждандарын һәр кем алырлыҡ һәм уңайлы торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр менән тәьмин итеү" (Обеспечение доступным и комфортным жильем и коммунальными услугами граждан РФ) программаһы сиктәрендә "Йәш ғаиләне торлаҡ менән тәьмин итеү" проекты эшләй. Әлеге проекттың ҡатнашыусыларына, балаһыҙ булған осраҡта, торлаҡ хаҡының 30 процент һәм балалары булғандар - 35 процент күләмдә социаль түләмдәр ҡаралған. Ул аҡсаны тик ипотека бурысын ҡаплауға, торлаҡ һатып алырға йәки үҙ йортоңдо төҙөү өсөн генә тотонорға мөмкин. Программала ҡатнашыу өсөн ирле-ҡатынлыларҙың (йәки яңғыҙ ата-әсәнең) йәше 35-тән үтмәҫкә тейеш. Ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса иҫәптә торорға һәм уларҙың ҡулында торлаҡтың ҡалған хаҡын түләрлек аҡсаның булыуы мөһим.

Программа буйынса сиратҡа тороу өсөн ғариза биреүсенең һәм уның ғаилә ағзаларының шәхесте раҫлаусы документтары күсермәһе, күсемһеҙ милекте теркәүсе дәүләт реестрынан һәр береһе исеменә алынған күсермә, хакимиәттән ғаилә ағзаларының берәүһенә торлаҡ бинаһы майҙанында иҫәпләнгән норма билдәләнгән белешмә, торлаҡтың кадастр паспорты, йәшәү урыны буйынса теркәлеү белешмәһе, ғаилә хәле тураһында белешмә, ғаилә ағзаһының һәр береһе исеменә йорт кенәгәһенән һәм шәхси счеттарынан выписка, һәр баланың тыуыу тураһындағы һәм ғаилә хәле тураһында таныҡлыҡтар күсермәһен урындағы хакимиәттең йәштәр менән эшләү бүлегенә йәки муниципаль мөлкәт менән идара итеүсе комитетҡа тапшырырға кәрәк.

• **Төбәк программалары.** Республика Башлығы Указына ярашлы, ғаиләлә беренсе бала тыуғанда торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға тотоноу өсөн 300 мең һум күләмдә аҡса бүленә. Был программала ҡатнашыу шарттары:

- ✓ бала 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем донъяға килергә тейеш;
- ✓ ғариза биреүсе ғаилә Башҡортостан биләмәһендә даими йәшәүсе Рәсәй Федерацияһы граждандары булырға тейеш. Баланың республиканан ситтә тыуыуы программала ҡатнашырға шулай уҡ хоҡуҡ бирә;
- ✓ ата-әсәнең (йәки берәүһенең) йәше 35-тән артмаҫҡа тейеш;
- ✓ ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж тип табылған булырға тейеш;
- ✓ ғаиләнең торлаҡтың ҡалған хаҡын түләй алырлыҡ аҡсаһы булырға тейеш.

Бер тапҡыр түләнә торған аҡсаны алыу өсөн документтарҙы урындағы күп функциональ үҙәктәр аша йәки тура БР Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетына тапшырырға кәрәк. Улар исемлегенә социаль түләү бүлеүҙе һорап яҙылған ғариза, шәхесте раҫлаған документ һәм баланың тыуыуы тураһындағы таныҡлыҡтың күсермәләре, никахҡа инеү тураһындағы таныҡлыҡ, ЗАГС-тан баланың тыуыуы тураһында бирелгән медицина белешмәһе күсермәһе, урындағы хакимиәттән ғаиләнең торлаҡ шарттары яҡшыртыуҙы талап итә, тигән белешмә, шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ биргән ҡағыҙҙар инә. Әгәр ҙә социаль түләмде ипотеканы ҡаплауға тотонорға уйлағанда шулай уҡ кредит йәки займ килешеүенең күсермәһен, торлаҡ һатыу-һатып алыу килешеүенең күсермәһен, Росреестрҙан торлаҡҡа хоҡуҡты аныҡлаған выписканы, шәхси йорт төҙөгән осраҡта төҙөлөш подряды килешеүе күсермәһен, кредиторҙан төп һәм проценттар буйынса ҡалған бурыс күрһәтелгән белешмә инә.

ҺАБАҠТАР

# ҺАЛПЫ ЯҠҠА ҺАЛАМ ҠЫҪТЫР!

**Гәзитебеҙҙә "Ғаиләм - ҡәлғәм" исемле махсус бит асылыуын сәләмләп ҡаршы алып, уға шунда уҡ әүҙем ҡушылыу теләге тыуҙы. Һәммәбеҙ өсөн мөһим, ифрат та етди бындай темаға битараф ҡалыусылар юҡтыр ҙа, тип уйлайым.**

Ошо махсус биттәге "Иреңде маҡтап торһаң..." тигән әңгәмәлә ҡатнашыусыларҙың ифрат та аҡыллы фекерҙәрен кинәнеп, хатта ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым. Уларҙың әйткәндәренә эйәреп, үҙебеҙҙең (мин тыуып үҫкән, биш кешенән торған) ғаиләнең дә бер бәләкәй генә серен асып китмәксемен. Ғаиләбеҙҙәге оло ғына килендәрҙең береһе "сер генә" итеп, бер йәш килендәшенә: "Һөйөндөковтарҙы һәр саҡ маҡташтырып тороу кәрәк, улар шуны ярата", - тип аҡыл өйрәтеүен, артабан шул бәләкәй киленебеҙҙең дә "сер генә" итеп ошо һүҙҙе икенсеһенә тапшырғанлығын иҫләп, йыш ҡына мәжлестәрҙә көлөшөп алабыҙ. Әллә ошо йола арҡаһындамылыр, барлыҡ килендәр һәм кейәүҙәр менән үҙебеҙҙең татыу ғаиләлә бер туғандар һымаҡ булып киткәнбеҙ беҙ. "Маҡташтырыу", тигәндәй, Һөйөндөковтарға ғына түгел, башҡа һәр кемгә лә килешеп ҡалалыр ул. Икенсе төрлө итеп, беҙҙең яҡтың теле менән әйткәндә, "һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырыу", йәғни, аҙ ғына фәстереп ебәреү, ысынлап та, ғаилә татыулығын һаҡлауға ярҙам итеүсе ышаныслы сара булып тора. Был, бер яҡтан ҡарағанда, ниндәйҙер кимәлдә алдашыуға ла бер аҙ тартым. Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм әҙәм балаһына алдашыуҙы, әлбиттә, ҡәтғи тыйған, әммә... тормошта була торған өс осраҡ өсөн генә алдашыуҙы Ул рөхсәт иткән! Был хаҡта сахих (дөрөҫ) хәҙис бар. Беренсе осраҡ - асыуланышып йөрөгән ир менән ҡатынды, йә иһә башҡа кешеләрҙе үҙ-ара яраштырыу маҡсатында кемдеңдер бер аҙ алдап ебәреүе тыйылмай. Иң яҡшы ниәт менән атҡарған бындай алдашыу хәләл икәнен белергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, ир менән ҡатын, ниндәйҙер сәбәп менән үпкәләшеп, ыҙғышып киткән дә, ошоғаса бер-береһенә һүҙ ҡушмай, айырым йоҡлап, хатта иҫәнләшмәй ҙә йөрөйҙәр икән, ти. Ә дуҫ-иштәре уларҙың икеһе менән дә яҡшы мөнәсәбәттә һәм уларҙың икеһен дә берҙәй яҡын күрә. Бәхәстә булған дуҫтарын йәлләп, улар өсөн ифрат та борсолоп, нисек итеп быларҙы яраштырырға берәй ысул эҙләй торғас, әйтәйек, бер әхирәттең башына уй килә. "Яңыраҡ минең Сәлимйәнем һинең Ғәлиәхмәтең менән һөйләшеп ултырған. Ғәлиәхмәт һинең менән асыуланышҡанына шундай ныҡ үкенә икән, әхирәт, нисек итеп һинән ғәфү үтенергә белмәй. Үҙе һинең фәлән-фәлән яғыңды маҡтап алған..." - тип һүҙ араһында әйтеп ебәрә был. Йәғни, үсексән әхирәтенең "һалпы яғына һалам ҡыҫтырыштырып", уның күңеленә "бет" ебәрә. Оҙаҡҡа һуҙмай, яҡынса шундайыраҡ итеп, "алдаштырып-һолдаштырып, бер аҙ ғына һуған тураштырып", Ғәлиәхмәттең дә күңеленә "орлоҡ" сәсеп китә. Унан инде, башҡаса һис бер кемгә лә был хаҡта өндәшмәй генә үҙенең "боҙоҡлоғононоң" нәтижәһен көтә башлай. Ошоғаса ҡатынына "ҡылтайып" йөрөгән Ғәлиәхмәт бер кис, нәҡ егет сағындағы һымаҡ, эштән сәскә гөлләмәһе тотоп ҡайтып инә. Ә өйҙә уны тәмле итеп бешерелгән билмән, йомшаҡ итеп йәйелгән йоҡлар урын көтөп тора... Күпмелер ваҡыт бер-береһенә башлап һүҙ әйтергә "ғорурлыҡтары рөхсәт итмәгән", шул уҡ ваҡытта выждандары ғазапланып көн күргән был пар бынан ары күңелдәре бушанып, тыштан әйтешмәһәләр ҙә, эстән генә бер-береһен ғәфү итә...

Алдау тыйылмаған икенсе осраҡ - үҙеңдең хәләл ефетеңә, бәғзе мәлдәрҙә ысынбарлыҡҡа әллә ни тап килеп етеңкерәмәгән яҡшы һүҙҙәр, урыҫса әйткәндә, комплименттар әйтеү. Быныһына инде бер ниндәй миҫал килтермәгәндә лә була. Быны беҙ, айырыуса ир-аттар, һәр кемебеҙ ифрат та яҡшы беләбеҙ. Һуғыш мәлендә дошмандарыңды алдау - Бәйғәмбәр рөхсәт иткән өсөнсө осраҡ. Әммә был мәҡәләлә һүҙ барған тема быға ҡағылышлы түгел...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*✓ Мөнәсәбәттәрҙә лидерлыҡҡа ынтылыу шәхестәрҙең формалашып етмәүен генә күрһәтә. Ысын лидерлыҡ - ул эргәңдәге икенсеңде тапамау, иҙмәү, көслө булған өсөн түгел, ә аҡыллы булған өсөн алда барыу.*

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҒАИЛӘНЕҢ РУХИ

## ир - ир урынында,

**Ғаилә беҙҙең халыҡта иң юғары изгелектәр кимәленә күтәрелгән төшөнсә ине. "Ине" тибеҙ, сөнки бөгөн, нисектер, ғаилә фәлсәфәһе үҙгәрә төштө. Донъя кимәленән алып ҡарағанда был күренеш үтә лә күҙгә салына. Мәҫәлән, Японияла хәҙер ғаилә ҡорорға теләүселәр һаны шул тиклем аҙ, хатта был халыҡтың юҡҡа сығыуына килтереүсе иң ҡыҫҡа юл, тиелә. Һәм, белгестәр әйтеүенсә, был бәлә айырым милләттәрҙең генә проблемаһы түгел, ә Ер йөҙөнә килеүсе глобаль ҡурҡыныстарҙың береһе.**
**Ошо күренештәрҙе күҙ уңында тотоп, беҙ ғаилә психологы Әлмира ИСХАҠОВА менән бөгөнгө йәмғиәттә йәштәрҙең ғаилә ҡороуына тотҡарлыҡ иткән мәсьәләләрҙе асыҡлап китмәксебеҙ. Шул иҫәптән уларҙы хәл итеү, ыңғайға көйләү юлдарын да эҙләйәсәкбеҙ.**



**Әлмира Рамаҙан ҡыҙы, психологтар йәштәрҙең ваҡытында ғаилә ҡорорға теләмәүенең ниндәй сәбәптәрен аңлата бөгөн?**

- Һуңғы ун-ун биш йылда йәмғиәттә Ғаилә институты тигән төшөнсә бөтөнләй юҡҡа уҡ сыҡмаһа ла, уның нигеҙе ҡаҡшаны. Шул иҫәптән ғаилә ҡиммәттәре, уны ҡабул итеү, аңлау, күрһәтеү икенсерәк төҫ алды. Элек йәш кешегә, ғаилә - ул йәмғиәттең бер күҙәнәге, һин ғаиләле булғанда ғына ошо күҙәнәк була алаһың, тип аңлатһаҡ, хәҙер ғаилә улар өсөн иректе сикләү формаһын алды. Ҡамыт кейеү, ирекһеҙләү, елкәгә йөк алыу кеүегерәк күренештәрҙең аңлатмаһына әйләнде ғаилә тормошо. Быға тотош илдә барған кире күренештәр йоғонто яһаны ла. Мәҫәлән, элек ғаилә ҡороусы йәштәр ғаиләнең матди яғы өсөн артыҡ борсолманы, эшләгән парҙарға ҡалала фатир алыу, ауылда йорт һалыу артыҡ ҙур мәшәҡәт тыуҙырманы. Бөгөн иһә йәштәр өсөн иң ҡырҡыу һорау ошо. "Ипотека" тигән һүҙ генә лә уларҙы өркөтә ала һәм, үкенескә күрә, ошо һүҙгә бәрелеп, селпәрәмә килгән ғаилә караптары ла аҙ түгел.

Йәштәр араһында шулай уҡ үҙаллы булыу тигән бер төшөнсә лә бар хәҙер. "Үҙемде шәхес тип тойоу өсөн минең "шуным, шуным, шуным" булырға тейеш", тип ҡарай улар. "Шуным, шуным" тигән нәмәләр, улар, ғәҙәттә, машина, фатир, йорт, яҡшы эш булып сыға һәм быларҙы булдырыу ваҡыты йәш кешенең тиҫтәләгән йылдарын ала ла ҡуя.

Быуа ошо мәсьәлә, йәғни, дөрөҫ булмаған йүнәлеш - атаәсәнән килә. Беҙҙең быуынды, мәҫәлән, ниндәй девиз менән үҫтерҙеләр: башта - уҡыу, унан - эш, унан ғына ғаилә. "Кейәүгә сығып, бала табып өлгөрөрһөң, иң беренсе диплом кәрәк", тигәнде һалдылар ҡыҙҙар аңына, шулай бит? Быуа ошо ориентир яйлап үҙ көсөнә инде лә инде. Шул тәрбиәлә үҫкән беҙ ҙә балаларыбыҙға иң беренсе сиратта уҡыу һәм эш кәрәклеген төшөндөрҙөк. Ә ғаилә кәрәклеген аңлатырға онотттоҡ. Сөнки беҙ үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ ғаилә ҡиммәттәрен. Беҙ уны үҙенән-үҙе килеп сыға торған бер нәмә, йәғни, елгә осоп киткән орлоҡтан үҫкән ағас һымаҡ, тип кенә ҡарайбыҙ. Ә ул ағастың орлоғон һайлап, ерен ҡарап, тәрбиәләп, бәпләп үҫтергәндә күпкә көслөрәк һәм мәғрурыраҡ булырын күҙ уңынан ысҡындырабыҙ. Йәғни, баланы бәләкәйҙән ғаиләгә ылыҡтырырға, икенсе кешеләр менән мөнәсәбәт ҡора, тота белергә, ҡыҙ баланы - ҡатын, ир баланы ир роленә әҙерләргә онотабыҙ.

**Нисек кенә күрмәҫкә, иғтибар үҙәгенә алмаҫҡа тырышһаҡ та, ирекле никахта көн итеүселәр һаны артҡандан-арта. Хатта граждандар никахы тип тә әйтеп булмайҙыр быны. "Йәшәп ҡарайбыҙ", тиҙәр йәштәр, "Бер-берегеҙҙе һынап ҡарағыҙ", ти ололар. Кемдәрҙер никах та уҡытҡан була, әммә бындай ғаилә иштәре бер-береһе өсөн артыҡ яуаплылыҡ алмай. Ҡатын кеше балаға уҙмай, сөнки ишенә ышанмай. Егет кеше матди яҡты ҡайғыртмай, сөнки тағыла яҡшырағы килеп сығыр, тигән өмөтөн юғалтмаймы...**

- Әлеге принциптарҙың ҡаҡшауы бында. Кешеләр бер-береһен файҙалана. Ваҡытлыса файҙаланып тороу бит инде бындай мөнәсәбәттәр, асылда. Бында мөхәббәт тигән төшөнсәнең еҫе лә юҡ. Хатта хөрмәт итеү ҙә самалылыр. Балаларына "йәшәп ҡараһындар" тип ҡул һелтәгән ата-әсәнең моңһоҙлоғонон сиге юҡ, тимәк. Берәү менән йәшәп ҡарар, икенсе менән йәшәп ҡарар, саҡ ҡына мөнәсәбәттәр ҡатмарлашыу менән еңелерәк булған өсөнсөһөн табыр. Асылда, донъялар нисек кенә заманса булып, яңы ҡараштар, яңы мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килгәндә лә, ике кешенең - ир менән ҡатындың аралашыуы донъя барлыҡҡа килгәндән алып бер нигеҙгә - яратыуға һәм ихтирамға ҡорола бит. Яратҡан һәм хөрмәт иткән ҡыҙын ир-егет "йәшәп ҡарап" кәмһетмәйәсәк, ул уны тиҙерәк үҙенеке итергә, үҙ территорияһында тоторға, орлоғо менән аталандырырға - балаларына әсәй итә һалырға ынтыласаҡ. Был тәбиғәт законын әлегәсә үҙгәртә алған йәмғиәт юҡ.

Интернет төркөмөндә бер башҡорт ҡыҙы яҙғанды уҡып ултырам. Уҡыуҙы тамамлаған көндө егетем "бергә йәшәйек" тигән тәҡдим яһаны, тип, атҡа менгәндәй ҡыуана. Өйләнергә теләге бар егеткә диплом да, уҡыу ҙа мөһим түгеллекте аңламай. Йәғни, үҙенең ҡыҙ бала булараҡ дәрәжәһен баһалай белмәй, уға быны өйрәтмәгәндәр. Дипломлы белгес булғас, хаҡым, баһам күтәрелә төшә икән, тип ышана. Ысынында уны ҡатын-ҡыҙ итеп баһаламаған егет, әйтерһең, һөнәр эйәһе итеп баһалай. Эй, ҡыҙҙар-ҡыҙҙар...

Йәштәр тормошондағы барлыҡ хаталар ололарҙың, атаәсәнең моңһоҙ ризалығы арҡаһында башҡарыла. Ғаиләлә ниндәйҙер тәртиптәр талапсан ҡуйылған, ниндәйҙер тыйыуҙар һәм сикләүҙәр бар икән, бала быға өйрәнә һәм барыбер ошо юҫыҡты тота. Тәртип юҡ икән, ул нисек килеп сыға, шулай йәшәй...

Мин, мәҫәлән, ике ҡыҙ баланың әсәһе булараҡ, балаларымдың кемдеңдер берҙән-бер һәм мәңгелек йәре булыуын теләйем. Кейәү буласаҡ кешенең мотлаҡ килеп фатиха һорауын, ата-баба йолаһы буйынса йәрәшеүен, никахлашыуын, ҡыҙым өсөн яуаплылыҡ алыуын талап итәсәкмен. Һәм һәр әсәнең дә шулай итерен теләр инем. Ул осраҡта "йәшәп ҡараусылар" ҙа аҙыраҡ булыр ине.

**Бөгөнгө ғаиләләр бик заманса йәшәй, ир менән ҡатын араһында артыҡ айырма юҡ, муйын-баш төшөнсәһе лә актуаль түгел хәҙер. Ир ҙә, ҡатын да руль артында, икеһе лә күпләп аҡса эшләй ала, декретта ла ирҙәр ултырырға мөмкин, күп осраҡта ғаиләнең туйындырыусыһы ҡатын-ҡыҙ булып сыға һ.б. Бөтөн был замансалыҡ, үҙгәрештәр башҡорт ғаиләләрен дә урап үтмәй, шулай бит? Һәм ошолар беҙҙең ғаиләләрҙең милли һыҙаттарын, ғаилә ҡиммәттәрен бөтөнләй юйып бөтөрмәҫ микән, нисек уйлайһығыҙ?**

- Заман үҙе үҙгәрмәй ул, уны беҙ үҙебеҙ үҙгәртәбеҙ. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ ролен - ир, ир-егет ролен ҡатын-ҡыҙ башҡара алмай. Башҡарған хәлдә лә - сараһыҙҙан. Шунан бер ҡатын да "Ирҙәр эшен эшләп тик йөрөйөм, шундай рәхәт", тимәй бит. Күп осраҡта улар "шундай арыным" тип зарлана. Дөрөҫ ғаиләлә, йәғни ир - ир урынында, ҡатын ҡатын урынында булғанда, ғаиләнең рухы сәләмәт була. Ҡатындың нервылары тыныс, ул ҡуҙғыпҡаңғырып бармай, үҙен ҡарарға ваҡыт таба. Ҡатын ир кеше үҙ ролен дөрөҫ башҡарған ғаиләлә генә тыныс була ала. Үҙен кәрәкһеҙ, ҡәҙерһеҙ йәки артыҡ әрһеҙләнгән итеп тойған ҡатын-ҡыҙ бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә лә невротикка әйләнә ала. Ә был осраҡта инде тотош ғаилә бәхетһеҙгә әүерелә.

*Мин, мәҫәлән, ике ҡыҙ баланың әсәһе булараҡ, балаларымдың кемдеңдер берҙән-бер һәм мәңгелек йәре булыуын теләйем. Кейәү буласаҡ кешенең мотлаҡ килеп фатиха һорауын, ата-баба йолаһы буйынса йәрәшеүен, никахлашыуын, ҡыҙым өсөн яуаплылыҡ алыуын талап итәсәкмен. Һәм һәр әсәнең дә шулай итерен теләр инем. Ул осраҡта "йәшәп ҡараусылар" ҙа аҙыраҡ булыр ине.*

Һәр кешелә ҡан хәтере тигән төшөнсә бар. Нисек кенә заманса булып ҡыланһаҡ та, беҙ үҙебеҙҙәге ҡан хәтерен юйып ташлай алмайбыҙ. Бигерәк тә ир-егеттәр. Улар ҡатын-ҡыҙға баш булырға һәм үҙ иректәренә буйһондорорға тейеш икәнлекте белә, иҫләй. Ғаиләһендә шундай халәткә өлгәшә алғандары эске гармонияға, йәғни бәхеткә килеп етә лә. Ҡатынының күңелен арбай алмаған ир-егеттәр ғүмер буйы эске көрәш менән йәшәргә һәм шул көрәш барышында яйлап-яйлап ҡыйралыуға мохтаж. Бындай көрәштән улар үҫмәй, көсәймәй, киреһенсә, мәхлүкләнә генә бара. Ошоларҙы иҫәптә тотоп, ир менән ҡатын үҙ-ара мөнәсәбәттәренең психологияһын да өйрәнһен, төшөнһөн ине. Бер-береңде физик һәм финанс хеҙмәтләндереүҙән тыш, энергетик туҡландырыу ҙа барлығын онотмаһындар. Мөнәсәбәттәрҙә лидерлыҡҡа ынтылыу шәхестәрҙең формалашып етмәүен генә күрһәтә. Ысын лидерлыҡ - ул эргәңдәге икенсеңде тапамау, иҙмәү, көслө булған өсөн түгел, ә аҡыллы булған өсөн алда барыу.

**Яңғыҙ ҡатын-ҡыҙҙар, яңғыҙ бала тәрбиәләгәндәр бихисап хәҙер. "Эй, ул ирҙәр!" тип ҡул һелтәү бар. Ә бит беҙ тарихтан башҡорт ир-егеттәрен юғары дәрәжәле, батыр, көслө, яуаплы итеп беләбеҙ. Быуаттарҙың ҡайһы осорондалыр шулай үҙгәрҙеме ир-егеттәребеҙ, йәки ҡасан килеп инде ул ҡатын-ҡыҙ теленә ирҙәргә ҡарап "э-эй" тип ҡул һелтәү?**

- Иң беренсе беҙ ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр бер үк зат түгел икәнлегебеҙҙе онотмайыҡ. Беҙ икебеҙ ике төрлө енес һәм бер-беребеҙҙән бик ныҡ айырылабыҙ. Беҙ бер төрлө уйламайбыҙ, бер төрлө фекерләмәйбеҙ, күп нәмәгә башлыса ике төрлө ҡараштабыҙ. Беҙҙең тән дә, көс тә, аҡыл да, хистәр ҙә ҡырҡа айырыла. Шул иҫәптән күп осраҡта ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙан бер нәмә лә талап итмәй. Ә ҡатындарҙың талабының иге-сиге юҡ.

Ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте менән әсәй булыуға, тәнендә икенсе

✓ ***Парҙарҙың хатаһы - бер-береһен тәрбиәләү. Юҡ, бер-береңде түгел, ә үҙеңде тәрбиәләргә кәрәк. Һин ошондай эшкә, үҫешкә, ҡатмарлы үҙгәрештәргә әҙерме - ҡор ғаилә, юҡ икән - уйлан, эҙлән, аҡыл йый.***

# СӘЛӘМӘТЛЕГЕНӘ...

## ҡатын ҡатын урынында булғанда өлгәшелә

йәнде үҫтереп сығарып, унын рухын формалаштырыуғаса тәрбиәләүгә көйләнгән. Быны ул үҙ аҡылы менән уйлап табып башҡармай. Был уға һалынған. Шуға ла ул бер нисек тә балаһы менән бәйләнешен өҙә алмай, ниндәй хәлдә лә уны баға, ҡарай. Ә ирҙәргә был аң һалынмаған. Улар баланы ҡатын-ҡыҙ аша ғына ҡабул итә. Ҡатын был икәүҙе үҙе аша яраттыра һәм өйрәтә икән - була, ҡатын уларҙы айыра икән - улар бер-береһен оноторға ла мөмкин.

Ир һәм ҡатын айырмалыҡтарын үрҙә башлағайныҡ инде, шуны дауам итәйек. Ир-егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙан тағы ла бер айырмалығы - һүҙ. Ир халҡына бөтә нәмәне лә: теләктәрҙе, хыялды, талапты, шарттарҙы тел менән әйтергә кәрәк. Улар һүҙ менән программалана. Тыныс һәм асыҡ итеп уға теләктәренде еткерә белергә кәрәк. Ул үҙенән нимә теләгәндәрен һәм көткәндәрен аныҡ белһен. Ирҙәр психикаһы ҡапылғара үҙгәреүгә, бер пландан икенсегә ырғыуға, ваҡ-төйәк хистәргә тарҡалыуға яраҡлашмаған. Уларға ҙур план, маҡсат һәм илһамландырып тороусы кәрәк. Ә ҡатын ғаиләлә шундуҡ әсәй роленә инә лә китә. Ул баланы ла, ирҙе лә туйындырып, өҫтәрен ҡарап, тәрбиәләп торорға тейешмен, тип кенә уйлай. Тәрбиәләйем, тип, уларҙы сикләй, туҡтауһыҙ игәй, уларҙың ҡарашын үҙенсә үҙгәртергә тырыша, оҡшамаһа, үпкәләй, киреләнә башлай. Үкенескә күрә, ҡатын балаһын да, ирен дә нисек бар шулай итеп ҡабул итә белмәй - был унын бәләһе лә.

Бөгөн баланы яңғыҙ тәрбиәләүҙән бер нисек тә ҡасып булмай, әммә әсә ҡулында үҫкән ир баланың эске донъяһы ҡатын-ҡыҙҙыҡына оҡшаш була. Ул спорт менән дә шөғөлләнергә мөмкин, башҡа төрлө лә үҫешергә мөмкин, әммә киләсәктә ҡатын-ҡыҙҙар уға тартылмаясаҡ. Хатта өйләнеп йәшәп киткән хәлдә лә унын янындағы ҡатын үҙен тулыһынса бәхетле итеп тоймаясаҡ. Ул үҙен икенсе ҡатын менән йәшәгән кеүек хис итәсәк һәм яйлап был икәү араһында бер-береһен баҫырға тырышыу башланасаҡ. Был донъя психологтарының шундай күңелһеҙ күҙәтеүе.

Был мәсьәләлә мин ике енес, енестәр мөнәсәбәтенә ҡағылышлы белем эстәү яҡлымын. Ҡатын-ҡыҙға ир-егеттән нимәлер талап итер, уны кәмһетә башлар алдынан, бәлки, уларҙың физиологияһын, психологияһын өйрәнеү зарурҙыр? Ҡатын-ҡыҙҙың "тейеш"е бик күбәйеп китте. Ә бит ул тейештәр бер ерҙә лә яҙылмаған, улар ҡанун түгел. Уларҙы шул уҡ ҡатын-ҡыҙ үҙе уйлап сығарған. Ир-егеткә лә шулай уҡ. Малайҙарға әсәй булған ҡатындар бит, мәҫәлән, улдарының ғаиләһендә хөрмәтле ир булып йәшәүен теләйәсәк. Үҙҙәре лә кемгәлер арҡа терәп, һөйкәлеп йәшәүгә бик риза булырҙар ине. Ирҙәр ҙә ҡатын-ҡыҙ менән идара итеүҙе барыһынан да өҫтөн ҡуясаҡ. Шунлыҡтан, аңлай беләйек бер-беребеҙҙе. Әрләгәндән йәки кәмһеткәндән генә берәү ҙә үҙгәрмәйәсәк. Ә аңлап эш иткәндә, ыңғайға өмөт бар.

**Иртә никахҡа инеү борон ғына түгел, хәҙер ҙә бар. Башҡортостанда никах йәше етмәйенсә ғаилә ҡорғандарҙың һаны артмай, әммә был һандар борсомай ҙа ҡалмай. 2015-2017 йылдарҙа 18 йәше тулмағандар араһында 1377 кеше никахҡа ингән. Былтыр 25 мең никах таныҡлығы алыусының 208-е - үҫмерлек осоронан яңы ғына сығыусы балалар.**

- Ғаилә психологияһы күрһәтеүенсә, никахҡа ингәнсе мотлаҡ психологик әҙерлек кәрәк. Башлы-күҙле булырға ашыҡҡан балиғ булмағандарҙың күбеһе ата-әсәһе менән уртаҡ тел таба алмай, үҙаллы булырға ынтылып, тиҙерәк атай йортонан сығып китергә тырыша. Быпдай ғаилә ҡороуҙарҙың сәбәпсеһе булып, ғәҙәттә, ауырға ҡалыу тора. Тормош тәжрибәһе булмау, икенсе яртың, сабыйың алдында бурыстарыңды аңлап етмәү, мөнәсәбәттәр көрсөгөн еңеп сыға алмау, аҡса юҡлығы, бала тыуғас, иректең сикләнеүе - былаҙрың барыһы ла йәш парҙарҙың бер-береһенә ҡарата булған хистәренә кире йоғонто яһай, тормош мәшәҡәттәре баҫып, хистәр һүнә. Айырылыуға ла улар еңел-елпе ҡарай, ғаиләнең емерелеүен дә фажиғә тип ҡабул итмәйҙәр. Уларҙың балаларын ата-әсәләре ҡарарға мәжбүр. Шуға ла иң тәүҙә үҫмер тәрбиәләнгән ғаиләлә тыныслыҡ, ышаныс яйға һалынырға тейеш. Һәр йәш ғаилә, теләйме, теләмәйме, үҙенең ғаиләһе миҫалында ояһын ҡора бит. Балиғ булмаған йәштә характер формалашып етмәй, яуаплылыҡ тойғоһо бөтөнләй булмай. Йәш парҙар конфликтты дөрөҫ, аҡыллы итеп хәл итеү юлдарын белмәй. Бер аҙ күҙ-баш алғас, танауҙарына еҫ кергәс, тип әйтәйек, улар икенсе кешеләрҙе һайлап та ҡуя.

Бөгөн "борон йәшләй өйләндергәндәр - йәшәгәндәр" тигән фекер менән эш итеп булмай. Йәштәр үтә лә үҙаллы хәҙер, хатта артыҡ үҙаллы, тип әйтергә кәрәк. Ата-әсә балаһы менән идара итеү хоҡуғын күптән юғалтҡан. Иртә никахҡа инеү ҙә йәки никахһыҙ булып ологайыу ҙа, шул уҡ никахһыҙ йәшәп ятыуҙар ҙаололарҙың йәш быуынға битарафлығынан килә.

**Ғаилә психологияһы бит шулай ҙа донъя кимәленән алып эш итә. Ә бына, мәҫәлән, башҡорт ғаиләһе менән эшләү, уларҙың проблемаларын анализлау өсөн айырым әҙәбиәт йәки айырым белем, мәғлүмәттәр кәрәкме?**

- Йыш ҡына бала саҡта уҡыған "Кәмһетелгәндәр", "Ырғыҙ", "Бөйрәкәй" кеүек беҙҙең халыҡтың менталитетын сағылдырған әҫәрҙәрҙе ҡабаттан уҡып алырға яратам. Бына шул әҫәрҙәрҙә башҡорт ҡатынының ир-егет менән тиңләшеү осоро бик әсендергес итеп күрһәтелә. Нисек ҡатын-ҡыҙҙар яулыҡ һала, сәс ҡырҡа, йыйылыштарҙа тороп хәбәр һөйләй, етәкселек вазифаларына һайлана. "Нигә кәрәк булды һеҙгә был? Ни өсөн киләсәк ҡатын-ҡыҙҙарын уйламайһығыҙ?" тигән һорау туҡтауһыҙ башта өйөрөлә һәм бөгөнгөгә ҡарап, ирониялы йылмайырға ғына ҡала.

Башҡорт ғаиләләре менән эшләгәндә мин, әлбиттә, милли характер һыҙаттарын күҙ уңында тотам. Кеше нисек кенә замансалашҡан булһа ла, унда милли үҙаң һаҡлана, тип әйттек бит үрҙә. Ниндәйҙер һүҙҙәр, миҫалдар менән унда ошо аңдың бер өлөшөн генә булһа ла уятырға мөмкин. Ә инде күптәр үҙҙәре лә бәргеләнеп-һуҡҡыланып йөрөп, төрлө юлдарҙы самалап ҡарап, барыбер ҙә ошо ыҙанға төшә.

Башҡорт ғаиләләрендәге проблемаларҙың береһе - баҫылғанлыҡ. Теләктәрҙе, хистәрҙе әйтеп бирә белмәү, эске донъяны йәшереү. Бер-береңменән асыҡтан-асыҡ һөйләшә белмәү. Иркәлек, наҙлылыҡ етмәй тағы ла. Комплекстарҙан арына алмай күптәр. Ҡатын-ҡыҙ үҙ холҡондағы йомшаҡлыҡты, ир-егет ҡатылыҡты сығара алмай ғүмерен үткәрә. Бер-береһенән үҙенә кәрәк сифатты тапмау, көтөп ала алмау яйлап ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо уята. Был тойғо ҡар өйөмө кеүек үҫә-ҙурая барып, бәхетһеҙлеккә килтерә.

Ир-егеттәрҙең пассивлығы һәм ҡатын-ҡыҙҙың активлығы ул бер беҙҙең халыҡҡа ғына хас сифат түгел. Шунлыҡтан, үҙебеҙҙекеләргә ундай тамғаны тағырға ашыҡмай торайыҡ. Әлеге мәлдә әүҙемлегебеҙҙән үҙебеҙ ыҙа күрәбеҙ бит, ә ир халҡы түгел. Тимәк, беҙ үҙебеҙгә генә зыян итәбеҙ. Бәлки, ошо урында туҡтап ҡына уйланырға кәрәктер һәр беребеҙгә: хаҡлы булырға теләйбеҙме, әллә бәхетлеме?

**Бер тапҡыр ауыҙы бешкәс, икенсеһен өрөп ҡабырға ҡурҡып йәшәүселәр ҙә байтаҡ.**

**Бына ошо ҡаршылыҡты үтә алмаусыларға иң ябай кәңәштәр ниндәй?**

- Иң беренсе, үҙ өҫтөңдә эшлә. Әгәр һине беренсе никахтағы мөнәсәбәттәр ҡәнәғәтләндермәгән икән, бында ул кеше генә ғәйепле тигән һүҙ түгел. Үҙеңдә ниндәй хаталар булған, шуларҙы анализла. Үкенескә күрә, кеше үҙен һәм үҙененең ҡылыҡтарын ситтән тикшерә алмай. Психолог ярҙамынан баш тартырға ярамай, ул һиңә туғандарың йәки дуҫтарың кеүек, бер яҡлы кәңәш бирмәйәсәк, ул һинең тормошоңдо төрлө яҡлап, киң даирәлә күҙәтеп сығасаҡ һәм һығымталарҙы һеҙ бергә яһаясаҡһығыҙ.

Кеше үҙе үҙгәрмәй тороп, уға башҡаларҙың ҡарашы ла үҙгәрмәй. Һин үҙеңде нисек һәм ниндәй кимәлгә ҡуяһың, эргәңдәге кеше лә шулай баһалай. Икенсе яҡтан, айырылышыу - ул кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәт ҡора белмәүе. Йәки күп осраҡта ҡорорға теләмәүе. Ә мөнәсәбәттәр өҫтөндә ғүмер буйы эшләргә, хеҙмәт итергә кәрәк. Ниндәйҙер бер сәбәптәр арҡаһында ике яҡ та был мөнәсәбәттәр өҫтөндә хеҙмәт итергә теләмәй, ҡул һелтәй ҙә - ғаилә тарҡала. Ә бит икенсе кеше менән дә шундай уҡ хеҙмәт талап ителәсәк. Унда ла барыһы ла ябай һәм еңел генә булмаясаҡ.

Парҙарҙың хатаһы - бер-береһен тәрбиәләү. Юҡ, бер-берењде түгел, ә үҙеңде тәрбиәләргә кәрәк. Һин ошондай эшкә, үҫешкә, ҡатмарлы үҙгәрештәргә әҙерме - ҡор ғаилә, юҡ икән - уйлан, эҙлән, аҡыл йый.

Яңғыҙлыҡта комфорт тапҡан кешеләр ҙә етерлек. Былар, ғәҙәттә, артыҡ көслө, хаким, тәрән холоҡлолар. Улар төрлө эмоциональ мәлдәрен дә, ауырлыҡтарҙы, һынауҙарҙы үҙаллы күтәреп, үткәреп өйрәнгәндәр. Кемдәндер ярҙам, рухи терәк эҙләмәйҙәр. Был кешеләр әҙәм йәненең Аллаһы тарафынан тулы һәм камил итеп яратылыуының бер өлгөләре ул. Асылда, йән ул берәүҙең дә яртыһы түгел, ә үҙе айырым һәм тулайым. Әммә шул уҡ ваҡытта Хоҙай беҙҙе ишле булып, йәнебеҙҙе бер-беребеҙгә баҫып йәшәргә лә өйрәткән. Сабырлыҡ, түҙемлелек, аяулылыҡ, изгелек, яуаплылыҡ кеүек иң матур сифаттар ҙа тап ғаиләлә тәрбиәләнә бит. Ишең менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡора белгәндә генә ғаилә ике йәндең ожмахына әйләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һәр йәш кешегә ғаилә ҡорорға кәрәк", тип тамамланы һүҙен ғаилә психологы. Кеше асылының күп яҡтары ғаиләлә төҫ ала һәм ул үҙ асылының күп яҡтарын ғаиләлә аңлай. Хатта ул ғаилә уңышһыҙ булған хәлдә лә.**

**Мәҡәләне уҡып сыҡҡан һәм ғаилә психологына һорауҙары булған гәзит уҡыусыларҙан хаттар көтөп ҡалабыҙ. Һеҙҙең һорауҙарығыҙға тулы һәм профессиональ яуаптар буласаҡ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ҠЫҘЫҠ БИТ!

# ТУЙҘАРҘЫҢ ДА ТӨРЛӨҺӨ

• **Былтыр Башҡортостанда 1775 пар алтын туйҙарын ҡаршы алған, 699 пар 60 йыл бергә ғүмер итеүен туйлаған (гәүһәр туй). Туғыҙ ғаилә, аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын (хозур туйҙы) билдәләгән.** Йыл башынан ЗАГС органдарында 50-75 йыл бергә ғүмер иткән ғаиләләрҙе ҡотлау дауам итә. Атап әйткәндә, Ғафури районынан Хисмәтуллиндар ғаиләһе өсөн 2018 йыл - Ғаилә йылы - иҫтәлекле датанан башланып китте. Уларҙың никахын теркәгәндән һуң 70 йыл үткән. Тәлғәт Абдулла улы инженер-механик булып эшләгән, быйыл уға 90 йәш тула. Рәйхана Бәхтийәр ҡыҙы быяла заводында тир түккән, уға 88 йәш. Улар бергәләп биш бала үҫтергән, 10 ейән-ейәнсәргә һәм 12 бүлә-бүләсәргә ҡыуанып ултыра. Юбилярҙарға ғәҙәттәгесә республика Башлығы исеменән иҫтәлекле бүләк һәм ҡотлау открыткаһы тапшыралар.

• **Башҡортостандың ЗАГС органдарында былтыр 27 931 пар өйләнгән. Унан алдағы 2016 йылда республикала күпкә кәмерәк - 25 323 ғаилә барлыҡҡа килгән.** Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында 25-34 йәш әүҙем өйләнеү һәм кейәүгә сығыу осоро булып иҫәпләнә. Әммә ғәҙәттәгенән айырмалы осраҡтар ҙа бар. Атап әйткәндә, мөнәсәбәттәрен теркәргә ҡарар иткән иң оло пар - Әбйәлил районынан 93 йәшлек кейәү менән 78 йәшлек кәләш. Былтыр 15 568 ғаилә тарҡалған. 2016 йылда 78-гә күберәк - 15 646 ғаилә айырылышҡан. Айырылышыу осраҡтары йышыраҡ тәүге биш йыл тормош көткән ғаиләләр араһында күҙәтелә. Иң оло айырылышҡандарҙың иренә 91, ҡатынына 82 йәш.

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

**Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм ғаилә эсендә һәр бер кешенең хаҡы булырға тейешлеге һәм бер кешенең хаҡы икенсеһенә ҡарағанда ҙурыраҡ булырға тейешлеге тураһында түбәндәге хәҙистә белдерә: "Белеп тороғоҙ: ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөндәге хаҡтарҙың иң ҙурыһы - ир-ат хаҡы, ә инде ир һәм ҡатындарығыҙ өҫтөндә булған хаҡтарҙың иң ҙурыһы - әсә хаҡы".**



# БАЛАЛАР БЕҘҘЕ ҠАБАТЛАЙ

Тимәк, бергә ғүмер кисергәндә ҡатындары ирҙәренә буйһонорға тейеш була. Халыҡ теле менән ябайыраҡ итеп әйтһәк, был ошолайыраҡ яңғырар: "Ир - баш, ҡатын - муйын". Әммә шуны иҫтә тотоу мөһим: бер генә "баштың" да "муйынынан", үҙенең терәгенән һәм таянысынан башҡа хәрәкәт итә алғаны юҡ. Шуға күрә, ирҙәребеҙҙең ысын мәғнәһендә баш булыуы, ғаилә тураһында ҡайғыртыуы өсөн күп осраҡта ҡатындарыбыҙҙың кәңәш, өгөт-нәсихәт менән ярҙам итеүе кәрәк була. Динебеҙҙә иң ҙур ҡиммәт - әсәйҙәр хаҡы. Әсәйҙәр үҙҙәренең балаларын, улдарын һәм ҡыҙҙарын аҙыҡ менән тәьмин итеп, тәрбиә ҡылып, төндәрҙе уяу үткәреп, ризыҡтарын ауыҙҙарынан өҙөп ҡаптырып, ғүмерҙәрен фиҙа ҡыла. Иң ҙур хөрмәткә лайыҡ булған заттар - әсәләр. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм: **"Ожмах әсәләребеҙҙең табан аҫтарында"**, - тигән. Тимәк, беҙ әсәләребеҙгә ихтирам менән йәннәткә юлыбыҙҙы ла еңеләйтәбеҙ.

Ғаилә эсендә өлкәндәрҙең генә түгел, ә, бәлки, йәштәрҙең, кескенәләрҙең дә хаҡтары булырға тейеш. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә: **"Шундай кешеләр беҙҙән, мөьмин-мосолмандарҙан түгелдер: кем дә кем сабыйҙарҙы, йәштәрҙе ихтирам итмәһә, уларға мәрхәмәт, шәфҡәт күрһәтмәһә. Улай ғына түгел, өлкәндәрҙең, ҙурҙарҙың, атай-әсәйҙәрҙең хаҡтарын белмәһә"**, - ти.

Өлкәндәрҙең генә түгел, сабыйҙарҙың ла хаҡтары булырға тейеш. Өлкәндәрҙең хаҡтары уларға хөрмәт итеү менән бәйле булһа, йәштәрҙекене нисек итеп билдәләнә һуң? Уларға тейешле тәрбиә биреп, киләсәккә матур орлоҡтар сәсеп ҡалдырып, беҙ йәштәрҙең хаҡын үтәйбеҙ. Япон риүәйәттәренә күҙ һалһаҡ, уларҙа беҙҙең өсөн сәйер булған бер күренеш хөкөм һөргәнен белербеҙ: балалары зәғифләнгән ҡарттарҙы ҡәҙерләп, хөрмәтләп тәрбиә ҡылаһы урынға, уларҙы арбаға йәиһә санаға һалып, ауыл ситендәге тауға алып барып, тауҙан түбән тәгәрәтеп ебәргәндәр. Бер кеше шулай үҙенең улын эйәртеп, ҡартайған атаһын арбаға һалып, ауыл ситенә йүнәлә. Маҡсаттары билдәле инде - атаһын әжәленә әҙерләү. Меҫкен ҡартты тәгәрәтеп ебәргәс, атай үҙенең улына мөрәжәғәт итеп әйтә: "Улым, олатайыңды ташланыҡ, арбаны ла артынан ташлайыҡ". Малай: "Юҡ, атайым, арбаның кәрәге тейер әле, һинең дә ҡартаяһы көнөң бар бит", - тип яуап бирә...

Тимәк, балаларыбыҙ беҙҙе, өлкәндәрҙе ҡабатлай һәр ғәмәлдә. Шуға ла һүҙ менән генә сикләнмәйенсә, балаларыбыҙға ғәмәлдәребеҙ менән күрһәтеү кәрәк тәрбиә һабаҡтарын. **Аллаһы Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ғаилә әһелдәренә, өлкәндәргә һәм йәштәребеҙгә, ирҙәргә һәм ҡатындарға матур мөнәсәбәт һаҡлаған хәлдә, әҙәп-әхлаҡ ҡанундары нигеҙендә йәшәй, шул ғәмәлдәребеҙ нәтижәһендә Аллаһтың рәхмәтенә ирешә алыуыбыҙҙы насип үә мөйәссәр әйләһен.**

**Илшат ХАФИЗОВ,**
**Ишембай районы имам-мөхтәсибе.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# ҠУЛДАН ЭШ КИЛӘ

**Күптән түгел ҡалабыҙҙа төпләнеп, үҙҙәренең тормошо һәм эше менән ихтирам яулап та өлгөргән күп балалы Айгөл һәм Марсель Ямғуровтарҙың ғаиләһе менән танышыу бәхете тейҙе.**



Шундай алсаҡ йәштәрҙе яҙмыш ата-әсәләренең тыуған төйәгендә - Ғафури районының Еҙем-Ҡаран ауылында осраштыра.

"Мин үҙем Салауат ҡалаһынан, Марсель - Өфө егете, - ти Айгөл. - Ауылға өләсәй-олатай янына ҡайтҡанда таныштыҡ..."

Оҙаҡ ҡына осрашып йөрөгәндән һуң, ғаилә ҡорорға ҡарар итә улар. Йәштәрҙең бәхетен тулыландырып, Илина исемле ҡыҙҙары, һуңынан улдары Имиль донъяға килә. Унан инде ғаилә өсөнсөгә атай-әсәй булыу бәхетенә өлгәшә - төпсөктәре Иҙелде алып ҡайталар.

Икенсе бала тыуғас бирелгән Әсәлек капиталы йәштәргә ҙур ярҙам була. Был уларға ипотекаға алған өс бүлмәле фатирҙары өсөн тулыһынса түләп бөтөү мөмкинлеге бирә. Өйҙөң һәр мөйөшө Айгөлдөң ҡул эштәре менән биҙәлгән. Бала саҡта сәнғәт мәктәбендә рәсем һәм вокал буйынса алған белеме уға тормошта ярҙам итә: полимер балсыҡтан ҡурсаҡтар яһай, уйынсыҡтар һәм кейемдәр бәйләй.

Мин килгәндә Айгөл балсыҡтан быйылғы йыл хужаһын эшләй ине. Эт тулыһынса эшләнеп бөткән, уға тик кейем генә тегергә ҡалған. Ҡул эштәренә оҫта хужабикә күптәнге хыялы менән дә бүлеште. Ул киләсәктә "Урал батыр" эпосын сәхнәләштерергә уйлай. Әлеге көндә ҡурсаҡтарҙы эшләү, уларға кейемдәр тегеү менән мәшғүл. Оҫталыҡ нәҫелдән-нәҫелгә күсә, тиҙәр бит. Айгөл әйтеүенсә, уның атаһы - балта оҫтаһы. Ул ағастан семәрләп йыһаздар эшләй. Хәҙер 9 йәшлек Илинаға ла олатаһының, әсәһенең ҡыҙыҡһыныуы, дөрөҫөрәге, таланты "йоҡҡан". Ул да сәнғәт мәктәбендә белем ала, ҡул эштәрен үҙе теләп өйрәнә.

Айгөл туҡтауһыҙ камиллаша: машина йөрөтөргә лә өйрәнгән, сәхнәлә лә йырлай, кәрәк икән, таныштары, туғандары өсөн туйҙар һәм юбилей кисәләре үткәрә. Ул 53-сө балалар баҡсаһында эшләй, әлегә төпсөк улы менән декрет ялында ултыра. Беренсе класта уҡыған Имиль каратэ түңәрәгендә шөғөлләнә, спорт сараларында әүҙем ҡатнаша. Ғаилә башлығы Марсель Фаил улы Төҙөлөш материалдары һәм ҡорамалдары заводында иретеп йәбештереүсе булып хеҙмәт итә. Эшендә тырыш, яуаплы хеҙмәткәр, өйөндә ярҙамсыл хужа һәм ятраҡан атай ул.

Ямғуровтар әйтеүенсә, улар балаларын үҙ өлгөһөндә тәрбиәләй. Уларҙа "Был ҡатын-ҡыҙ, был ираттың эше", тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Йәш ғаилә бар эште лә берҙәм башҡарып, бергә матур итеп ял да итә белә. Һәр ял көнөндә, бер аҙна ла ҡалдырмай, ғаилә менән һырғалаҡҡа, саңғы йә тау шыуырға юлланалар. Йәйен инде үҙҙәренең баҡсаларында, йә матур тәбиғәтле Еҙем-Ҡаран ауылында үткәрәләр. "Беҙҙең йәшәү йәме - балаларҙа", - ти Айгөл менән Марсель. Уларҙың шатланышып, йүгерешеп йөрөгән балалары, ысынлап та, был йортҡа йылылыҡ һәм йәм өҫтәй.

**Гөлфиә ҒӘЙНЕТДИНОВА.**
**Салауат ҡалаһы.**

ЙОЛА ТОТҠАН...

# АТАЙ-ӘСӘЙ ӨЛГӨҺӨ...

## иң төп тәрбиә алымы

**Ғаилә - йәмғиәттең бер өлөшө. Татыу, берҙәм, яҡшы ғаиләләр күп булған һайын, йәмғиәт тә ныҡлы нигеҙҙә була. Сөнки донъялағы бар сәйәсәт ғаиләләрҙән башлана, изгелек орлоҡтары ла, яуаплылыҡ орлоҡтары ла ғаиләлә сәселә.**

Күп йылдар татыулыҡта, яҡшы өлгө күрһәтеп йәшәгән 10 ғаиләне бергә йыйҙы был юлы Көйөргәҙе районы Айсыуаҡ ауылы ағинәйҙәре. Сара ауыл мәҙәниәт йортонда үтте. Бәхетле парҙарҙы зауыҡлы итеп биҙәлгән мәҙәниәт йортона тағы ла матурыраҡ итеп биҙәлгән еңел автобуста алып килделәр, икмәк-тоҙ, сәк-сәк менән ҡаршы алдылар. Ә һуңынан инде ҡулға-ҡул тотоношторо, ҙур алҡыштар аҫтында залға саҡырҙылар. Ысынлап та, баш эйеп, оло алҡыштар менән ҡаршыларлыҡ алтын парҙар йыйылғайны шул был көндө. Мәҫәлән, Флүрә һәм Марс Рәхмәтуллиндар, Лена һәм Хөрмәт Кирәевтар, Миңзада һәм Рәис Ҡаранаевтар, Рауза менән Сынтимер Ғөбәйҙуллиндар, Гөләйшә һәм Әхмәт Мәзитовтар, Венера һәм Хәмиҙулла Ноғомановтар, Гәүһәр һәм Шамарҙан Намаҙғоловтар билдәләне был көндә үҙҙәренең алтын туйҙарын. Уларҙы ағинәйҙәр, туғандары, ейән-ейәнсәрҙәре, бүлә-бүләсәләре ҡотланы, бүләктәрен тапшырҙы һәм изге теләктәрен еткерҙе. Донъяның яҡшыһын да, ауырлыҡтарын да башынан үткәргән, уттыһыуҙы бергә кискән, йәшәү тәжрибәһенә бай ғаиләләр сараға йыйылыусылар алдында үҙҙәренең тәүге тапҡыр осрашыуҙары, мөхәббәттә аңлашыуҙары, тормош юлының иң бәхетле мәлдәре һәм хәтерҙә һаҡланған иң татлы кисерештәре менән уртаҡлашты.

Байрамдың беренсе өлөшөнән һуң ағинәйҙәр үҙҙәренең ҡунаҡтарын тәмле һәм йәмле сәй өҫтәленә саҡырҙы. Тормош көтөү серҙәре, ғаилә ныҡлығы, балалар тәрбиәләү ысулдары тураһында һөйләшеүҙәр өҫтәл артында ла дауам итте. Байрамда ҡатнашҡан ғаилә ағзаларының иплелеге, тырышлығы, хәстәрлекле атай, әсәй сифаттары һәр кемде һоҡландырҙы. Ысынлап та, атай-әсәй өлгөһө тәрбиә мәсьәләһендәге иң төп алым шул инде ул.

**Тамара МАЛБАЕВА,**
**Көйөргәҙе районы "Ағинәй" йәмғиәт ойошмаһы етәксеһе.**

✓ *Барса оло кешегә был йәш килендең "олатай, инәй", тип өндәшеүҙәре оҡшап ҡалған икән. Сөнки ул районда "инәй" тип фәҡәт әсәләренә, ә "олатай", тип тик үҙенең ата-әсәһенең атаһына ғына өндәшәләр икән.*



ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

**Туған телендә һөйләшеп йөрөүсе милләттәштәребеҙ араһында ла йыш ҡына борондан килгән күп кенә һүҙҙәребеҙҙе белмәүселәр осрай. Бөгөнгө һүҙем - туған-ара йәиһә дуҫ-иштәрҙең һәм таныштарҙың бер-береһенә өндәшеү атамалары хаҡында. Гүзәл туған телебеҙҙең бихисап бай үҙенсәлектәренең береһе тип атап та булалыр уларҙы. Айырыуса ауыл ерендә көн иткән яҡташтарыбыҙ бындай атамаларҙы киң ҡулланғанға күрә, улар онотолмай, телдән-телгә күсә килә. Әммә һуңғы быуатта, кемдәрҙәндер күрмәксе, бер-беребеҙгә "Фәлән Фәләныч", тип өндәшергә өйрәнеп барабыҙ шикелле, йәмәғәт. Шуға күрә лә, халҡыбыҙҙың бына ошо ҡиммәте бер аҙ онотолоп барғандай.**

# ҠОҘАЛАР-ҠОҘАСАЛАР...

## йәки Райондарыбыҙҙағы диалекттар хаҡында



Райондарыбыҙҙың береһендә туйҙа ҡатнашырға тура килде. Беҙҙең яҡтан барған төп ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙың икеһенә лә 42-43 йәштәр тирәһе. Тәүге улдарына килен алып, шатлыҡка күмелеп йөрөүҙәре. Киң республикабыҙҙың һәр районында үҙенсә һөйләшеү диалекттары булған һымаҡ, туған-таныштарҙың бер-береһенә өндәшеү атамаларында ла айырма бар икән. Теге яҡтың бәғзе ҡоҙалары әлеге беҙҙән барған төп ҡоҙағыйҙы "ҡоҙаса", тип ҡаҡшаттылар. "Нишләп ул һеҙгә "ҡоҙаса" булһын, ти?" - тиеүгә, кемеһелер: "Беҙҙең яҡта йәшерәктәрҙең барыһына ла "ҡоҙаса", ә оло йәштәгеләргә "ҡоҙағый" тип өндәшәләрсе..." - тип яуап бирҙе. Ә бит 80 йәшлек ҡоҙаса йәки 18 йәшлек ҡоҙағыйҙың да булыуы мөмкин! Сөнки, ҡоҙалар яғының барса килен кешеләре лә ҡапма-ҡаршы яҡтар өсөн ҡоҙағый, ә ҡан туғандары - ҡоҙаса була. Нисә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан. Ә инде кемгәлер ҡоҙаса булған кеше, ваҡыт үтеү менән, ҡартайып китеүенә лә ҡарамаҫтан, барыбер ҡоҙаса булып ҡала. Мәҫәлән, мин өйләнгән саҡта минең апайҙарыма әле утыҙ йәш тә тулмағайны. Ҡатынымдың туғандары уларға "ҡоҙаса" тиҙәр ине. Хәҙер ул апайҙарым, әйтәйек, һикһәненсе йәште ҡыуа. Хатта туҡһан йәштә лә минең ҡәйнештәр, ҡайнағалар өсөн улар әле булһа - ҡоҙаса...

Кейәү йәиһә килен кеше беҙҙең яҡта хәләл ефетенең атаәсәһен, ҡартатай һәм өләсәйҙәрен дә "ҡайным" һәм "ҡәйнәм", тип атай. Ҡәйнәһенә килендәрҙең "бейем" тип өндәшкәндәре лә бар. Хәләл ефетенең ағаларына, апаларына "ҡайнаға", "ҡәйенбикә" тип, ҡусты һәм һеңлеләренә "ҡәйнеш", "балдыҙ" тип (килен кеше иренең һеңлекәшен "бикәс" тип атай) өндәшәләр. Ҡайһы бер районда (мәҫәлән Белорет районында) еңгәһе бикәсенә "ҡәйен һеңле" тип тә әйтә. Кәләштең апайһеңлеләренең ирҙәрен "бажа" тип атау бөтә ерҙәлер , тип уйлап йөрөһәм, бәғзе бер районда "бажай" тип тә әйтәләр икән. Ә ҡатын-ҡыҙ иренең еңгәләренә һәм килендәренә "апһын" тип өндәшә. Ниндәйҙер райондарҙа ире ыңғайына "еңгәй" һәм "килен" тип өндәшеүселәр ҙә бар. Ҡайнағаларының һәм ҡәйенбикәләренең хәләл ефеттәренә "ҡәйен еҙнә", "ҡәйен еңгә" тип, ҡайны һәм ҡайныһын "әбейбабай", хатта "атай, әсәй" тип атағандар ҙа бар.

Баймаҡ яҡтарында атаһының атаһына һәм әсәһенә "ҡартатай", "ҡәртәсәй", тип, ә әсәһенең ата-әсәһенә "картатай" һәм "өләсәй" тип әйтеү киң таралған. Бер ниндәй ҙә туған булмауына ҡарамаҫтан, ата-әсәһенән олораҡ булған бөтә кешеләргә лә "олатай" һәм "инәй" тиҙәр. Беҙҙең яҡтан ниндәйҙер районға килен булып барған берәү: "Иремдең ауылдаштары мине шундай нык оҡшаттылар, айырыуса оло йәштәге әбей-бабайҙар", - тип һөйләгәнен хәтерләйем. Барса оло кешегә был йәш килендең "олатай, инәй", тип өндәшеүҙәре оҡшап ҡалған икән. Сөнки ул районда "инәй" тип фәҡәт әсәләренә, ә "олатай", тип тик үҙенең ата-әсәһенең атаһына ғына өндәшәләр икән.

Бер ғаилә эсендә бер-береһенә ағай һәм апай, ҡусты һәм һеңлем тип өндәшеүҙәр бөтә райондарҙа ла бер иш икән, тип уйлап йөрөй торғайным. Әммә ҡайһы бер райондарҙа ҡустыһын "мырҙам", мыртыйым", хатта, "иркәм", ә һеңлеһен "һылыуым" тип атаған райондар ҙа бар. Һеңлеһенә ағайҙары беҙҙең Баймаҡ яғында "ҡарындаш" тип тә өндәшәләр. Бына ошолай итеп ғаилә эсендә бер-береңә мөрәжәғәт итеү ҙә береңә-берең хөрмәт тойғоһон һаҡлауҙа ҙур роль уйнайҙыр, тип уйлайым. Бәғзе бер ғаиләләрҙә хатта үҙенән күпкә олораҡ ағай-апайҙарын да тик исемдәре менән генә атау осраҡтары бар. Бер ҡараһаң, бының һис бер насар яғы юҡ һымаҡ та, икенсе яҡтан - шулай ҙа, килешеп етмәгән кеүегерәк.

Әбйәлил районы, шул райондың сигендә урынлашҡан Баймаҡ, Белорет, Бөрйән район ауылдарында атаһынан олораҡ ир кешеләргә "апа" тип өндәшәләр. Беҙ уҡығында медицина институтының дөйөм ятағының ҙур ғына бер бүлмәһендә йәшәнек. Унда Баймаҡ, Ишембай, Ғафури, Яңауыл, Бөрйән районы вәкилдәре йыйылғайны. Бөрйән районынан булған бер егет "апам", тип берәй кем хаҡында һөйләй башлаһа, Ишембай егете уға: "Һин әйтеп һөйлә, ҡайһы апаң хаҡында һүҙ - малай апаңмы, әллә ҡыҙ апаңмы?" тип уны шаярта торғайны. Баймаҡ районы ла майҙаны буйынса ҙур ғына бит инде. Ана шул бер район эсендә генә лә һөйләшеү диалекттары айырмаһы ныҡ һиҙелә. Быны мин үҙемдең ғаилә миҫалында ла килтерә алам. Хәләл ефетем Темәскә яҡынраҡ булған (Әбйәлил сигенән алыҫ түгел) Байым ауылынан. Ә мин Йылайыр сигендәрәк тыуып үҫкәнмен. Улдарым минеңсә һөйләшә. Минең ағайымдарҙы һәм ҡайнағаларҙы "олатай" тип өйрәнгән улар. Элегерәк шул Байым ауылына сираттағы ялыма ҡайтҡанда минән олораҡ бажалар ҙа ғаиләһе менән ҡайны йортона ҡунаҡҡа килгәйне. Кискә ҡарай ҡәйнәм минең бер улыма:

- Салауат, бар әле, апаларыңды сәй эсергә саҡырып индер, - тип, йомош ҡушҡан икән. Ә малай икенсе бүлмәлә инде йоҡлап киткән ҡыҙҙарҙы уятҡылап йөрөй башлаған. Өләсәй кеше тағы:

- Нишләп уларҙы уятаһың, ашап ятты бит улар! - тигән.

- Өләсәй, һин үҙең "апаларыңды саҡыр", тинең дә баһа!

- Ана, Әхәт, Рәхмәтулла апаларыңды саҡыр! - ти икән ҡәйнәм.

- Улар нишләп апай булһын, олатайҙар ҙа баһа!..

Шуға күрәлер ҙә, кемдеңдер апаһы, йәғни ҡатын-ҡыҙ хаҡында һүҙ барғаны аңлашылһын өсөн, ул яҡта "апайың", "апайы", тип әйтәләр. "Апаң", йә "апаһы" тип әйтһәләр, тимәк, һүҙ ир-ат хаҡында бара...

Күрше-күлән, дуҫ-иш һәм тиң-тоштар араһындағы берберәңә өндәшеү атамаларын да ауыл-тирәләрендә киң ҡулланалар. Мәҫәлән, бер йәштә булған тиҫтерҙәр "ҡорҙаш" (ҡорҙашбикә) тип, ә бер иш исемле булған ике кеше бер-береһен "аҙаш" тип атай. Дуҫының ҡатынына "һыйлым" тип әйткеләгәндәрен элегерәк ишетә торғайным.

Һәммәбеҙ ҙә иң йыш ҡулланған ҡәҙерле исемдәребеҙ - атай һәм әсәй төшөнсәләре лә республикабыҙҙың төрлө урынында төрлөсә яңғырай. Күп кенә районлар ғәзиздәренә "атай" һәм "инәй" тип өндәшә. Борон беҙҙең яҡтарҙа ла шулай һөйләшкәндәрҙер, моғайын, тигән һығымтаға киләм. Әсәйем йыш ҡына Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылғанда: "Балаларымдың, ейән-ейәнсәр-ҙәремдең атинәле (ата-инәле) булыуын насип ҡыл", - тип әйтә ине. Ҡаҙҙар хаҡында һүҙ барғанда ла "аталыҡ", "инәлек" тип атайбыҙ. Кәләш әйттергәндә кейәү кеше тарафынан "ата туны" һәм "инә туны" бүләккә биреү йолаһы ла бар. Бына ошоноң һымаҡ аралашыуҙарҙа, бәлки, тағы башҡа төрлө атамалар ҙа булыуы мөмкин. Ошо хаҡта ҡыҙыҡһынып уҡыусылар булыуына шикләнмәйем, хатта кемдәрҙер гәзитебеҙҙә тағы ниҙер яҙып сығарыр, тип тә өмөт итәм.

Ошо мәҡәләм менән файҙаланып, яҡташтарыма йәнә бер теләгемде лә еткерергә ниәтләйем. Төрлө район вәкилдәре йыйылышҡан ерҙә бәғзеләр: "Беҙҙең яҡтар ғына башҡортса таҙа һөйләшә", - тигән бәхәс сығара башлай. "Улай түгел, ә былай тип әйтелә ул башҡортса", - тип ҡайһы берәүҙәр "сепсей" булып үҙенекен иҫбатларға ярата. Минең фекеремсә, һәр райондың диалектын да хөрмәт итеп, һәммәләрен дә өйрәнергә тырышырға тейешбеҙ. Был һис кенә лә телебеҙҙе боҙоуға килтермәйәсәк. Мәҫәлән, беҙҙә "һыйыр һауырға" тип әйтәләр. Ә Архангел районындағы халыҡ "һаумаға" тип һөйләшә. "Кейәү" тигән боронғо шаян йырҙа ла:

*"...Баҫтым, баҫтым баҡмаға,*
*тәҙ(е)рәне ҡаҡмаға.*
*Эте сыкты өрмәгә,*
*ҡыҙы сыкты күрмәгә..."*

- тип йырлайҙар. "Түбәтәй" тигән һүҙҙе ҡайҙалыр "тәүәтәй" йә "таҡыя" тиҙәр. Берәй меҫкен кешене йәлләгәндә, беҙҙең яҡта "бахыр", тиһәләр, ырымбурҙар вафат булған кешене шулай тип атайҙар икән.

Урал аръяғы райондарында батҡаҡты "ҡойо" тиҙәр, ә башҡа күп кенә райондарҙа был һүҙ - шишмә сығанағын, йәки ҡоҙоҡто аңлата. Ҡоҙоҡ тигәндәй, был һүҙҙе "ҡотоҡ" тип тә әйтә бәғзеләр. Учалы районының ҡайһы бер ауылдары "көскә барып еттем", тигәнде "нәслә барып еттем", тип әйтә. Мин хеҙмәт иткән дәүерҙә Әлшәй яғынан булған бер прапорщик: "Хәлил ағай, ҫин миңә берәй справка яҙып бирҫәнә", - тип әйткәне хәтеремдә. Шулай уҡ, әлеге әйткәндәй, "сеп-сей" башҡорттар йәшәгән үҙебеҙҙең Баймаҡ районында ла "барғаннар", "килгәннәр", "башҡортлар" "ҡәйнешләр", тип көнбайыш (Йылайыр сиге) яҡтары һөйләшһә, Әбйәлил тирәләре, әҙәби телгә ярашлы, был һүҙҙәргә "дар", "дәр", "тар", "тәр" ҡушып "дөрөҫ" кенә итеп әйтә. Әммә, бәғзе ваҡыт улар ҙа үҙҙәре бер "төрҙөрәк" итеп "һөйҙәшә баштай". Орлоҡлоҡ картуфты "орҙоҡтоҡ кәртүк" тип әйткәндәр ҙә бар. Ҡыйғы яҡтарыныҡы һымаҡ, "килдем ҡый", "барҙым ҡый", тип һөйләшеүҙәрҙе, әрмелә хеҙмәт иткән дәүерҙә, Пермь өлкәһенән килгән башҡорттарҙан да ишеткеләй торғайным. Был "ҡушымталар", моғайын, ҡаҙаҡтарҙың "бирҙем ғуй", "алдым ғуй"ҙары менән бер тамырлыларҙыр, тип уйлап ҡуйҙым. Һүҙҙәребеҙ нисек кенә һәм ҡайҙан килеп сыҡмаһын, телебеҙҙең ифрат та бай булыуы ҡыуаныслы. Минеңсә, берберебеҙҙең бына шундай һөйләшеү үҙенсәлектәрен инҡар итмәй, киреһенсә, уларҙы өйрәнеү - тик телебеҙҙең байлығын ғына арттырыуға булышлыҡ итәсәк, иншаллаһ. Башҡаса фекерләүселәрҙең дә булыуына шигем юҡ. Яҙһағыҙ - кинәнеп уҡыясаҡмын, иншаллаһ.

**Һөйөндөк ҠЫУАНДЫҠОВ.**

✓ *Аҫыл башҡорт телендә "п" өнө башта килгән һүҙ юҡ. Шуның өсөн дә башҡорттарҙың сит телдән үҙләштерелгән "п" өнө башта килгән һүҙҙе күпселек осраҡта б-ға алмаштырғаны билдәле.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАЙЛЫ БАЛЫҠҠА...

## өҫтөнлөк бир

■ Ауыр мәктәп сумкалары балаларҙа арҡа ауыртыуын барлыҡҡа килтерә, тип уйларға күнеккәнбеҙ. 69 төрлө тикшеренеүҙәрҙе анализлағандан һуң, ғалимдар был фекерҙең дөрөҫ түгеллеген асыҡлаған. Әммә ҡыҙыҡлы асыш та яһаған Сидней университеты белгестәре. Әгәр ҙә уҡыусы ауыр сумка йөкмәп йөрөйөм, тип уйлаһа, арҡа ауыртыуына ла йышыраҡ зарланған. Статистика буйынса, балаларҙың 18-24 проценты айына бер тапҡыр булһа ла арҡа ауыртыуы тураһында белдергән. Үсмерҙәр араһында бындайҙар һаны күберәк булып сыҡҡан. Ауыртыуҙы нимә тыуҙыра - быны табиптар әйтә алмай. Тик бында мәктәп сумкаһын ғәйепләү хата, ти улар. Муйын ауыртыуы менән дә ошондай уҡ хәл. Күптәр быҙың сәбәбен компьютерҙар һәм смартфондар менән бәйләй. Бразилия ғалимдары асыҡлауынса, муйыны ауыртҡан сирлеләр башҡаларға ҡарағанда компьютер менән оҙағыраҡ ҡулланмай. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, арҡа, муйын ауыртыуҙары бер факторҙан ғына барлыҡҡа килмәй. Шул уҡ китап уҡыу ҙа арҡала көсөргәнеш барлыҡҡа килтереүе ихтимал. Ваҡытында һәм дөрөҫ ял итә белеү был күнелһеҙлектәрҙе булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Medisys компанияһы хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, даими рәүештә йоҡо туймау организм өсөн эскелек һөҙөмтәһендә килгән зыянға тиң. 6 сәғәттән кәм йоҡлау һимереүгә, депрессияға, инфаркт һәм инсультҡа килтереүе ихтимал. Аҙ йоҡлау һөҙөмтәһендә иғтибар түбәнәйә, кеше ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итә алмай башлай. Шуға ла бындай ваҡытта автомобиль йөрөтөү ҙә хәүефле. Был иҫерек көйөнә рулгә ултырыу менән бер. Белгестәр раҫлауынса, йоҡо грелин, кортизол, лептин гормондары күләмен нормала тотоуға булышлыҡ итә. Һанап кителгән гормондарҙың аппетит менән бәйле булыуын беләбеҙ. Тимәк, йоҡо туймаһа, аппетит күтәрелә, кеше күберәк ашай башлай һәм артыҡ ауырлыҡ йыя. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, йоҡо етмәһә, мейе үҙ-үҙен "ашай" башлай. Уның һөҙөмтәһендә Альцгеймер ауырыуы һәм башҡа неврологик тайпылыштар барлыҡҡа килеүе бар.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьҫир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана. Балаға бүләк эшләп, уны ҡыуандырһағыҙ икән, ул да һеҙҙе үҙен яҡшы тотоуы, дәрестә алған яҡшы билдәләре менән бәхетле итергә тырышасаҡ, тимәк, ул ала белеү генә түгел, бирә белеү ҙә мөһимлеген аңлаясаҡ, ти ғалимдар.

■ Лидс университеты хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, майлы балыҡ, борсаҡ, йәшел фасоль ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн файҙалы. Аҡ дөгө һәм макарон кеүек рафинадланған углеводтар иртә менопаузаға килтерә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майлы балыҡ менопауза етеүен яҡынса 3 йылға оҙайта. Ә макарон ризыҡтары һәм дөгө ашау һөҙөмтәһендә ул 1,5 йылға иртәрәк башланған. Менопауза иртә килгән осраҡта остеопороз һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефе лә арта.

БАШҠОРТ ҺҮҘЛЕГЕ

**Ниһайәт, ваҡыт табып, һеҙгә, "Киске Өфө" гәзите редакцияһына, хат яҙып ебәрергә булдым. 2016 йылдан бирле йыйына инем инде, сөнки гәзитте шул йылдан ғына алдыра башланым. Осраҡлы тип әйтерлек ҡулыма килеп эләккән "Киске Өфө" күңелемә май булып яғылды ла ҡуйҙы һәм мин:"Нишләп мин был гәзитте ошоға тиклем күрмәй, белмәй йөрөнөм икән?"- тип аптыраным.**

**"Киске Өфө" гәзитендә күтәрелгән бөтөн мәсьәләләр ҙә минең өсөн бик мөһим һәм көнүҙәк, шуға ла мин уның килгән бер һанын (йәл булһа ла) киҫкеләп, тематика буйынса айырып туплап барам. Үҙем дә туған телебеҙҙең байлығы, таҙалығы, дөрөҫ яҙылышы һәм дә ҡулланылышы мәнфәғәтендә хәлемдән килгәнде эшләргә тырышам, кәрәк икән, тәнҡитләп алыуҙан да тартынмайым. Тел хазиналарыбыҙ уртаҡ байлығыбыҙ бит. Шуға ла ошо мәсьәлә буйынса килешмәгән саҡтарымда ризаһыҙлығымды белдереп, гәзиттәргә хаттар ҙа яҙып ебәргеләйем. Мәҫәлән, бына нисә йылдар инде "бәйғәмбәр" һүҙен "пәйғәмбәр" тип яҙыуҙарға ҡаршы ризаһыҙлығымды белдерә килəм. "Йәшлек" менән "Киске Өфө"лә генә "бәйғәмбәр" һүҙе дөрөҫ итеп яҙыла, ә ҡалғандар, мәҫәлән, "Башҡортостан" гәзите менән "Башҡортса дини календарь" һаман "пәйғәмбәр" тип яҙа. Был турала мин Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәт менән дә һөйләшеп ҡараным, әммә ул, ҡайһы варианттың дөрөҫлөгө-дөрөҫ түгеллеге иҫбат ителмәгән, тип кенә ҡуйҙы. Башҡорт телендәге Ҡөрьән-Кәримдә "бәйғәмбәр" тип яҙылғас, башҡалар өсөн дә ул өлгө булырға тейештер бит?**

**Бер саҡ ошо һорауымды Сәлмән Ярмуллинға төбәгәйнем, ул мине ҡәнәғәтләндерерҙәй яуап биргәйне. Әммә шунан һуң да хата төҙәтелмәне. С. Ярмуллиндың был мәсьәләгә ҡарата фекерен "Киске Өфө"лә лә баҫтырһағыҙ ине. Бәлки, был юлы ниндәйҙер дөрөҫ фекер тупланыр ошо мәсьәләлә.**

**Дим ӘХМӘҘИЕВ.**
**Нефтекама ҡалаһы.**



# БӘЙҒӘМБӘРМЕ, ПӘЙҒӘМБӘРМЕ?

Дим Әхмәҙиев дөрөҫ әйтә, бик яҡшы тел белгестәре тарафынан эшләнгән башҡорт телендәге Ҡөрьән-Кәримдә алынған терминдар башҡалар өсөн өлгө булырға тейеш. Ғәрәп булмаған халыҡтар телендә сыҡҡан ошондай Ҡөрьән тәфсирҙәре араһында тиңе булмаған ошо китапты әҙерләгән авторҙар коллективы юҡҡа ғына республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булмағандыр бит!

Яныраҡ башҡорт телендә ошо терминдың ҡайһы варианты файҙаланылырға тейеш тигән бәхәс интернеттағы бик күп зыялы башҡорттарҙы туплаған бер төркөмдә лә ҡупты. "Бәйғәмбәр" тип "башҡорт"лаштырыу кәрәкмәй, "п" булырға тейеш", - тип һанаған милләтебеҙҙең аҫыл заттары булған атаҡлы яҙыусы Йыһат ағай Солтановҡа ла, "Халыҡ пәйғәмбәр тип әйтә бит. Шулай яҙылырға тейеш инде ул", - тигән ғалимә Ғәҙилә апай Бүләковаға ла, "Дөйөм төркиҙә шулай. Ул бит парта урынына барта тип һөйләшеү ише генә түгел - Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле. Диалект та, тел дә әйләнмәгән - акцент, унан уҡымышһыҙлыҡ та", - тип иҫәпләгән әҙибә һәм йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл апай Ситдиҡоваға ла ихтирамым бик ҙур. Иллә мәгәр был йәһәттән улар менән килешмәйем һәм "бәйғәмбәр" тип яҙыусы "Киске Өфө" менән "Йәшлек" гәзиттәрен хуплайым. Улар икеһе лә элек-электән алдынғы ҡарашлы, һүҙлек яһаусыларҙан ун йыллап алда барыусы, ысын мәғәнәһендә халыҡ гәзиттәре булыуын шуның менән тағы бер ҡат иҫбатлай.

Беренсенән, "пәйғәмбәр" ул төркиһүҙе түгел, төркиҙәргә фарсы теленән ингән. Икенсенән, әгәр ҙә ул һүҙ тәү сығанаҡта нисек әйтелгән башҡорт телендә лә тап шулай әйтелергә һәм яҙылырға тейеш тигән принципиаль позицияла торабыҙ икән, ул сағында ул принципты фарсынан ингән бөтөн һүҙҙәргә ҡарата ла файҙаланырға кәрәктер бит. Ул сағында, әйҙә, "батша" һүҙен дә, элек беҙҙең өләсәйҙәр һөйләшкән кеүек барта, бартийә, барахут тип һөйләшмәйек тип, лексикондан алып ташлап, тик фарсыса "падишаһ" тип кенә яҙайыҡ һәм әйтәйек. Сөнки ул - тап шул падишаһ һүҙенең башҡортсаға ауҙармаһы.

"Бот" һүҙен дә, тамырһүҙгә тура килһен тип, "пот" тип яҙыуға күсәйек. Тимәк, татарҙар, һеҙҙенсә, "патша", "пот" тип дөрөҫ яҙа булып сыға ла, ә үҙ сингармонизм ҡанундары булған башҡорт телендә "батша, бәйғәмбәр, бот" тип яҙыу дөрөҫ түгел.

Өсөнсөнән, беҙҙең Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла яҡтарында ябай халыҡ, теле әҙәби тел йоғонтоһона бирелмәгән ололар Бәйғәмбәр тип әйтә. Башҡа төбәктәр тураһында әйтә алмайым, махсус өйрәнмәнем, әммә Ғәҙилә апайҙың ауылдаштары ауыҙынан Бәйғәмбәр тигәнде үҙ ҡолағым менән ишеттем, Аллаһы Тәғәлә үҙе шаһит!

Шулай уҡ, әстәғәфируллаһ, "бәрей" һүҙен дә коньяҡ, коньяҡ-көнсығыш төбәктә ололар "пәрей" тимәй. Ул һүҙ лә "б" менән яҙылырға кәрәк тип иҫәпләйем. Әгәр үрҙә телгә алынған принципҡа барып, "п" менән яҙабыҙ икән, ул сағында, шул уҡ принципты боҙоп, нишләп "бире"не фарсыса "пире" тип яҙмайбыҙ, Аллаһ һаҡлаһын! Башҡорт телендәге "Енләнеү"ҙең синонимы булған "Бирләнеү" һүҙен дә "Пирләнеү"гә алыштырайыҡмы инде?

Аҫыл башҡорт телендә "п" өнө башта килгән һүҙ юҡ. Шуның өсөн дә башҡорттарҙың сит телдән үҙләштерелгән "п" өнө башта килгән һүҙҙе күпселек осраҡта б-ға алмаштырғаны билдәле. Ә бит ундай һүҙҙәр бер фарсынан ғына инмәгән беҙгә. Мәҫәлән, урыҫ теленән килеп ингән "паренька" һүҙен дә бит күп башҡорттар, рәхәтләндереп, ауыҙ тултырып, "бәрәңге" тип әйтә һәм яҙа. Нишләп асыл һүҙҙе боҙабыҙ, әйҙәгеҙ, паренькаға, һис юғында, пәрәңкегә күсегеҙ. Әллә теге принцип төрлө һүҙҙәргә ҡарата төрләсә эшләйме? Ул сағында ул ниндәй принцип булып сыға һуң?

Дүртенсенән, Бәйғәмбәр һүҙе ул ғәрәп телендәге Рәсүлуллаһ, йәғни Аллаһ Илсеһе мәғәнәһен бирмәй. Ул ғәрәптең "нәби" һүҙенә ише. Урыҫса Аллаһ илсеһе - Посланник, ә Бәйғәмбәр менән Нәби пророк була.

Донъя яратылғандан алып кешелеккә 124 мең бәйғәмбәр килгән, ә Аллаһ Илселәре - 25 кенә. Бәйғәмбәрҙәр араһында башҡорттар ҙа булғанына иманым камил. Йылайыр районының Хәйбулла районы менән сиктәш бер төпкөл, таулы-урманлы төбәгендә, Йыһат ағайҙың тыуған еренән бигүк алыҫта түгел ерҙә, совет осоронда ла манараһы ауҙарылмай ултырып ҡалған мәсете булған хикмәтле Ҡаҙырша ауылы эргәһендә тағы ла хикмәтлерәк бер урын бар. Заманында данлыҡлы Мөжәүир аулиә килеп, эргәһендә өсәр көн туҡталып, намаҙ-доғалар ҡылып ятҡан, ана шул 124 мең бәйғәмбәрҙең береһе булған башҡорт бәйғәмбәренең эҙҙәрен һаҡлаған Бәйғәмбәр ташы тигән урын ул. Урындағы халыҡ уны бер ҙә "Пәйғәмбәр ташы" тимәй. Белеүселәр, һынсылдар әйтеүенсә, ул ерҙән шундай көслө ыңғай энергия сыға, күрер күҙгә нур бөркөлөп тора. Мәшһүр Мөжәүир хәҙрәттең унда йыш булыуы ла - быға ҙур дәлил.

Шул уҡ ваҡытта "Башҡорт халыҡ ижады"ның тултырылып, ҡабаттан эшкәртелеп сығарыла башлаған томдарында ла "бәйғәмбәр" тип алына. Уларҙы ла атаҡлы тел һәм әҙәбиәт ғалимдары әҙерләгән.

Һүҙемде тамамлап, шуны әйтмәксемен: беҙ ғәрәп-фарсынан да, хатта төрки-татарҙан да ныҡ айырылып торған, ғөмүмән, донъялағы бөтөн телдәрҙә лә акцентһыҙ һөйләшә алырҙай һығылмалы, йомшаҡ, наҙлы, үҙ ҡанундары булған телле халыҡбыҙ. 11-се быуатта уҡ данлыҡлы Мәхмүт Ҡашғари үҙенең "Диуани лөғәт әт-төрк"ен ижад иткәндә юҡҡа ғына башҡорт телен бөтөн төрки телдәрҙән бер яҡ ситкә ҡуймаған. Үҙебеҙ булып ҡалырға кәрәк. Урыҫтың "печь" һүҙен - мейес, "печать" һүҙен мисәт тип, ыһ та итмәй, үҙебеҙсә яҙған кеүек, төрки-татарға эйәрмәйенсә, "Бәйғәмбәр" тип, үҙебеҙсә яҙайыҡ. Күптәр һылтанғанса, ул һүҙҙең һүҙлеккә ингәнен көтөп ултырмайыҡ, ул һүҙлек килеп сыҡҡансы тағы 20-30 йыл үтеп китеүе ихтимал (Бәрәңге һүҙенең һүҙлеккә ингәнен көтөп ултырманыҡ бит!)

**Сәлмән ЯРМУЛЛИН.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# УРАҘА - ӘҘӘП МӘҘРӘСӘҺЕ



**Бер ваҡыт Шәғбан айының һуңғы йомаһында Рамаҙан айының әһәмиәте тураһында аңлатып, мосолмандарҙы ураҙа тоторға саҡырып һөйләгән вәғәзендә Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм: "Эй, кешеләр! Аллаһтың игелектәр, мәрхәмәт-шәфҡәт һәм гонаһтарҙы ярлыҡауҙар менән тулы бер айы яҡынлашып килә. Аллаһ уны Үҙе бөтә айҙар араһында иң яҡшыһы тип атаны.**

Аллаһ ҡаршыһында уның көндәре - көндәрҙең, төндәре - төндәрҙең, сәғәттәре сәғәттәрҙең иң яҡшыһы. Был айҙа һеҙ, Аллаһтың үҙ рәхмәтенә лайыҡлы кешеләре булараҡ, Уның үҙенә ҡунаҡҡа саҡырылаһығыҙ. Был айҙа һеҙҙең һулыш алыуҙарығыҙ - Аллаһты данлау, йоҡоларығыҙ Уны һөйөү билдәһе була. Ғәмәлғибәҙәттәрегеҙ ҡабул ителә, доғаларығыҙға яуап бирелә. Шуның өсөн дә ихласлыҡ һәм саф күңел менән Үҙегеҙҙең Раббығыҙ - Тәрбиәсегеҙ булған Аллаһтан ураҙа тотоу, Уның Китабы - Ҡөрьәнде уҡып барыу өсөн көс-ҡеүәт биреүен үтенеп һорағыҙ. Сөнки был бөйөк айҙа Аллаһтың ярлыҡауына лайыҡ була алмағандар - бәхетһеҙ. Был айҙағы асҡа йөҙәп, һыуға һыуһап йөрөүҙәрегеҙ Ҡиәмәт көнөндәге ас тороуҙарҙы һәм һыуға һыуһауҙарҙы хәтерегеҙгә төшөрһөн, фәҡир-мескендәргә, мохтаждарға саҙаҡа таратығыҙ, атаәсәләрегеҙҙе хөрмәт итегеҙ, балаларға кеселекле булығыҙ, ҡәрҙәшлек бәйләнештәрен нығытығыҙ. Телегеҙҙе яман һәм гонаһлы һүҙҙәрҙән һаҡлағыҙ, тыйылған нәмәләргә күҙ һалмағыҙ, ишетмәҫкә тейешле нәмәләрҙе тыңлап йөрөмәгеҙ. Үҙ балаларығыҙ хәстәрлектәрҙән мәхрүм ҡалмаһын тиһәгеҙ, башҡаларҙың етем балаларына мәрхәмәтле булығыҙ!" - тип бик тә әҫәрле вәғәз һөйләй.

Төрлө-төрлө формаларҙа ураҙа бөтә диндәргә хас ғибәҙәт һанала. Исламда ул диндең әһәмиәте яғынан көн дә уҡылып килгән биш ваҡыт намаҙҙан ғына ҡайтыш булып, уның бер терәгенә әйләнә. Исламда ураҙа ашау-эсеүҙәрҙән тыйылып тороу ғына түгел, ә кешене төрлө ҡотҡоларға бирелеүҙән, гонаһҡа бармауҙан һаҡлап тороусы тәрбиә мәҙрәсәһе.

Ай буйы мосолман үҙенең тәртибен паклап тора, холҡон камиллаштыра, күңелен илаһи нур менән яҡтыртып, алдағы көндәрҙә лә әҙәп һәм тырышлыҡ менән йәшәй белергә әҙерләнә. Шуның менән бергә кешелекле һәм еңел үтәрлек дин булған Исламда юлдарҙа йөрөгәндәргә, ауырыуҙары көсәйеү ихтималы булғандарға ураҙа тотоу тыйыла.

Ураҙа тураһында аңлатып бирелгән хеҙмәттәрҙең иҫәбенә-һанына сығырлыҡ түгел. Аяттар ҙа һәр кемгә билдәле, хәҙистәр ҙә етерлек. Уларҙы ҡабатлап тормай ғына беҙ бөгөн дин ғалимдарының ураҙа тураһындағы нәсихәттәренән бер нисә мәғлүмәт биреү менән сикләнербеҙ.

Ураҙа - тәҡүәлек сығанағы. Кешенең рухын тағы ла камиллаштырыу, гонаһтарҙан һаҡланыу юлы, әҙәп мәҙрәсәһе. Гонаһтарҙың бит күбеһе күңелдә оялап алған асыу, аҙғынлыҡ, сама белмәҫ көнсөллөк, нәфсе ҡотҡоларынан тыйыла белмәү сәбәпле тыуа. Ураҙа кеше тәбиғәтендәге бына ошо кәмселектәргә сик ҡуя. Иманлы бәндәләрҙе көндәр буйы - бигерәк тә бына әлеге кеүек йәйге оҙон көндәрҙә - ауырлыҡтар менән һынай.

"Аллаһтың: "Эй, иманлы бәндәләрем!" - тигән һүҙҙәрендәге бөтә гүзәллек тә шунда - улар ғибәҙәттең был төрөн үтәү сәбәпле тыуған арыу-талыуҙарҙы юҡҡа сығара", - тип өйрәткән имам Садыҡ.

"Рамаҙан айында ураҙа тотҡан кешенең бөтә гонаһтары ярлыҡанасаҡ", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

Ураҙа тотоуҙа сама белмәүҙәр ҙә осрап ҡына тора.

Әлбиттә, ураҙаны дин бөтәһенә лә көсләп таҡмай: йәше оло, сәләмәтлеге зәғиф, сәфәрҙәрҙә йөрөгәндә ваҡыты самалы һәм башҡа төрлө сәбәптәр арҡаһында мөмкинлеге сикләнгән мөьминдәрҙе был ауыр вазифанан азат итә. Йәштәрҙе лә туктауһыҙ ураҙа тотоуҙан тыя. Быйын шулай булырға тейешлеген тормош үҙе лә күрһәтеп тора.

Рамаҙан айындағы кистәрҙең берәһендә Бәйғәмбәребеҙҙең сәләмәтлеккә туймаған сәхәбәләренең береһе - Мәтғәм ибн Жүбәйер өйөнә ҡайтып, ауыҙ асырға әҙерләнеп йөрөгәндә хәле бөтөп йоҡоға тала. Уянып киткәндә инде ифтар ваҡыты үткән була. Ашамай ғына йоҡлап, иртән ул тағы ла ураҙаға инә лә, Мәҙинә эргәһендә дошмандарға ҡаршы тотҡарлыҡ булараҡ әҙерләнгән канауҙар ҡаҙыуҙа ҡатнаша. Ас һәм сәләмәтлеге зәғиф булыу сәбәпле, эшләгән ерендә ул аңын юғалта. Быны күреп, Бәйғәмбәребеҙҙең көйефе бик ныҡ ҡырыла.

"Ураҙа, - тигән Ғәли хәҙрәт, - ғәҙәти тормош менән ғүмер итеп яткан сәләмәт кешеләргә тапшырылған дини бурыс".

Ғибәҙәттең төп терәктәренән береһе булараҡ ураҙа Аллаһтың дан-шөһрәтенә лә, бөйөклөгөнә лә бер нәмә өҫтәй алмай, ураҙа мөьминдең үҙе өсөн файҙалы. "Ураҙа менән Аллаһ бәндәһенең ихласлығын һынай", - тип өйрәткән мөьминдәр әмире Ғәли хәҙрәт. "Бөтә ауырыуҙарҙың сығанағы - ашҡаҙан, ашауҙан тыйылыбыраҡ тороу - иң шифалы дауа". "Сәләмәт булырға теләһәң - ураҙа тот", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

"Аҡ епте ҡара ептән айыра алырлыҡ булып таң беленгәнсе ашағыҙ, эсегеҙ, унан төнгә тиклем тағы ла ураҙа тотоғоҙ", - тип өйрәтә Ҡөрьән.

Риүәйәттәрҙең береһендә мөьминдәрҙән Удай бин Хәтәм атлы берәүҙең Бәйғәмбәребеҙгә килеп, аҡ еп менән ҡара епте алдыма ҡуйып, уларға күпме генә ҡарап торһам да, таңды таба алманым, тигән һүҙҙәренән рәхәтләнеп көлә лә Аллаһ илсеһе: "Эй, Хәтәм улы! Бында бит таң нурындағы яҡтылыҡ менән төн (йәки таң) ҡараңғылығы хаҡында һүҙ бара. Таң ҡараңғылығын күреү менән ураҙаңды башла", - ти.

"Аллаһтың әжер-сауаптарына инанып һәм өмөт бағлап, Рамаҙан айында ураҙа тотҡан кешенең электән килгән бөтә гонаһтары ярлыҡаныр".

"Аллаһ юлында бер көн дауамында ураҙа тотҡан теләһә кемдең битен Аллаһ ошо бер көн өсөн уттан етмеш йыллыҡ юлға алыҫыраҡ күсерер", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

**"Башҡортса дини календарь"ҙан.**

### Ураҙаға ниәт һәм ифтар доғаһы

*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.*

*Нәүәйтү ән есүмә саумә шәһри рамаҙанә минәл-фәжри иләл-мәғриби халисән-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһү әкбәр.*

*Мәғәнәһе: "Аллаһы Тәғәлә өсөн тип таң атҡандан башлап ҡояш байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнем. Аллаһ - Бөйөк".*

### Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға

*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.*

*Аллаһүмә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризкикә әфтарту үә лисауми ғадим мин шәһри рамаҙанә нәүәйтү фәғ-фирли мә ҡаддәмтү үә мә әххарту.*

*Мәғәнәһе: "Эй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом. Һиңә генә иман килтерҙем. Эштәремде тик Үҙеңә генә тәүәккәлләйем. Һин биргән ризыҡ менән ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡап ҡына тороусы Аллаһ, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималым булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!"*

**Әйткәндәй, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ураҙа тотоу көндәрен, шулай уҡ фытыр саҙаҡа (мосолман Рамаҙан айы дауамында Ураҙа байрамына тиклем түләргә тейеш), фидиә (әгәр мосолман һаулыҡ тороуы буйынса ураҙа тота алмаған икән) һәм нисәб (зәкәт мөлкәт күләменән сығып иҫәпләнә) күләмен билдәләне. Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин ҡул ҡуйған фәтүәгә ярашлы, быйыл Рамаҙандың тәүге көнө 16 майға тура килә. Ураҙа байрамы 15 июнда билдәләнә. Йәшәү кимәле түбән мосолмандар өсөн фытыр саҙаҡаһы - 50 һум, урта хәллеләр өсөн - 150 һум, хәллеләр өсөн 300 һум тәшкил итә. Ураҙаны ҡалдырған һәр көн өсөн фидиә саҙаҡаһы 180 һумға тиң, был сумма төбәктәге төп аҙыҡтүлек хаҡына ҡарап иҫәпләнә. Ошо аҡса өлкән кешене бер көн туҡландырыуға етергә тейеш. Ураҙа тота алмаған осраҡта диндар айына 5400 һум бирә. Республикала нисәб 224 000 һум күләмендә билдәләнгән. Унан зәкәт 5600 һум (2,5процент) килеп сыға. Әгәр диндарҙың ундай аҡсаһы булмаһа, ул зәкәт түләмәй.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Минор компоненттар булған ризыҡтар

**Фенол кислоталары** - алма, груша, айва, виноград, манго, ҡайын еләге, көртмәле, мүк еләге, ҡыҙыл көртмәле, кәбеҫтә, татлы борос, томаттар, ҡуҙғалаҡ, сельдерей, чабер, ирәүән, портулак, сәй, кофе, шоколад, майлы орлоҡтар, ҡурай еләге, ер еләге, ҡыҙыл виноград һуты.

**Флавоноидтар** - алма, абрикос, персик, слива, манго, цитруслылар, ҡарағат, ер еләге, көртмәле, сейә, гөлйемеш, ҡыҙыл көртмәле, мүк еләге, һырғанаҡ, виноград, терн, һуған, кәбеҫтә, ҡыҙыл кәбеҫтә, төҫлө кәбеҫтә, брокколи, татлы борос, сельдерей, шалҡан, петрушка, йәшел салат, томаттар, редис, ирәүән, ҡуҙғалаҡ, кишер, сөгөлдөр, керән, йәшел һәм ҡара сәй, ноҡот борсағы, борсаҡ, ҡаңлән, ҡара миләш, һыуһар, айыу еләге, бөтнөк, ер сәтләүеге, баҙам, арпа, кукуруз, шоколад.

**Катехиндар һәм таниндар** - йәшел һәм ҡара сәй, виноград, анар, миләш, алма, айва, ер еләге, ҡурай еләге, ҡыҙыл һырғанаҡ, кизил, крыжовник, абрикос, мүк еләге, көртмәле, йәшел ноҡот борсағы, шоколад (какао), фисташка, лавр япрағы, ирәүән, ҡуҙғалаҡ.

**Антоцианд**ар - гөлйемеш, алма, ҡара ҡарағат, мүк еләге, көртмәле, терн, базилик, сейә, ҡыҙыл көртмәле, ҡыҙыл виноград (тышы һәм төштәре), ҡыҙыл кәбеҫтә, ҡыҙыл һуған, кишер, какао.

**Резвератрол** - ҡыҙыл һәм ҡара виноград (тышы).

**Лигнандар** - Ҡытай лимоннигы емештәре, етен орлоғо, кунжут орлоғо.

**Изофлавондар** - соя, ноҡот борсағы.

**Индолдар** - аҡ кәсәнле кәбеҫтә, төҫлө кәбеҫтә, брокколи, брюссель кәбеҫтәһе, шалҡан, кресс-салат, һыйыр шалҡаны, ҡара шалҡан, редис, керән, гәрсис.

**Көкөртлө берләшмәләр** - һуған, һарымһаҡ, урман йыуаһы.

Ҡуҙаҡлыларҙың изофлавондары антиоксидант сифаттарынан тыш, кальцийҙы һаҡлаусы, эстрогенға оҡшаш, гиполипидемик, антиатероген, антиагрегант сифаттарына эйә, остеопорозды һәм яман шештең бер нисә төрөн профилактикалауға ярҙам итә. Антоциандар - күреү һәләтен, баш мейеһенең когнитив функцияларын яҡшырта. Туңдырылған емеш-еләктә лә антоциандарҙың активлығы һаҡлана. Лигнандар антиоксидант булыуҙан тыш, гепатопротектор, аллергияға ҡаршы, антитоксик, вирусҡа, антиагрегент, эстрогенға оҡшаш сифаттарға эйә. Индолдар антиоксидант һәм детоксикация тәьҫире генә яһап ҡалмай, шулай уҡ ҡайһы бер онкологик сирҙәргә ҡарата протектор тәьҫирле. Брокколи ни тиклем йәш, унда индолдар күләме шул тиклем юғары. Туңдырыр алдынан кәбеҫтәне бешекләйҙәр, шуға күрә уларҙа был элемент бер ни тиклем аҙыраҡ һаҡлана.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 14 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.35 "Модный приговор".
12.15, 17.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся! (16+).
16.10 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
19.10 Чемпионат мира по хоккею 2018. Сборная России - сборная Словакии. Прямой эфир. В перерывах - Вечерние новости (с субтитрами).
21.25 "Время".
21.55 "Практика". Драматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 "Познер" (16+).
01.25, 03.05 "Безопасность". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир"
21.00 "Сиделка". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Версия". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Исаев". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай баҡса" (12+).**
**20.00 "Типичная еда севера провинции Аньхой" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан"**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Бесстрашная гиена". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 15 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Давай поженимся!" (16+).
16.15 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.55 "Пусть говорят!" Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Практика". Сериал (12+).
23.15 Чемпионат мира по хоккею 2018. Сборная России - сборная Швеции. Прямой эфир.
01.25 "Вечерний Ургант" (16+).
02.00, 03.05 "Безопасность". Сериал
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Сиделка". 3-я и 4-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Версия". Детективный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент" (12+).**
**18.00 "Бай баҡса" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.00 "История развития электронной коммерции в провинции Аньхой" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2018" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Бесстрашная гиена-2". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 16 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 02.05, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Безопасность". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Сиделка". 5-я и 6-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Версия". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф".**
**20.00 "Знакомство с провинцией Аньхой на высокоскоростном поезде" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Зной". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 17 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 5-я и 6-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "На ночь глядя". Ток-шоу (16+).
01.05 "Безопасность". Сериал (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Сиделка". 7-я и 8-я серии. Остросюжетный сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Версия". Детективный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "История государства Российского" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.00 "Знакомство с провинцией Аньхой на высокоскоростном поезде: снова в дороге" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Зыбучие пески". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 18 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55, 03.50 "Модный приговор". Программа о моде и стиле.
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 04.50 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда". Музыкальное шоу (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Городские пижоны". "Элтон Джон" (16+).
01.50 "Прелюдия к поцелую". Романтическая комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.25 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.25 "Недотрога". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Операция "Эдельвейс". Последняя тайна" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 М.Файзи. "Асылъяр" (12+).**
**14.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**24.00 "Лорд Дракон". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 19 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Время для двоих". Сериал (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Евгений Мартынов. "Ты прости меня, любимая..." (12+).
11.10 "Теория заговора" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Моя мама готовит лучше""
13.15 "Анна и король". Худ. фильм.
16.00 "Роман с камнем". Приключения (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "О любви". Мелодрама (16+).
00.50 "Невероятная жизнь Уолтера Митти". Худ. фильм (12+).
02.50 "Деловая девушка". Худ. фильм (16+).
04.55 "Мужское/Женское" (16+)

### РОССИЯ 1

04.45 "Срочно в номер!-2". Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного". Телеигра.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.00 "Укради меня". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Сила обстоятельств". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
01.00 "Будущее совершенное". Худ. фильм (12+).
03.00 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Вдали от дома: приключения желтого пса". Худ. фильм (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (12+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 Замандаш" (6+).**
**13.15 "Одна из четырех драгоценностей китайского рабочего кабинета" (12+).**
**13.30 "Бай баҡса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 "Ловец ветра". Худ. фильм (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 01.45 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018" (12+).**
**24.00 "Молодой мастер". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 20 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.45, 06.10 "Время для двоих". Сериал.
06.00, 10.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.05 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.10 "Алексей Гуськов. Таежный и другие романы" (12+).
11.15, 12.10 "Таежный роман". Худ. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 "Людмила Касаткина. Укротительница".
15.00 "Укротительница тигров". Комедия.
17.00 "Я могу!" Шоу уникальных способностей.
18.50 "Ледниковый период. Дети".
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Герой". Худ. фильм (16+).
23.50 "Коммивояжер". Триллер (16+).
02.10 "Вне времени". Худ. фильм (16+).
04.05 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер!-2". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается" (16+).
14.00 "Второе дыхание". Драматический сериал. 4 серии (12+).
18.05 "Лига удивительных людей". Развлекательное шоу (12+)..
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Диктор Советского Союза". Док. фильм (12+).
01.30 "Право на правду". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Высокие горы Хуаншань" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Весело живем" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Концерт фольклорного ансамбля песни и танца "Мирас" (12+).**
**19.15 "ФК "Уфа": итоги сезона" (12+).**
**19.45 "Лидеры региона" (12+).**
**20.15 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Проект "А". Худ. фильм (12+).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (28) дүшәмбе | 3:14 | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 15 (29) шишәмбе | 3:12 | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |
| 16 (1) шаршамбы | 3:10 | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |
| 17 (2) кесе йома | 3:09 | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 18 (3) йома | 3:07 | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 19:48 | 20:18 | 22:48 |
| 19 (4) шәмбе | 3:06 | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 19:50 | 21:20 | 22:50 |
| 20 (5) йәкшәмбе | 3:04 | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘСКӘҮҘӘРГӘ БАРЫП...



**Баймаҡ районы Ярат урта мәктәбе уҡыусыһы Гөлзифа Юлдашбаева апрель айында Мәскәү ҡалаһында үткән "Минең бәләкәй тыуған илем" тип аталған мәртәбәле конкурста ҡатнашып, еңеү яулап ҡайтты.**

Был конкурс өс турҙан торҙо. Гөлзифа район этабында уңышлы сығыш яһағандан һуң, республика кимәлендәге ярышҡа Өфө ҡалаһына юлланғанда үҙ алдына "Барыбер еңәсәкмен!" тигән ҡәтғи маҡсат ҡуйҙы. Этнографтар, фән кандидаттарынан торған абруйлы жюри алдында ул "Һай, был иҙеүҙәр!" тигән доклад менән сығыш яһаны. Уның сығышы Ярат ауылы ерлегендә табылған боронғо иҙеүҙәрҙең тарихына, Көньяҡ Урал башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары иҙеүенең тегелеше, биҙәлешенә арналды. Маҡсатына өлгәште Гөлзифа - республика этабында беренсе урын яулаған эше Мәскәүгә сираттағы һайлап алыу турына ебәрелде. Был турҙа ҡатнашҡан 39 кеше араһынан 17 кеше, шулай уҡ Гөлзифа ла ҡатнашыусылар исемлегенә индерелде. Ул апрель аҙағында конкурстың һуңғы этабына Мәскәүгә юлланды.

Гөлзифа "Традицион культура" тип аталған секцияла сығыш яһай. Үҙ ҡулдары менән иждағ ителгән заманса һәм традицион иҙеүҙәр тураһында мәғлүмәт бирә, ошо иҙеүҙәрен һатыуҙан килгән килемдәрен һәм сығымдарын да иҫәпләп күрһәтә. Жюри ағзалары иғтибарына яңы ғына тегелгән иҙеүле ҡулдағенә ҡыуанып, таҡмаҡ әйтеп тыпырлатыусы ҡыҙыҡайҙы һынландырған "Ләүсәтин" бейеүен дә тәҡдим итә. Үҙенең сығышы ваҡытында аудитория менән бәйләнеш булдырырға ла, жюри менән әңгәмәләшергә лә, милли кейемле ҡурсаҡын федераль экология-биология үҙәгенә бүләк итергә лә өлгөрә ул. Педагогия фәндәре кандидаттарынан, музей хеҙмәткәрҙәренән торған жюри ағзалары тарафынан бирелгән һорауҙарҙың һәр береһенә тәплә яуап бирә.

Шулай итеп, Рәсәйҙең бик күп төбәктәренән килгән конкурсанттар араһында башҡорт мәҙәниәтен сағылдырыусы берҙән-бер уҡыусы еңеүсе миҙалын тағып, "Океан" лагерына путевка тотоп, затлы бүләктәр тейәп ҡайтып төштө. Ярат мәктәбе уҡытыусыларының ҡыуанысы сикһеҙ. Ни тиһәң дә, милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы булырҙай ҡомартҡыларҙы һаҡлауҙың, пропагандалауҙың мөһимлеген аңлаған уҡыусының баш ҡалабыҙға барып, башҡорт милләтенең данын арттырып ҡайтыуында уларҙың да өлөшө бар бит.

**Аҡйондоҙ ҒӘНИЕВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# САЛАУАТ ТЕАТРЫ - ТӨРКИӘЛӘ

**Салауат башҡорт драма театры Трабзон ҡалаһында (Төркиә) XIX Халыҡ-ара Ҡара диңгеҙ театр фестивалендә ҡатнаша.**



Быйылғы миҙгелдә Салауат театры репертуары төрөк драматургы Тунджер Джюдженоглуның пьесаһы буйынса ҡуйылған "Көтөлмәгән ҡунаҡ" спектакле менән байыны. 2017 йылдың декабрендә автор Салауатта спектаклдең премьераһына килде, уның юғары художестволы ҡиммәтен билдәләне. Театр коллективы һәм драматургтың емешле ижади хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәһендә коллектив Төркиәгә Театр фестиваленә саҡырыу алды. Ҡара Диңгеҙ буйы илдәренең халыҡ-ара театр фестивалендә йыл һайын донъяның бик күп илдәренән билдәле театрҙар ҡатнаша. Трабзонда фестивалде яраталар, һәм, гәзиттә, бөтә спектаклдәргә лә билеттар тиҙ арала һатылып бөтә. Шулай уҡ фестиваль барышында төрлө саралар ойоштоола, ҡатнашыусылар парады, донъяла танылған режиссерҙар һәм драматургтар менән осрашыуҙар, оҫталыҡ дәрестәре, конференциялар, күргәҙмәләр үткәрелә. Быйыл Трабзон ун туғыҙынсы тапҡыр илдең мәҙәни үҙәгенә әүерелде.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 май "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**13, 14 май "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**15 май "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**16 май Алмас Әмировтың юбилей кисәһе** 12+

**17 май "Mouse story" (Д. Урбан), әкиәт.** Башлана 10.00, 12.00 6+

**17 май "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**18 май "Хуш, миҙгел!"** Театрлаштырылған тамаша 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 май "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия 12+

**17 май "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+

**19 май "Пес Барбос"** (И. Казакова), бәләкәстәр өсөн әкиәт. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 май "Слоненок"** (Р. Киплинг) 0+

**13 май "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+. Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

**18 май "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). Башлана 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**16 май "Филармония тулҡынында -79...80 Fm" 79-сы иждағ миҙгелен ябыу** 6+

**17 май "БашҡортАРТстан" Халыҡ-ара заман сәнғәте фестивале.** Фестивалде асыу 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 май 27-се театр-концерт миҙгелен ябыу. "Матур ғаилә - ил күрке!"** театрлаштырылған концерт 6+

ХӘТЕРЛӘП...

# УЛ ДА ТАРИХ ЯҘҘЫ...



**Ошо көндәрҙә Хәйбулла районында тыуып, бөтә ғүмерен шунда үткәргән мәғариф хеҙмәте ветераны Рәшит Ғимат улы Насировтың был яҡты донъяны ташлап, баҡыйлыҡҡа күсеүен ишетеп, шаңғып ҡалынды.**

Намыҫлы хеҙмәте өсөн "Уҡытыусы-методист", "СССР-ҙың мәғариф отличнигы" билдәләренә лайыҡ булған Рәшит ағай Насиров үҙенең бөтә ғүмерен тыуған халҡының белемен, милли үҙаңын күтәреүгә, үҫтереүгә бағышлап, намыҫлы хеҙмәт итеп, шул арҡала оло абруй яулаған Кеше, Шәхес ине. Минең үҙемә уның менән уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Хәйбулла районында прокурор булып эшләгән дәүерҙә көн дә тиерлек күрешеп, һөйләшеп-аралашып йәшәргә насип булды. Хәйбулла районында уны белмәгән, ихтирам итмәгән кеше булмағандыр, тип уйлайым. Олоһо менән дә, кесеһе менән дә берҙәй итәғәтле, ихтирамлы, матур һөйләшер ине Рәшит ағай. Икебеҙҙең йәш араһы ярайһы уҡ ҙур булыуға ҡарамаҫтан, халҡыбыҙҙың даусыл да, аяныслы ла яҙмышына бер төрләрәк ҡараштан булыу беҙҙе яҡынайтты, тип әйтә алам. Рәшит ағай үҙ халҡының тарихын бик яҡшы белде, уның менән ғорурланды. Уның кеүек үҙ тыуған Хәйбулла районының, үҫәргәндәрҙең тарихын яҡшы белгән кешене мин осратҡаным булманы. Этнография менән ҡыҙыҡһынған, фәнгә ынтылған кеше булараҡ, кистәрен әңгәмәләшеп ултырғанда мин унан Хәйбулла районының ер-һыу атамалары, ғөмүмән, башҡорт тарихы буйынса бик күп мәғлүмәттәр яҙып алдым. Ихлас ҡыҙыҡһынған кешене күрһә, белгәненен йәшермәйенсә, уның менән һәр саҡ уртаҡлашыр кеше булды ул.

Халыҡтың үткәнен белеүҙең ниндәй мөһим нәмә икәнен яҡшы аңлаған педагог был тарихты халыҡҡа таратырға тырышты. Ошо теләктән сығып, ул бик күп тарихи китаптар яҙҙы. Уның "Быуаттар һәм быуындар", "XX быуаттың сәйәси репрессия йылдарында Хәйбулла районы", "1917 йылдарҙағы революцияларҙа башҡорттарҙың ғәмәлгә ашмаған хоҡуҡтары һәм Шөкәрә-Ивановка баш күтәреүе", "Беҙҙең алыҫтағы һәм яҡындағы тарихыбыҙ", "Ибраһим - оло яҙмышлы ауыл", "Аҡъюл ауылы тарихы биттәре", "Аҡъяр ауылы тарихы биттәре" тигән китаптары баҫылып сыҡты. Был китаптарында автор Хәйбулла районы башҡорттарының тарихын дөйөм башҡорт, Рәсәй тарихы менән бәйләй, шул уҡ ваҡытта тыуған халҡы мәнфәғәттәрен, милли хоҡуҡтарын айырып билдәләй. Шуныһы менән уның яҙғандары халыҡҡа яҡын, ҡәҙерле. Беҙҙең ҡайһы бер тарихсыларыбыҙға Рәшит ағай Насировтың шул тарихи хеҙмәттәренән үрнәк алғанда бик тә яҡшы булыр ине. Юғиһә, тыуған халҡы мәнфәғәтен бөтөнләй онотоп, ниндәйҙер бер абстракт хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп яҙылған тарихи хеҙмәттәр ҙә йыш осрай беҙҙә. Ә тарихи хәҡиҡәт бер ҡасан абстракт булмай, сөнки тарихи ваҡиғаларҙы һәр саҡ тере кешеләр үҙҙәренең шәхси йәки халҡының мәнфәғәттәренән сығып тыуҙыра. Шуға күрә тарихи ваҡиғалар ҙа һәр саҡ милләт мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп яҙылырға тейеш. Мәрхүм Рәшит ағай Насировтың тарихи ваҡиғаларға арналған үрҙә һанап кителгән китаптары тап шул үҙ башҡорто мәнфәғәттәрен күҙ уңында тотоп яҙылған әҫәрҙәр. Ул хеҙмәттәре менән Рәшит Ғимат улы Насиров оҙаҡ-оҙаҡ йылдар яҡташтары һәм башҡорт халҡы хәтерендә һаҡланыр, тип өмөтләнәйек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫН...

## замансалаштырыуға ҡаршымын

**Бөгөн башҡорт эстрадаһы яңынан-яңы исемдәр менән тулылана тора. Һәләтле йәштәрҙең күбеһен беҙ белеп тә бөтмәйбеҙҙер, шулай ҙа араларынан үҙенсәлекле тауышы, матур йырҙары менән күңелде яулаусылары һис шикһеҙ бар. Йәшлек - ул үҙе матурлыҡ, үҙе батырлыҡ, был ваҡытта нимә генә эшләһәң дә килешә икән, тип уйлайһың уларға ҡарап. Ошондай башҡарыусыларҙың береһе, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Рәфис СИРУСИН менән таныштырабыҙ бөгөн.**

**Рәфис, исемең һуңғы осорҙа башҡорт эстрадаһында, радио эфирҙарында ла йыш яңғырай. Ижадыңды яратыусыларҙы һинең үҙең тураһындағы мәғлүмәт тә ҡыҙыҡһындыралыр. Кем улы булаһың, ҡайһы яҡтанһың?**

- Мин Баймаҡ районы Күгиҙел ауылында тыуып-үҫтем, йыр-моңға ғашиҡ булыуым атайым Васил, әсәйем Әнисәнән күскәндер. Атайым гармунда уйнай, әсәйем йырлай. Үҙемде иҫләгәндән йырларға яратам, шуға ла 9-сы класты тамамлағандан һуң Сибай сәнғәт колледжының вокал бүлегенә уҡырға киттем. Унан һуң З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтында Фәрзәнә Сәғитова класында уҡыным. Уҡып йөрөгәндә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамблендә йырлап йөрөнөм. "Мираҫ" - минең тәүге эш урыным, ул миңә ныҡ ҡәҙерле. Тәүге һөнәри һабаҡтарҙы ла ошонда алдым, был ансамблгә, хеҙмәттәштәремә рәхмәтлемен. Былтыр йәй Венгрияла фестивалдә ҡатнашып, халыҡты Башҡортостан сәнғәте менән таныштырып, төрлө илдәрҙән килгән артистар менән аралашып ҡайттыҡ. Бөгөнгө көндә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солисымын.

**Тиҙҙән үҙеңдең ҙур концертыңды ойошторасаҡһың. Был һинең ошондай кимәлдә ҙур сәхнәне беренсегә яулауыңмы?**



- Үҙен йырсы тип таныған кеше өсөн һәр сығыш - үҙе бер еңеү. Алты йәштән райондағы йыр бәйгеләрендә ҡатнашып, хатта урындар алып йөрөгәс, ҙур сәхнәнән ҡурҡыу юҡ миндә. 2010 йылда "Ирәндек моңдары"нда - 1-се, 2011 йылда Мәскәү өлкәһенең Тверь ҡалаһында үткән "Дельфийские игры" бәйгеһендә 3-сө урын яулағайным. 2013 йылда "Башҡорт йыры" проектында ҡатнашыу бәхете эләкте. "Башҡорт йыры" ижадыма яңы һулыш өҫтәне. Беренсенән, тамашасы таный башланы. Икенсенән, проект менән бөгөн дә төрлө концерттарҙа ҡатнашырға тура килгәс, яңынан-яңы йырҙар эшләргә тура килә, был да яҡшы этәргес йәш йырсыға. "Башҡорт йыры"нда, шулай уҡ 2015 йылда "Иҙел" фестивалендә, 2015 йылда Ҡаҙанда үткән "Татар моңо" бәйгеһендә, 2016 йылда Рәшит Ваһапов исемендәге конкурста 1-се урындар алдым.

14 май "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтәсәк концертымды иһә тамашасым менән күҙмә-күҙ ҡарашып осрашыу ниәтенән ойоштором. Уны БР Симфоник оркестры, "Ятаған" этно төркөмө, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле биҙәйәсәк. Йырсыларға килгәндә, Илһам Вәлиев, Зилиә Бәхтиева, ҡустым Алмас Сирусин ҡатнашасаҡ.

**Үҙеңде эстрада йырсыһы тип таныйһыңмы?**

- Эстрада йырсыһы итеп кенә ҡарағым килмәй. Буласаҡ концертта ла симфоник оркестрҙың ҡатнашыуы күп нәмәне һөйләйҙер. Үҙемде төрлө жанрҙа йырлай алырлыҡ йырсы итеп күрһәткем килә, шуға ла төрлө яҡлап камиллашырға тырышам. Мәҫәлән, профессиональ композиторҙарҙың йырҙарын башҡарыу үҙе үк башҡа, юғарырыҡ кимәл, шуға ла эстрадала профессиональ композиторҙарҙың йырҙарын йырлауға өҫтөнлөк биреүселәрҙе ихтирам итәм. Сит телдәрҙә йырлау ҙа үҫтерә йырсыны. Халыҡ йырҙарын айырыуса яратам. Бәләкәй саҡта Абдулла Солтанов, Сөләймән Абдуллиндарҙың йырлауын тыңлай инем, урманға, киң далаға сығып, халыҡ йырҙарын йырларға әүәҫләнеп алғайным. Концертымда ла башҡорт халыҡ йырҙары буласаҡ. 2014 йылда Тольятти ҡалаһында үткән "Бөтөн Рәсәй студент яҙы" бәйгеһендә ҡатнашырға тура килгәйне. Унда мин Рәсәй эстрадаһының абруйлы продюсерҙары, йырсыларынан торған жюри алдында "Сибай"ҙы башҡарҙым. Продюсер Максим Фадеев, йырсы Наргиз юғары баһаланы был йырҙы. Шулай уҡ Рәшит Ваһапов исемендәге конкурста ла "Сибай"ҙы йырланым. Йәғни, башҡорт йырын башҡорт ҡына еренә еткереп йырлай ала, башҡорт мәҙәниәтен күтәреү үҙебеҙҙән тора. Шуға ла был мираҫыбыҙға айырыуса һаҡ ҡарайым. Бөгөн күптәр халыҡ йырын замансалаштырып йырлау менән мауыға, быға кире фекерҙәмен. Еңелләштерә торғас, киләһе быуындарға йырҙарыбыҙ бөтөнләй үҙгәреп барып етеүе ихтимал, ул саҡта уның баһаһы булмаясаҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

ЗАУЫҠ

### ХЫЯЛЛАНАМ

*Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ*

Хыялланам, уйланам,
Уйҙарымдың осо юҡ.
Ситлеккә бикләп ҡуйырға
Оятһы бар, ҡошо юҡ.

Бейек тауҙарҙы артылам,
Ете диңгеҙҙе кисәм.
Йәйғорға менеп атланып,
Көслө ел булып иҫәм.

"Улай" түгел, "былай" тиеп
Ныҡышам, ҡарышамын.
Артта ҡалһам да, үтәм, тип,
Бәйгелә ярышамын.

Хыялланам, уйҙарымдың
Орсоҡ кеүек осо юҡ.
Ҡоштар кеүек осам ғына,
Ғәмһеҙҙәрҙең ҡошо юҡ.

### ТАҢ

Ебәк сәсен һирпеп ебәрҙе лә,
Тау артынан ҡояш күренде.
Алтын нурҙар күккә бәрелде лә
Ергә ынйы булып ҡойолдо.

Аттар бауырынан үлән кисә,
Тәмле есен бөркә ҡуҙғалаҡ.
Ыҫыҡ һыуын эсеп эсе ташҡан
Синерткәләр саҡ-саҡ ҡуҙғала.

Туғай яңғыратып ат кешәнәне,
Тертләп ырғып торҙо ҡолондар.
Сыңғырап та китте еҙ ҡыңғырау,
Үрҙә күтәрелде томандар.

Йылға өҫтөн балыҡ һыҙып үтте,
Тулҡынланып ҡуйҙы тын ятыу.
Ҡамыштарҙы әйелеп тал уятты,
Эй, мөғжизә икән таң атыу!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИРҘӘН АШМАҠ БАР,

## илдән ашмаҡ юҡ

Насар арба юл боҙор, насар ҡуштан ил боҙор, насар мулла дин боҙор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Дуҫтарыңды һаҡлап ҡалырға теләһәң, улар менән йыш көрәшмәҫкә тырыш.

**(Тристан Бернар).**

Гел еңергә һәм оторға теләһәң, үҙеңдең уйыныңды уйлап сығар, ә ҡанундарын бер кемгә лә әйтмә.

**(Эшли Брильянт).**

Кешене уның дуҫтарына ҡарап хөкөм итмәгеҙ. Иуданың да дуҫтары бик яҡшы булған.

**(Поль Валери).**

Барлыҡ никахтар ҙа күңелһеҙ тамамлана, тип уйлаусыларҙы мин аңламайым. Миңә ҡалһа, биш никахымдың барыһы ла уңышлы булды.

**(Питер де Врайз).**

**Тағы бер риүәйәт: "Суфый мөғәллиме Баязит үҙенең уҡыусыларына йыш ҡына: "Аң булығыҙ!" - тип ҡабатлай торған булған. Уҡыусылары аңламайынса: "Нимә һуң ул аң булыу?"- тип һораған. Һүҙ менән генә аңғартып булмаҫ, тип, Баязит уҡыусыларын йылға буйына алып киткән. Улар килеүгә Баязиттың ҡушыуы буйынса тар ғына күпер һалып ҡуйылған була. Шунда уҡытыусы былай ти:**

**- "Аң булыу" тигәнде аңлау өсөн һеҙгә хәҙер ошо күпер аша теге яҡ ярға сығырға тура килер".**

**Күпер шул тиклем тар була, шуға ла уҡыусылары уҡытыусыларының тәҡдименә шаҡ ҡата:**

**- Күпер бит бик тар, уның аша сығыу ҡурҡыныс! - ти улар. Баязит уларға:**

**- Һеҙ ерҙән атлағанда ла шундай уҡ тар аралыҡта йөрөйһөгөҙ бит. Ни өсөн ике ярға эленгән күперҙән атлай алмаҫҡа тейешһегеҙ һуң? - ти.**

**Уҡыусыларҙың бер нисәһе күпер аша атларға маташа ла, ҡурҡып, кире борола. Шул саҡта ҡарт мөғәллим күпер аша үҙе сығып китә. Уның артынан бер нисә уҡыусыһы эйәрә. Улар теге ярға сыҡҡас, Баязит алдына тубыҡлана һәм шулай тип ҡысҡыра:**

**- Рәхмәт, уҡытыусыбыҙ, беҙ хәҙер "аң булыу" тигәндең мәғәнәһенә төшөндөк. Күпер аша сыҡҡанда ҡурҡыныс шул тиклем ҙур ине, беҙ бер генә секундҡа ла иғтибарҙы ситкә йүнәлтергә тейеш түгел инек. Аң булыу арҡаһында беҙ был ауырлыҡты еңдек...**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 830/05